ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

10-16 октябрь (ҡарасай) 2020

№41 (927)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Был ҡатындарҙы...** ирҙәре үлтергән



3

**Башҡорт милли ризыҡлы...** ашхана, кафелар кәрәк



6

**Минең хыялымдағы Өфө**



8-9

**Нисә марал йәшәй?**



13

**ТВ-программа** 14

**Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! 2021 йылдың тәүге яртыһы өсөн гәзит-журналдарға яҙылыу бара. ПР905 индекслы "Киске Өфө" аҙналығына республиканың һәр район-ҡалаһында, ауылында 725 һум 58 тингә яҙылып, дуҫлыҡты дауам итергә саҡырабыҙ. Бер-беребеҙгә кәрәкле, бер-беребеҙгә терәкле фекер уртаҡлашыусылар булайыҡ!**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Халҡыбыҙ телендә бер һүҙ һәр ваҡыт доға һымаҡ ҡабатлана: "Донъялар имен булһын!" Ошо теләк шул уҡ суверенитет яулау йылдарында ла, һуңғы осорҙағы төрлө киҫкен ваҡиғалар мәлендә лә телдән төшмәй. Был беҙҙең халыҡтың үҙ-ара мөнәсәбәттәрҙе яйға һалыуҙа тыныс, дипломатик алымдарҙы өҫтөн күреүенән тип уйлайһығыҙмы?

***Рәшит ШӘКҮР, яҙыусы, филология фәндәре докторы, профессор, Салауат Юлаев премияһы лауреаты:*** Эйе, әлеге мәлдә донъяла тыныслыҡ юғалды, халыҡ-ара көсөргәнешле сәйәси һәм иҡтисади хәлдәр өҫтөнә әле тегендә, әле бында ҡыҙыу нөктәләр, хәрби бәрелештәр, һуғыштар сығып ҡына тора. Ошондай шарттарҙа башҡорт халҡы бер нәмәгә ҡарамай, тыныс, һил тормошта йәшәргә тырыша. Тыныслыҡ, именлек һөйөү рухы халҡыбыҙҙа ҡандан, гендарҙан киләлер, тейем. Ни тиһәң дә, ата-бабаларыбыҙҙың бай тарихы шул турала һөйләй. Күтәрелештәр булып торған, әлбиттә, ләкин халыҡ үҙ ерен-һыуын һаҡлап күтәрелһә лә, башҡалар еренә һәм байлығына бер ваҡытта ла яҫҡынмаған. Киреһенсә, электән батша власы хуплауы буйынса Рәсәйҙең эре дворян һәм помещиктары, заводчик-сәнәғәтселәре беҙҙең иң уңдырышлы, бай хазиналы ерҙәребеҙгә һорауһыҙ-ниһеҙ күсеп ултырып, башҡорт ерҙәрен талау, баҫып алыу сәйәсәтен әүҙем тормошҡа ашырған. Бындай иҙеү һәм ҡыҫырыҡлауҙарға урындағы халыҡ тыныс ҡала алмаған, әлбиттә. Башҡорт халҡын тарихсылар һуғышсан, яугир халыҡ тиеп ҡылыҡһырлаһа ла, үҙ ирке өсөн, шулай уҡ кәрәк саҡта Рәсәй хәүефһеҙлеген тәьмин итеп, уны сит баҫҡынсыларҙан яҡлап, яуға күтәрелер булған, мәгәр бер ваҡытта ла ситтәр ерен, уларҙың байлығын үҙләштереү маҡсаты булмаған.

Халҡыбыҙҙың тыныслыҡ һөйөү сифаты һәм шуға бәйле традициялары үткән быуат ахырындағы оло тарихи ваҡиға - Башҡортостан Республикаһының дәүләт суверенитеты тураһында декларация ҡабул иткән көндәрҙә лә асыҡ күренде: был оло сәйәси ваҡиға бер ниндәй талаш-тартышһыҙ, тыныс шарттарҙа имен үтте. Бөгөн нигеҙҙә шул үҙаллылыҡ һөҙөмтәһендә өлгәшелгәндәргә таянырға тырышабыҙ, сөнки республикабыҙ иҡтисад, сәйәсәт, мәҙәниәт һәм рухиәтебеҙ өлкәһендә яңы баҫҡысҡа күтәрелде: үҙ телебеҙҙә китаптар, яңы гәзит-журналдар нәшер ителә башланы, яңы театр бинаһары ҡалҡып сыҡты, туған телебеҙ закон нигеҙендә дәүләт теле статусы алды. Бөгөн бына ошо өлгәшелгәндәрҙе һаҡлау, улар емеше менән тейешенсә файҙалана алыу беҙҙең үҙебеҙҙән тора. Ә был бурыстың төп шарты - республикабыҙҙа тыныс, ижади мөхит булдырыуҙа һәм рухи кимәлебеҙҙе артабан үҫтереүҙә.

Әйләнә-тирәбеҙҙәге төбәктәрҙең сәйәси тотороҡһоҙлоғо, оҙаҡ уйлап тормаҫтан, бер-береһенә ҡаршы һуғыш башлап ебәреүе бөгөн осраҡлы хәл түгел, ә ҡурәләтә береһенең ерен, милкен, байлығын икенсеһе тарафынан баҫып, тартып алырға маташыу, һуғыш арҡаһында кеҫә ҡалынайтыу, капитал туплау. Беҙгә бындай ҡылыҡтар ят. Беҙ, шөкөр, сит халыҡтыҡына, күршеләрҙекенә ҡыҙыҡмайбыҙ, яҫҡынмайбыҙ, кеше өлөшөнә кермәйбеҙ, мәгәр үҙебеҙҙекен һаҡларға тырышабыҙ - бына беҙҙең әхлаҡ доғабыҙ.

**(Дауамы 2-се биттә).**

РЕСПУБЛИКА КӨНӨ МЕНӘН!




## БАШҠОРТ ИЛЕБЕҘ

***Башҡортостан - ҡурай иле,***
***Башҡортостан - Урал ере,***
***Башҡортостан - ҡумыҙ теле,***
***Башҡортостан - ҡымыҙ сере.***
***Ерһенмәгән ҡайтһын кире,***
***Илһенмәгән ҡайтһын кире,***
***Иҫкә алһын туған телен,***
***Башҡортостан - мәңге тере!***

**Әхмәр ҮТӘБАЙ.**

## ФЛАГЫБЫҘ

***Башҡортостан флагында***
***Күк, аҡ, йәшел төҫ уйнай.***
***Зәңгәр күктә талпына ул,***
***Аҫыл ҡош ҡанатылай.***
***Күк төҫ - изгелек билдәһе,***
***Аҡ төҫ - именлек, сафлыҡ.***
***Йәшел - йәшәү мәңгелеге,***
***Татыулыҡ һәм азатлыҡ.***
***Ҡурай сәскәһененң тажы***
***Дуҫлыҡты һынландыра.***
***Гел татыу йәшәгән халыҡ***
***Ерҙә ныҡ баҫып тора.***
***Республикамдың флагы***
***Елберләп саңҡығандай:***
***"Имен, шат, бәхетле булып***
***Йәшәгеҙ бер туғандай!"***

**Әлфиә ӘСӘҘУЛЛИНА.**

12+

*БАШҠОРТСА ҺӨЙЛӘШӘМ*

# ИЛЕН ҺӨЙМӘҪ КЕНӘ ТЕЛЕН ҺӨЙМӘҪ

– Алло, ҡыҙым, привет, был маманд, син во сколько пришла?.. Ладно, суп микроволновкала, подогреешь, яраймы... Нет, дома ултыр, атыу папаң ругаться итә...

Ауылдан ҡалаға ҡайтҡанда автобуста бер апайҙың телефондан ҡыҙы менән һөйләшеүе һәм әсәйем менән әңгәмәләшеүе мине аптыратты ла, уйланырға ла мәжбүр итте...

- Ҡалананмы һеҙ? - тип һораны әсәйем.

- Эйе, городта йәшәйбеҙ.

- Татарса ла, башҡортса ла һөйләйһегеҙ, ҡайһы ауылдан күсенеп килдегеҙ?

- Мин - башҡорт, ирем - татар. Ике телдә лә сөйләшәбез, - апай ҡысҡырып көлөп ебәрҙе.

- Бик яҡшы улай булғас, балаларығыҙ ике телде лә туған теле тип белеп үҫәләрҙер...

Әсәйемә үҙ фекерен әйтеп бөтөрөргә ирек ҡуймай, апай һөйләп алып китте:

- Юҡ, балалар башҡортса ла, татарча ла һөйләшмәй.

Ошо ваҡыт минең телефоным шылтыраны. Бабайым юл хәлдәрен һораша икән. Минең башҡортса һөйләшеүемде ишеткәс, әлеге апай мыҫҡыллы ҡараш ташлап:

- Синең ҡыҙың башҡортса һөйләшә икән, ауылда үскәндер, ауылларның руссаһы юҡ инде ул, - тине лә, миңә тағы бер "Деревенщина!" тигәне ярылып ятҡан ҡарашын ташлап, һүҙем бөттө, тигәндәй, тәҙрәгә табан боролоп уҡ ултырҙы.

Мин ҡарашымды әсәйемә төбәнем. Ниңәлер ул минең өсөн оялғандыр, күҙҙәре йәшләнгәндер кеүек тойолдо. Ләкин... ул йылмая ине. Ә күҙҙәренән: "Аптырама, ҡыҙым, ҡыҙғаныска ҡаршы, бындай үҙ асылына битараф әҙәмдәр йыш осрай шул беҙҙең заманда..." - тигән һүҙҙәрҙе уҡып була ине.

Борон-борондан өлкән быуын үҙенән һуң килгән йәштәрҙе үҙҙәренә ҡарағанда аҡыллыраҡ, зиһенлерәк, белемлерәк итеп тәрбиәләргә тырышҡан. Шуның өсөн дә кешелек донъяһы туҡтауһыҙ алға бара, камиллаша. Ә тәрбиәләү үҙенсәлектәре һәр халыҡтың, хатта айырым ғаиләнең дә төрлөсә. Иң дөрөҫ тәрбиә - балала әсә теленә ихтирам уятыуҙан башланалыр, тип уйлайым. Ниндәй генә милләттән булмаһын - туған телендә һөйләшеп, халҡының йөрәк тибешен, тын алышын тойоп, ҡыуаныстарын уртаҡлашып, хәсрәтенә бошоноп йәшәгән кеше генә донъяла үҙ урынын дөрөҫ һайлай алалыр. Ә тормошта үҙ урынын халҡы араһында тапҡан кеше бәхетле була. Үҙ халҡының телен, тарихын, мәҙәниәтен белмәгән кеше башҡа халыҡтыҡын да хөрмәт итергә өйрәнмәй.

Туған тел - тыуған ер кеүек ҡәҙерле һәм ғәзиз, сөнки ул кеше күңелендә иң күркәм сифаттар тәрбиәләүҙең ҡеүәтле сараһы. Ул - ата-бабаларыбыҙ теле, донъяға күҙең асылырға, әйләнә-тирәне танып белергә, моңло көйҙәребеҙҙе аңларға ярҙам итә торған тел. Туған тел кешеләргә дуҫлыҡ юлын аса, йәшәргә көс-ҡеүәт бирә. Зәйнәб Биишеваның "Башҡорт теле" шиғырындағы "Мәңге йәшә, эй, һөйөклө, башҡорт теле, атам теле, әсәм теле - минең телем" һәм Туҡайҙың "И, туған тел, и, матур тел, әнкәмәткәмдең теле" тигән юлдарын эстән генә ҡабатлай-ҡабатлай, туған телебеҙҙең гүзәллеген иҫбатлай-иҫбатлай, ҡайтып еткәнебеҙҙе һиҙмәй ҙә ҡалғанмын. Ҡапыл әлеге апайҙың тағы ла телефондан һөйләшеүе ҡолағымды шаңғытып ебәрҙе:

- Алло, мин уже в городе, уф, һыуһаным, чәй кайната торорсоң яме...

Көлөргәме? Иларғамы? Уйҙарым "күп милләт вәкиле" булған апай тирәһенән китә алмай ҙа ҡуя.

Апай! Мин ҡалала тыуып-үҫкәнмен, ҡалала йәшәйем. Балалар баҡсаһында һәм мәктәптә дүртенсе класты тамамлағансы урыҫ телендә генә һөйләштем. Ә өйҙә - туған телемдә. Беҙ фәҡәт үҙ туған телебеҙҙә һөйләшһәк кенә рухи яҡтан бай булып йәшәйәсәкбеҙ. Ә инде тыуғандан алып икенсе телдә уйлай, аралаша башлаһаҡ, ул байлыҡҡа эйә була алмаясаҡбыҙ һәм уның кәрәге лә ҡалмаясаҡ. Бына шуның өсөн туған телендә һөйләшкән кешеләрҙең күҙендә нур уйнай, йөҙө балҡый, өлкәндәр әйтмешләй, имандары бар. Уйланһаң ине, апай. Әле, бәлки, һуң түгелдер... Балаларың, буласаҡ ейәндәреңдең киләсәге өсөн бер генә мәлгә туҡталып уйланһаң ине... Телең, мәҙәниәтең, халҡың ҡайҙа һинең? Һорауҙарыма яуап бирә алһаң ине лә бит... Шулар тураһында әйткем килде был ҡатынға.

**Азалия МӨХӘМӘТШИНА.**

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## *Халҡыбыҙ телендә бер һүҙ һәр ваҡыт доға һымаҡ ҡабатлана: "Донъялар имен булһын!" Ошо теләк шул уҡ суверенитет яулау йылдарында ла, һуңғы осорҙағы төрлө киҫкен ваҡиғалар мәлендә лә телдән төшмәй. Был беҙҙең халыҡтың үҙ-ара мөнәсәбәттәрҙе яйға һалыуҙа тыныс, дипломатик алымдарҙы өҫтөн күреүенән тип уйлайһығыҙмы?*

**(Башы 1-се биттә).**

***Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА, яҙыусы, журналист, Башҡортостандың атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмәт хеҙмәткәре, Ш.Бабич исемендәге әҙәби премия лауреаты:*** Һүҙҙе хәтирәнән башларға кәрәктер, сөнки Бөйөк Еңеүҙең етмеш биш йыллығын билдәләгән саҡта үҙем күреп-белгән ветеран яҙыусыларҙың ҡалмауы моңһоу уйҙарға һалғайны мине. Нимә генә тиһәк тә, журналист булып эш башлаған дәүеремдә уларҙың байтағы менән йыш ҡына күрешеп торолдо, радио өсөн оло әҙиптәребеҙ менән байтаҡ тапшырыуҙар эшләнде. Индәрендә әҙәбиәт йөгөн күтәреп барыусылар булып кәүҙәләнә улар минең өсөн. Башҡортостандың халыҡ шағиры Назар Нәжми менән тапшырыу яҙҙырғанда шулай тип әйткәне хәтерҙә уйылып ҡалды: "Шул тиклем күп ҡорбандар биреп, фашистик Германияны еңгәс, донъяла бөтөн һуғыш булмаҫ, ер йөҙөндә тыныслыҡ урынлашыр, тип уйлай торғайным. Икенсе донъя һуғышы кешелеккә ҙур һабаҡ булыр һымаҡ ине.... Үкенескә ҡаршы, улай булып сыҡманы, күреп торабыҙ, тегендә лә, бында ла әленән-әле һуғыш уты тоҡанып тора..." Уйсан ғына итеп бына шундай һүҙҙәр әйткәйне Назар ағай. Был һөйләшеүгә лә өс тиҫтә йыл ваҡыт үтеп киткән. Ә беҙ бөгөн дә әҙиптең шул һүҙҙәрен ҡабатларға мәжбүрбеҙ: "Тегендә лә, бында ла һуғыш уты тоҡанып тора..." Фәлән илдәр араһында бәрелеш башланған, төгән илдә сыуалыш бара... Бындай хәбәрҙе ишетеү менән һағаябыҙ. Ил башлыҡтары, сәйәсмәндәр һөйләшә алмай, ярашыуға килә алмай икән, уның әҙемтәһен тағы ла халыҡ күтәрәсәк бит. Халҡыбыҙҙың тарихына күҙ һалһаҡ, унда ла фажиғәле мәлдәр етерлек. Шуға ҡарамаҫтан, башҡорт милләте яраларын имләргә, нығынырға һәм яңынан аяҡ баҫырға көс тапҡан. Бының бер сере - ынтылышлы алға ҡарап йәшәүендә. Һәр саҡ ҡанлы хәтерҙе яңыртып, телдән төшөрмәй һөйләп, бөгөнгө бирелгән мөмкинлекте күрмәй, сей яраға өҫтөнлөк биреп, йәғни артҡа ҡарап ҡына атлай бирһә, алға табан аҙымы әллә ни ырамаҫ ине. Халҡымдың йөрәгендә, аңында, тормошонда сама белеү тигән бөйөк хикмәт йәшәй. Төп асылы Уралын һөйөү, уны яҡлау, ҡурсалау - быуындан-быуынға бирелгән оло аманат һәм үҙгәрмәҫ ҡиммәт. Башҡорт халҡы, Урал батырҙың вариҫтары, ватанын һаҡлар өсөн ҡулына ҡорал алған. Шул уҡ ваҡытта, икенсе илдәрҙе баҫып алып, ундағы халыҡтарҙы ҡырыу-юҡ итеү, байлығын урлау-талау маҡсаты менән аҡылын да юймаған. Хаҡ Тәғәләнең яҙғаны менән Рәсәй дәүләтенә ҡушылғандан һуң, иманлы халыҡ булараҡ, башҡорттар килешеүгә тоғро ҡалған - батша, хөкүмәт киҫкен мәлдәрҙә мөрәжәғәт иткәндә ярҙамдан баш тартмағандар. Уҡ-һаҙаҡлы башҡорт, Рәсәйгә еңеү килтерешеп, Европаны урап сыҡҡан, халҡының исемен данға күмгән. Ул тарафтарҙағы етеш-мул, хәр тормошто ла күргән, ләкин, ни ғәжәп, барыбер Уралға - ватанына талпынған. Был феноменаль күренеш.

Теүәл утыҙ йыл элек беҙ яңы байрам яулап алдыҡ - Республика көнөн. Ундағы кисерештәрҙе аңлар-тойор өсөн шул йылдарҙа сыҡҡан матбуғат баҫмаларын алып ҡарарға мөмкин. Башҡортостан Республикаһы өсөн яңы дәүер башланды ул саҡта. Бына шул байрамды - Республика көнөн йыл да билдәләйбеҙ, шөкөр. Ике тел дәүләт теле булып законлаштырылғас, һәр мәктәптә - башҡорт кластары, балалар баҡсаларында башҡорт төркөмдәре барлыҡҡа килгәйне. Ата-әсәләр ҙур теләк менән кескәйҙәрен шунда бирҙеләр. Һуңынан ҡайһы бер төркөмдәрҙең формаль эшләүе, хатта тәрбиәселәренең башҡорт телен белмәүе асыҡланды. Һәр хәлдә, дәүләт теле талап иткән мөнәсәбәткә ирешер өсөн төрлө кәртәләр ҙә булып торҙо. Бына хәҙер килеп шул уҡ һорауҙар ҡабат ҡалҡып сыҡты. Ғафури районының "Красноусол" шифаханаһында Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының төбәк-ара форумында республика Башлығы Радий Хәбиров балалар баҡсаларында башҡорт теле дәрестәрен индерергә тәҡдим итте. Изге ниәт. Әгәр ҙә ошо башланғыстарға һүнергә юл ҡуйылмаһа, ирешелгәндәренән кире сигенмәһәк, тағы ла утыҙ йылдан беҙҙең ижтимағи-мәҙәни тормошта ҙур уңыштар буласаҡ, тигәнгә инаныла.

Үткән йылдарға боролоп ҡарағанда, бәғзе тарихсыларыбыҙҙың, ғалимдарыбыҙҙың алып барған ҙур эштәре һөҙөмтә биргәнен күрербеҙ. Бикле тарих биттәрен асты улар. Беҙ, ниһайәт, үҙебеҙҙең үткәнебеҙ, шәхестәребеҙ тураһында бик күп мәғлүмәт ала алдыҡ. Тарихи хәтерҙе тергеҙеү, тамырға һипкән шифалы һут шикелле, рухҡа көс биреп тора. Ошо ғилемдә яңы быуын үҫеп сыҡты.

Киләсәк тә йәштәр ҡулында, улар был донъяға яңы тормош һәм яңы идея булып тыуғандар. Кешелекте, милләтте йәшәткән ҡиммәттәр уларҙың күңеле, аҡылы менән артабан байытыласаҡ. Улар киләсәктең мөмкинлеге, ресурсы, ә ваҡыт улар файҙаһына эшләй. Нимәлер эшләр өсөн уларҙың теләге лә, ихтыяр көсө лә бар. Республика көнө менән, милләттәштәр, бауырҙаштар!

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓9 октябргә республикала 9191 кешелә яңы коронавирус инфекцияһы диагнозы раҫланған. Һуңғы тәүлектә - 47 осраҡ. Коронавирустан үлем осраҡтары - 43. Дауахананан тыш пневмония һуңғы тәүлектә 190 кешелә теркәлгән.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Юғары әҙерлек" режимы тураһында указға сираттағы үҙгәрештәр индерҙе. 2 октябрҙән республикала 65 йәштән өлкәндәр үҙизоляция режимына ҡайтырға тейеш. Урамға аҙыҡ-түлек, дарыу һатып алырға сығырға, баҡсаға йәки элемтә хеҙмәттәре ойошмаларына ғына барырға мөмкин. Шулай уҡ ололарға табип тәғәйенләүе буйынса грипҡа ҡаршы вакцинация үтергә тәҡдим ителә.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Өфө нефть эшкәртеү комплексының эше менән танышты. Шунда уҡ "Башнефть-Өфө нефть эшкәртеү заводы"нда элементар көкөрт етештереү ҡулайламаһының резерв технологик линияһын төҙөү буйынса инвестиция килешеүенә ҡул ҡуйылды. Инвестиция килешеүе шарттары буйынса, "Башнефть" проектты финансларға һәм яңы производствола өҫтәмә эш урындары булдырырға бурыслы. Технологик линия төҙөлөшөн 2023 йылдың майында тамамлау планлаштырыла.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы командиры, Рәсәй Федерацияһы Геройы Миңлеғәли Шайморатов һәйкәленең иң яҡшы проектын эшләү буйынса асыҡ конкурс үткәреү тураһындағы указға ҡул ҡуйҙы. Башҡортостан Хөкүмәтенә указды тормошҡа ашырыуға бәйле сығымдарҙы ҡаплаусы сығанаҡтарҙы билдәләү бурысы ҡуйылды.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров әҙәбиәт, сәнғәт, архитектура өлкәһендә Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһын "Беренсе Республика" тулы метражлы нәфис фильмы өсөн кинорежиссёр Булат Йософов һәм З.Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институты доценты Гөлсәсәк Саламатоваға, "Зөләйха күҙҙәрен аса" һәм "Ҡара йөҙҙәр" спектаклдәре өсөн М. Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театрының баш режиссеры Айрат Абушахманов һәм театрҙың баш рәссамы Альберт Нестеровҡа, "Тыуған ил образы - ғөрөф-ғәҙәттәр һәм рухлылыҡ" нәфис әҫәрҙәр циклы өсөн рәссам Хәтип Фазыловҡа тапшырҙы.

**Өфөнөң Әхмәтзәки Вәлиди урамындағы ер аҫты юл сығыу урынында "Хәтер стенаһы" барлыҡҡа килде. Һуғыш йәки утлы нөктәләр ҡорбандары түгел бында. Бында ғаилә эсендәге ҡанһыҙлыҡ ҡорбандары теҙелеп баҫҡан.**

# БЫЛ ҠАТЫНДАРҘЫ...

## ирҙәре үлтергән




Рәсәй ҡалаларынан Силәбелә һәм Мейәстә бар икән ошондай инсталляциялар. Исемһеҙ, тарихһыҙ фотоларҙың күп өлөшө, әлбиттә, ҡатын-ҡыҙҙар һәм улар республикабыҙҙа 2019-2020 йылдарҙа ғына һәләк ителгән. Исемһеҙ, сөнки был ҡатындарҙың яҙмышын йәмғиәт тә, хоҡуҡ һаҡлау органдары ла күрмәмешкә һалыша. Ә инде был донъянан китһәләр, тиҙерәк был эштәрҙе ябып, хәлде онотоп ҡуйырға тырыша. Әммә бынан ғына ҡорбандар һаны кәмемәй, ул, киреһенсә, үҫә генә бара. Һәм шул ҡорбандарҙың инде юҡтары ла, әлегә нисектер көн итеп ятҡандары ла беҙҙең арала йәшәгән һәм йәшәй. Һәм бер көн килеп ниндәйҙер ҡатындың ғаилә эсендә һәләк ителгәнен ишетһәк, аптырайбыҙ, "ах-ух" киләбеҙ, тик ни өсөндөр был трагедияға алып барған кешеләр яҙмышына тығылмайбыҙ, ваҡытында ярҙам ҡулы һуҙмайбыҙ. Йәнәһе, һәр кемдең үҙ тормошо, ғаилә тормошо, ирҙе ҡатындан айырып йөрөү әҙәпһеҙлек һәм башҡалар. Ә ҡатындың туҡмалып йәшәүен белеп тә, өнһөҙ, һуҡыр булып ҡалыу әҙәптең иң юғары өлгөһө инде. Ысынында, уйлаһаң, уйылып китерлек бит...

Ҡыштың ниндәй айы булғандыр, Баймаҡ районының бер ауылынан инәй кеше шылтыратты. И. тигән ауылда бала саҡ әхирәтем йәшәй, улы тарафынан ҡыйырһытылып, аслы-туҡлы, өшөптуңып ята, үҙаллы йөрөй алмай, тине. Инәй ауыл ерендә әхирәтенең йортона барып, тауыш ҡуптарырға ла, кемдәндер ярҙам һорарға ла белмәй һәм шуларҙы тәфсирләп миңә яҙып ебәргән. Беҙ редакцияла кәңәшләштек тә, ауылдың хакимиәт башлығына шылтыраттыҡ. Эргәләге ҡаланың ололар һәм ғәриптәр пансионатынан урын һораныҡ. Оло ҡатын эскесе улы ҡулына ҡалып, шундай ауыр хәлгә төшкән икән. Хакимиәт башлығына, райондың социаль хеҙмәт вәкилдәренә аҙыраҡ баҫым яһаңҡырап, улын яуапҡа тарттырыу менән янап, инәйҙе пансионатҡа урынлаштырҙыҡ. Быларҙың барыһы ла телефон аша ғына башҡарылды. Ә теге ярҙам һорап мөрәжәғәт иткән әхирәтенә был ситуацияны артабан да контролдә тотоп тороуын үтендек. Күрәһегеҙ, кемдер кемдеңдер яҙмышына битараф ҡалмаған һәм, бәлки, фажиғәнән дә йолоп алып ҡалғандыр әле. Быны өсөн әллә ниндәй батырлыҡ кәрәкмәй, ә бары кеше булып ҡала белеү генә зарур.

Икенсе осраҡта таныш ҡатын иренән ныҡ туҡмалыуын әйтте. Егерме йылдан ашыу шул хәлдә йәшәгән бисара ул. Тора ла алмайым, күм-күкмен, тигәс, полицияға мөрәжәғәт итәйек, тинем. Әммә ҡатын был ярҙамдан баш тартты. Быға саҡлы әллә күпме мөрәжәғәт иткән, алып китәләр ҙә кире ебәрәләр, штраф һалалар ҙа эшен ябалар икән. Ә ир тағы ла яманыраҡ ҡотороп, үсен ала. Был хәл йылына бер йәки ике тапҡыр ҡабатланып тора. Әлеге мәл туҡмалған ҡатынды ире ошо хәлдә кешегә күренмәһен өсөн өйҙә бикләп китә, хатта тәҙрә ҡорғанын да асырға ҡушмай. Бөгөнгө көндә лә ошондай хәл булырына ышанып етә алмай, ҡатындан фотоһын ебәреүен һораным. Һәм, ышанаһығыҙмы, фашистар тарафынан язаланған һымаҡ сүрәттәге фото алдым. Ҡатын ысынлап та күм-күк ине. Ныҡ тетрәнеп, был хәлдең киләһе осрағы үлем менән тамамланыуынан ҡурҡып, ашығып ярҙам итеү юлын эҙләй башланым. Полиция осрағы ысынлап та бушҡа ваҡыт үткәреү икәнен аңлап, билдәле депутаттарҙың береһенә был фотоны ебәрҙем һәм ҡатынға зыян килтермәҫлек итеп ярҙам итеүен һораным. Ярҙам булды. Бөгөн ул ҡатын үҙаллы яңы тормошҡа яраҡлашып маташа һәм киләсәктә уның был үткәндәре ҡурҡыныс төш кенә булып ҡалыр тип ышанам.

Өсөнсө осраҡта бер йәш ҡатын яҙғайны. Ике уҡыусы балаһы бар, ире үҙен дә, ҡыҙҙарын да ҡыйырһыта, тигәйне. Сығып китәм тип ынтыла ла, ҡайҙа, кемгә барып баш төртөргә белмәй. Балаларҙың йөрәге бөттө, атайҙарына ҡарата нәфрәттән башҡа хис ҡалманы, тип яҙа. Оҙаҡ ҡына яҙыштыҡ ҡатынҡай менән. Үҙемсә, психологик ярҙам яһарға тырыштым һәм, әгәр ҡалаға килһә, эш урыны, ваҡытлыса торорлоҡ урын табышырға вәғәҙә иттем. Ауыр хәлдә ҡалған ҡатындарға йәшәп тороу өсөн булған үҙәктәрҙе барлап сыҡтым. Ике айға алалар икән уларҙа. Һәм урындар ҙа бар! Тик уларға мөрәжәғәт иткәндәр бик аҙ икән. Бында ике ай йәшәйһең, балаларың уҡырға урынлаштырыла, улар менән психологтар эшләй. Ашау-йәшәү яҡшы. Ике айҙы тағы ла ике тапҡырға һуҙып була, йәғни алты ай торорға мөмкин. Ул арала эшен дә, башҡаһын да яйға һалырға була бит теләк барҙа. Бына шуларҙы асыҡлағанда ла, теге ҡатын килмәне... Бәлки, был аҙымға барыр мәле етмәгәндер, бәлки, бәхетһеҙ яҙмышына күнә бирәләр...

Был осраҡтар хәлдәрҙең бәхетле йәки ҡорбанһыҙ тамамланған бармаҡ менән генә һанарлыҡ өлгөләре. Ә уларҙың күпмеләре әлеге үрҙәге стендта тора. Депутаттар тарафынан тәҡдим ителгән ғаиләләге көсләүҙе, ҡыйырһытыуҙы сикләр закондар һаманға тиклем иғтибар үҙәгенә алынмай, ҡабул ителмәй әле. Ҡәтғи закон булмайынса, был йәшерен вәхшилекте туҡтатыр көс юҡ. Ҡорбандарҙың физик һәм мораль көсһеҙлөгө, язалаусының яуапһыҙлыҡтан хаким булып алыуы, административ һәм хоҡуҡ һаҡлау вәкилдәренең ҡул һелтәп ҡарауы был хәлдәрҙе сығып һәм ҡотолоп булмай торған ҡуласаға әүерелдерә. Һәм ҡорбандар ҙа шулай тип уйлап күнә. Улар осраҡтан осраҡҡа ғына тотоноп йәшәй, шул осраҡтар араһында балалар үҫтерә, эшләй, күршеләре һәм йәмғиәт алдында барыһын да яҡшы итеп күрһәтергә ынтыла. Һәм ҡапыл шул ҡатын һәләк ителә лә, был ғаиләнең япма артындағы йәшерен яҡтары асылып китә. Баҡтиһәң, хәлде күршеләре лә белә йөрөгән, туғандары ла хәбәрҙар булған, дуҫтары ла күргән икән. Тик ҡатынды береһе лә яҡламаған. Һәр кем һәйбәт булып ҡалырға, дуҫ һәм туған булырға теләгән. Күрәләтә, күмәкләшеп, өнһөҙ ризалыҡ менән ҡорбан иткәндәр берәүҙе.

Миңә йыш ҡына "һин ирҙәрҙе күрә алмаусы ҡатын" тиҙәр. Йәнәһе, ҡатын-ҡыҙҙы ирҙәренән китергә өндәйем. Асылда, мин ҡатын-ҡыҙҙы үҙен яҡлай белергә һәм балаларын һаҡлап ҡалырға саҡырам. Туҡмалған ҡатын ҡулында сәләмәт балалар үҫә алмаҫын, үҙ сираттарында ул балалар ҙа шул уҡ яҙмышты ҡабатларын белгәнгә яҙам быларҙы. Миҫалға ғына алғанда, таныштарым араһында бер түгел, өс билдәле кешенең әсәләрен аталары күҙ алдарында үлтергән. Бала саҡтарындағы ошо травманан был шәхестәр арына алмаған. Улар тормошондағы күп хаталар һәм проблемалар тап ошо фажиғә нигеҙендә яһалған. Был кешеләрҙең өсөһө лә ғаилә ҡороп йәшәй алманы. Берәүһе хатта үҙ-үҙенә ҡул һалды...

Ҡорбан булып йәшәгән ҡатындарға ошо халәтенән ҡотолоуға көс туплау һәм һынылышлы аҙым яһай алыуға әҙерләнеүҙә шундай бер психологик терапия ҡулланыла икән. Уларға төрлө көслө шәхестәр, геройҙар, батырлыҡтар яһалған фильмдар ҡарарға кәңәш итәләр. Башҡаларҙың батырлығын ҡарағанда, уларҙың эске көсөргәнеш кисереүҙәрен күҙәткәндә, һиндә лә ихтилалсылыҡ осҡондары тоҡана. Бына ошо тойғоларҙы үҫтергәндә һәм яйлап-яйлап ҙурайтҡанда, ул бер рухи көс була ала икән. Һәр хәлдә, был үҙенә күрә бер алым.

Ә инде йомғаҡлап әйткәндә, юл төшкәндә Әхмәтзәки Вәлиди урамындағы юл аҫты баҫҡыстарынан үтегеҙ әле, шундағы фотоларҙан төбәлгән бахыр ҡатынҡайҙарҙың йөҙҙәренә, күҙҙәренә ҡарағыҙ. Уларға инде ярҙам кәрәкмәй, әммә һеҙҙең яндағы кемдәргәлер кәрәк, бик кәрәк был ярҙам. Иғтибар итегеҙ яҡындарығыҙға, коллегаларығыҙға, күршеләрегеҙгә, бала-сағаға. Хәлдәрен һорашығыҙ, белешегеҙ. Берәүҙе генә яуыҙлыҡ тырнағынан ҡотҡарып алып ҡалһағыҙ ҙа был оло еңеү буласаҡ. Ә ғаиләлә йәберләүгә ҡаршы закон проектын ҡабул итеүҙе бергәләп талап итергә кәрәк.

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Йырсы Радик Юлъяҡшин Башҡортостан Башлығының мәҙәниәт һәм йәштәр сәйәсәте буйынса кәңәшсеһе итеп тәғәйенләнде. Ул был вазифаны йәмәғәт башланғысында атҡарасаҡ.

✓Башҡортостан Башлығы эргәһендәге Кеше хоҡуҡтары буйынса советта хоҡуҡ яҡлау үҙәге асылды. Был проект сиктәрендә республика граждандарына бушлай юридик ярҙам күрһәтеләсәк. Советтың секретары Зөлфиә Ғайсина әйтеүенсә, үҙәк төрлө сәбәптәр арҡаһында үҙ хоҡуғын яҡлай алмаған һәм быға финанс мөмкинлектәре булмаған кешеләргә ярҙам итә. Хоҡуҡ яҡлау үҙәгенә сайт, социаль селтәрҙәр һәм телефондар аша мөрәжәғәт итергә була.

✓Башҡортостанда йәшәүселәр 11 октябрҙә Республика көнө уңайынан өс көн ял итә. 11 октябрь - Республика көнө - Башҡортостанда эшләмәгән байрам көнө булып тора. Быйыл 11 октябрь йәкшәмбегә тап килә, шуға күрә байрам 12 октябргә (дүшәмбе) күсерелә.Биш көнлөк эш аҙнаһында 10, 11 һәм 12 октябрь ял тип иҫәпләнә.

✓Кредиторҙар ғаризаһына ярашлы банкрот булыу тураһында эш асыуға мөҙҙәт 2021 йылдың 7 ғинуарына тиклем оҙайтылды. Рәсәй Хөкүмәтендә был турала ҡарар ҡабул ителде. Мөҙҙәтте оҙайтыу хоҡуғы коронавирус инфекцияһы таралыуҙан зыян күргән ойошма һәм шәхси эшҡыуарҙарға бирелә. Был осорҙа улар һалым бурыстарын түләүҙе кисектереп тора һәм бизнесын милкен юғалтмай, эшмәкәрлеген туҡтатмай һаҡлай ала.

✓Башҡортостандың муниципаль райондары һәм ҡалаларының урындағы үҙидара органдары йыл да "Йыл ҡаҙанышы" республика Башлығы грантын аласаҡ. Грант урындағы үҙидара органдарының республиканың социаль-иҡтисади хәлен үҫтереүгә йүнәлтелгән эшен яҡшыртыу маҡсатында бирелә. Бының өсөн махсус комиссия төҙөлгән һәм гранттар лайыҡ булыусылар араһында тигеҙ бүленгән бюджет дотацияһы рәүешендә буласаҡ.

✓9 октябрҙә күренекле дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре, журналист Шәһит Хоҙайбирҙиндың тыуыуына 124 йыл тулды. Был датаға арнап, Милли музей филиалында - Шәһит Хоҙайбирҙин музейында хәтер сараһы ойошторолдо. Республика йортонда БР Хөкүмәтенең Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге премияһы лауреаттарын бүләкләү тантанаһы булды. Быйыл премияны журналистика ветераны Зөһрә Ҡотлогилдина, "Молодежная газета" баҫмаһы хәбәрсеһе Эмилия Завричко, "Йәшлек" гәзите хәбәрсеһе Нур Ҡәҙербаев алды.

✓ **"Әгәр сирле һәм сәләмәт кеше осраша, сир йоҡтороу ихтималлығы 40 процент тәшкил итә, - ти Н. Заһиҙуллин. - Уларҙың береһе битлектә булһа, сир йоҡтороу кимәле 22 процент, икеһе лә битлектә булһа - 4 процент".**



ҠЫҪҠАСА

# АТАМАЛАР...
## башҡортса яҙылһын!

"Башҡорт энциклопедияһы" дәүләт ғилми учреждениеһы составында топонимия лабораторияһы булдырыла, ул төбәк топонимдары буйынса мәғлүмәт базаһын дәүләт телдәрендә туплау һәм киң йәмәғәтселеккә сығарыу менән шөғөлләнәсәк. Был турала республика Хөкүмәтендәге оператив кәңәшмәлә "Башҡортостан халыҡтары телдәре тураһында"ғы Законды тормошҡа ашырыу темаһын яҡтыртып, вице-премьер Азат Бадранов белдерҙе. 2020 йылда Хөкүмәттең телдәр буйынса комиссияһы милли мәғарифты үҫтереү, дистанцияла туған телдәрҙе өйрәнеү буйынса портал булдырыу, милли нәшриәт өлкәләрендә ҡағылышлы мәсьәләләрҙе ҡараясаҡ. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров шулай уҡ БР Хөкүмәте аппараты етәксеһе - беренсе вице-премьер Илшат Тажетдиновҡа республика Хөкүмәтендә яһалған сығыштарҙың дәүләт телдәренә синхрон тәржемәһе сифатын контролгә алырға ҡушты.

✓ Был аҙнала Башҡортостан ауыл хужалығы тауарҙары етештереүселәренең шәхси кабинеттарын һынауҙар башлана. Башҡортостан Республикаһы ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов Хөкүмәт президиумы ултырышында был системаны булдырыу эштәре 2018 йылда уҡ башланыуы хаҡында һөйләне. Системаның оператив мәғлүмәттәрен даими күҙәтеү модуле 2019 йылдың сентябрендә индерелгән. Агросәнәғәт комплексы күрһәткестәрен иҫәпләүҙе автоматлаштырыу мәғлүмәтте ваҡытында еткереү һәм етәкселек ҡарарҙары сифатын яҡшырта. Ауыл хужалыҡтары шәхси кабинеты аша субсидияларға ғариза бирә ала, был уларҙың эшен еңеллләштерәсәк. Был портал Төбәк менән идара итеү үҙәге мәғлүмәт-аналитика системаһына ла бәйле буласаҡ һәм унда сәсеүурыу эштәре, һөт һәм ит етештереү тураһында мәғлүмәттәр ваҡытында ҡуйылып барасаҡ.

✓ Башҡортостанда 128 мең кеше эш эҙләй, шул уҡ ваҡытта мәшғүллек үҙәктәре ни бары 32 мең эш урыны тәҡдим итә. Был мәғлүмәтте Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировтың дәүләт һәм автономиялы коммерция булмаған халыҡты социаль хеҙмәтләндереү ойошмалары етәкселәре менән онлайн һөйләшеүе барышында Үҙәк район-ара халыҡ мәшғүллеге үҙәге директоры Нурфаяз Шәймәрҙәнов килтерҙе. Уның һүҙҙәренсә, апрелдә башланған эштән бушатылған кешеләр һаны артыуы сентябргә тотороҡланған. 40 мендән ашыу кеше эшһеҙ эшкә урынлашҡан, шуларҙың 13 меңе - сентябрҙә. Йыл башынан эшһеҙҙәргә 700 млн һум түләүҙәр күсерелгән.

✓ Синоптиктар фаразы буйынса, быйыл ҡыш Башҡортостанда ҡаты һыуыҡтар, ҡар бурандары һәм аномаль температура көтөлмәй. Дөйөм алғанда, температура нормаға ярашлы була. Рәсәй Гидрометүҙәгенең алдағы алты айға яҡынса фаразы шундай. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Башҡортостанда уртаса айлыҡ температура нормаһы түбәндәгесә: октябрҙә +2,5 градус; ноябрҙә -5,1 градус; декабрҙә -11 градус; ғинуарҙа -14,8 градус; февралдә -13,7; мартта -7 градус. Рәсәй Гидрометүҙәге мәғлүмәттәренә ҡарағанда, ноябрҙә һәм декабрҙә температураның норманан бер аҙ юғарыраҡ булыуы ихтимал. Ғинуарҙа ғәҙәттәгенән һалҡынырыраҡ була, февралдә лә температураның норманан бер аҙ түбәнерәк булыуы фаразлана. 2021 йылдың мартында Волга буйы федераль округы биләмәһендә уртаса температураның быйылғы мартҡа ҡарағанда түбәнерәк булыуы көтөлә.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# УҠЫТЫУСЫҒА ЯҠШЫ БАҺА

**Өфөлә башҡорт һәм рус телдәренән белем биргән иң яҡшы 50 уҡытыусы республика Хөкүмәтенең аҡсалата премияһы менән бүләкләнде. Бүләкләү тантанаһы Башҡортостандың Мәғарифты үҫтереү институтында уҙҙы.**



Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтенең 2007 йылдың 15 ғинуарындағы "Иң яҡшы башҡорт һәм рус телдәре уҡытыусыларын аҡсалата бүләкләү тураһында" ҡарары Башҡортостан Республикаһының "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында", "Башҡортостан Республикаһында мәғариф тураһында" законына ярашлы дәүләт телдәрен уҡытыу сифатын яҡшыртыу, башҡорт һәм рус телдәре уҡытыусыларын матди дәртләндереү маҡсатында ҡабул ителде. Ошо йылдарҙа һөҙөмтәле профессиональ эшмәкәрлеге һәм Башҡортостан мәғарифын үҫтереүгә тос өлөш индергән өсөн республиканың дәүләт телдәрен уҡытҡан иң яҡшы 650 уҡытыусы аҡсалата премия менән бүләкләнде. Был юлы иһә республика комиссияһы 125 уҡытыусының конкурс материалдарын ҡараны, шуларҙың 77-һе - башҡорт теле, 48-ҙе - рус теле уҡытыусылары. Иң яҡшы 50 уҡытыусыға 50 мең һум күләмендә аҡсалата премия тапшырылды. Уҡытыусыларҙы Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте вице-премьеры Фәнүр Йәғәфәров һәм Башҡортостан Республикаһының мәғариф һәм фән министры Айбулат Хажин сәләмләне.

# СТӘРЛЕТАМАҠТА БУЛАСАҠ...

**Һуңғы мәғлүмәттәр буйынса, республикала коронавирус инфекцияһы менән сирләүселәр көндән-көн арта бара, пневмония диагнозы ҡуйылыусылар ҙа күбәйә. Үткән ял көндәрендә республика Башлығының Зубоволағы инфекция үҙәгенә сәфәре лә ошо хәүеф артыуға бәйле булғандыр.**

"Дауаханала эште ойоштороу уңғай тойғо ҡалдыра. Табиптар ҙа эшләүе уңайлы булыуын белдерә: коридорҙар киң, түшәмдәр юғары, һауа автоматик рәүештә таҙартыла һәм шарттар бик уңайлы, - ти Радий Хәбиров. - Әммә пациенттар коридорҙарҙа урынлаштырылған, ҡайһы бер блоктарҙа хатта коридорҙың ике яғына ла карауаттар ҡуйылған. Йәғни 400 урынлыҡ дауахана тулы. Ул мөһим функция башҡара, кеше килеп эләгә, сифатлы дауаланыу алып сыға. Әммә был 4 миллионлы Башҡортостан өсөн етерлек түгел. Өҫтәүенә, беҙ коронавирус инфекцияһы менән бер ай ғына көрәшмәйәсәкбеҙ әле. Шуға күрә яңы госпиталь төҙөү тураһында еңел булмаған ҡарар ҡабул итәсәкбеҙ. Яңы ковид-госпиталень төҙөү мәсьәләһе Рәсәй һаулыҡ һаҡлау министры Михаил Мурашко менән һөйләшеп килешелгән. Бынан тыш, яңы инфекцион үҙәк төҙөлөшө өсөн федераль үҙәктән аҡса йәлеп итеү ихтималлығы ла ҡарала. Яңы дауахана Стәрлетамаҡта урынлашасаҡ..."

Билдәләнеүенсә, коронавирус сире менән бер рәттән дауаханала йоҡторолмаған үпкә сире менән сирләүселәр һаны ла арта. Үткән шәмбе-йәкшәмбелә генә ул 304 кешелә асыҡланған. Илдә ҡабаттан сикләүҙәр индерелә, был аҙнанан Башҡортостанда 65 йәштән өлкәндәргә ихтыяж булмағанда йәмәғәт урындарына сығып йөрөү тыйылды. БДМУ профессоры, медицина фәндәре докторы Нәүфәл Заһиҙуллин белдереүенсә, вирус йоҡтороу өсөн бер нисә минут та етә, сөнки вирус тәкөрөктә йәшәй һәм кеше аралашҡан ваҡытта уның эргәһендә болот барлыҡҡа килтерә. Ауырыу кеше эргәһендә барлыҡҡа килгән болотто сәләмәт кешегә бер нисә минут һулау ҙа сир йоҡтороуға сәбәп була, ә уны туҡтатыу өсөн халыҡтың 30-40 процентында иммунитет булырға тейеш. Шулай уҡ сирлеләр һаны артыуы икенсе тулҡын түгел, тәүгеһенең дауамы, ти, белгес, сөнки балалар мәктәпкә барҙы, отпускыла көньяҡ ҡалаларында ял итеүселәр эшкә сыҡты. Ғалим белдереүенсә, хәҙер Өфө дауаханалары базаһында ҡабаттан ковид-госпиталдәр эшләй башлаясаҡ.

Һаҡланғанды Хоҙай һаҡлар, тигәндәй, сир йоҡтормаҫ өсөн социаль дистанция тоторға, битлек һәм бирсәткә кейергә, хатта сәстәрҙе ҡапларға кәңәш ителә. "Әгәр сирле һәм сәләмәт кеше осраша, сир йоҡтороу ихтималлығы 40 процент тәшкил итә, - ти Н. Заһиҙуллин. - Уларҙың береһе битлектә булһа, сир йоҡтороу кимәле 22 процент, икеһе лә битлектә булһа - 4 процент".

# ОҘОН ҒҮМЕРЛЕЛӘР АРТҺЫН!

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Башҡортостанда оҙон ғүмерлелек" проектының башланыуын иғлан итте. Проектты ғәмәлгә ашырыуҙың координаторы - Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы.**

Радий Хәбиров һүҙҙәренсә, был проект республикала йәшәгән оло йәштәгеләрҙең һаулығын нығытыуға, социаль әүҙемлек осорон оҙайтыуға йүнәлтелә. "Халыҡ диспансерлаштырыу үткән саҡта поликлиникаларҙа "көмөш сәғәт" арауығы ойоштороласаҡ. Ошо ике-өс сәғәт өлкән йәштәгеләргә генә айырып диспансерлаштырыу өсөн файҙаланыла. Шулай уҡ медицина учреждениеларында өлкән быуын кешеләре өсөн махсус һаулыҡ мәктәптәре асыласаҡ. Унда рациональ туҡланыу, сәләмәт йәшәү рәүеше буйынса курстар ойоштороу ҡарала. Медицина блогына райондарға сығып, комплекслы медицина тикшереүе ойоштороған сәләмәтлек поездары ла инә", - тип билдәләне Радий Фәрит улы.

Программаның тағы бер йүнәлеше туризмға бәйле. Туризм буйынса дәүләт комитеты яғынан тыуған төйәгебеҙ буйлап сәйәхәт итергә, яңы ерҙәрҙе күрергә теләгәндәргә экскурсиялар өсөн субсидия бүлеү планлаштырыла. Пенсионерҙарға компьютерҙы үҙләштереү өсөн сертификат алыу мөмкинлеге лә бирелә. Пенсионерҙар өсөн спартакиаданы әүҙем үҫтереү ҡарала. Республика Башлығы һүҙҙәренсә, ололар үҙҙәрен йәмғиәт өсөн файҙалы һәм кәрәкле итеп тойһон өсөн уларҙы артабан да ирекмәндәр хәрәкәтенә йәлеп итеү ҙә күҙаллана.

# БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓5 октябрҙән, Өфө ҡалаһында грипҡа ҡаршы прививка яһатыу өсөн күсмә пункттар эшләй башланы. 18 йәше тулған һәр кем яҙма ризалыҡ менән укол ҡаҙатырға мөмкин. Вакцинация алдынан медицина тикшереүе үткәрелә. Үҙең менән паспорт йәки шәхесте раҫлаған башҡа документ алып килергә кәрәк. 11 октябргә тиклем көн һайын иртәнге сәғәт 9-ҙан киске 5-кә тиклем күсмә пункттар өлкәндәрҙе Инорс биҫтәһендәге "АкварИн" сауҙа-күңел асыу үҙәге биләмәһендә, "Кашҡаҙан" мәҙәниәт һәм ял паркында, "Кунаҡһарай" биләмәһендә, Затон биҫтәһендәге "Тулҡын" паркында, "Орион" иждад һарайы биләмәһендә ҡабул итә.

✓Башҡортостанда 2020-2021 уҡыу йылында мәғариф учреждениелары 1 синыфҡа барған балаларҙың документтарын 1 апрелдән алып ҡабул итәсәк, был турала Өфө ҡалаһы Мәғариф идаралығы начальнигы Елена Хаффазова белдерҙе. Ғәҙәттәгесә, башта учреждениеға беркетелгән территорияла йәшәүселәрҙең ғаризаһы ҡараласаҡ, башҡалар документтарын 6 июлдән генә бирә ала. Бынан тыш, документтарҙың тик электрон төрө генә ҡабул ителә, ғариза өлгөләре мәктәптәр сайтында ҡуйыла.

✓Өфөлә Ағиҙел йылғаһы ярын төҙөкләндереү сиктәрендә "Дуҫлыҡ монументы" туҡталышындағы ер аҫты үткәүелен төҙөү эштәре 2019 йылда уҡ башланғайны. Әммә төҙөлөшкә туҡталышта урынлашҡан сауҙа павильоны ҡамасау итеп, эштәр бер аҙға туҡтатылып торҙо. Ниһайәт, Өфө ҡала хакимиәте һәм киоск хужаһы араһында ике яҡлы килешеү төҙөлдө. Хәҙер бинаны емереп, төҙөлөш дауам итәсәк, тип хәбәр иттеләр баш ҡала хакимиәтенән.

✓Өфөлә "Иң яҡшы күп фатирлы йорт советы" конкурсына йомғаҡ яһалды. Быйыл был конкурста 55 күп фатирлы йорт советы ҡатнашҡан. Комиссия ағзалары дөйөм ҡулланылышта булған майҙандарҙың һәм подвал биналары торошон, милекселәр өсөн белешмә мәғлүмәт булыу-булмауын тикшергән. Шулай уҡ советтың йортта хәүефһеҙлек тәьмин итеү буйынса эшмәкәрлеге лә баһаланған. Еңеүселәр 80, 60, 40 мең һум аҡса аласаҡ.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

*АФАРИН!*

# ЙӘШ ШАЙМОРАТОВСЫЛАР

**Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназияһының, 44-се һәм 162-се "Смарт" полилингваль күп профилле мәктәптәренең 7-се синыф уҡыусылары тантаналы рәүештә шайморатовсылар сафына ҡабул ителде.**



Быйыл Башҡортостан Хөкүмәте ҡарары менән дөйөм белем биреү мәктәптәрендә Рәсәй Федерацияһы геройы, генерал-майор Миңлеғәли Шайморатов исемендәге синыфтар булдырылды. Атап үтелгән мәктәптәрҙә легендар комдивҡа бағышланған кабинет-музейҙар эшләйәсәк. Шайморатов синыфтарында уҡыусыларҙы үҙҙәренең бержәм мәктәп формаһы айырып тора, ә инде төрлө ҡаҙаныштары өсөн улар "Йәш шайморатовсы" значогы менән бүләкләнәсәк.

Тантанала Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров уҡыусыларға мөрәжәғәт итеп, был көндөң уларҙың тормошонда яңы осорға юл асыуын билдәләне. "Һеҙ Рәсәй Федерацияһы Геройы, генерал-майор Миңлеғәли Шайморатов исемендәге синыфтарҙа уҡыясаҡһығыҙ. Беҙ батырыбыҙҙың иҫтәлеген мәңгеләштереүҙе шулай дауам итәбеҙ. Һеҙҙә ғәҙәти булмаған дәрестәр барлыҡҡа киләсәк: һыбай йөрөү, уҡ атыу, йөҙөү, башланғыс хәрби әҙерлек. Был дәрестәр физик көсөгөҙҙө, характерығыҙҙы һәм, тәү сиратта, рухығыҙҙы нығытыр. Легендар комдив Шайморатовҡа Советтар Союзы Геройы исеме бирелеүгән Башҡортостан халҡы һуғыштан һуңғы 75 йыл буйына көттө. Рәсәй Президенты беҙҙе ишетте һәм ысын мәғәнәһендә тарихи хәҡиҡәтте тергеҙҙе. Быйыл 30 мартта Владимир Владимирович Путин немец-фашист илбаҫарҙарына ҡаршы көрәштә күрһәткән батырлығы һәм ҡаһарманлығы өсөн генерал-майор Миңлеғәли Шайморатовҡа Рәсәй Геройы исеме биреләүе тураһында указға ҡул ҡуйҙы. 9 Майҙа Геройҙың Алтын йондоҙо Республика Милли музейы фондына мәңгелеккә һаҡланыуға тапшырылды. Беҙ барыбыҙ ҙа милли батырыбыҙ менән ғорурланабыҙ. Генерал Шайморатов - беҙҙең өсөн Тыуған илде яратыу һәм һаҡлау өлгөһө. Ҡәҙерле балалар, һеҙ - уҡыусылар араһында беренсе шайморатовсылар, был бик маҡтаулы һәм яуаплы исем. Һеҙҙең иңгә легендар комдивтың иҫтәлеген лайыҡлы, тыуған Башҡортостан һәм Рәсәйҙең ысын патриоттары булыу яуаплылығы ята. Мин һеҙҙең шайморатовсылар символикаһы эшләнгән форманы намыҫлы һәм ғорур кейеп йөрөрөгөҙгә ышанам. Һәр ваҡыт комдивтың: "Шайморатов тоҡомдары сигенә белмәй", - тигән девизын тотоғоҙ, уны анығ эштәр менән раҫлағыҙ, һынауҙарҙан һәм ауырлыҡтарҙан ҡурҡмағыҙ, маҡсатығыҙға табан ҡыйыу барығыҙ. Мин һеҙҙе тормошоғоҙҙағы ошо иҫтәлекле ваҡиға менән ихлас ҡотлайым һәм киләсәктә юғары үрҙәр яулауығыҙҙы һәм беҙҙе уныштарығыҙ менән ҡыуандырыуығыҙҙы теләйем", - тине Радий Хәбиров.

Рәсәй Эске эштәр министрлығы эске ғәскәрҙәренең Миңлеғәли Шайморатов исемендәге 29-сы Өфө махсус тәғәйенләнештәге отряды командиры урынбаҫары Ирек Ғәниев, Бөйөк Петр указы буйынса ойошторолған кадет кластарының 300 йыл дауамында уникаль кадрҙар әҙерләү үҙәге булыуын билдәләп, уҡыусыларға кадетлыҡ, яугир-шайморатовсылар традицияларына тоғро булыуҙарын теләне һәм балаларҙың бары тик яҡшы билдәләренә генә өлгәшеүенә ышаныс белдерҙе: "Иптәшлек рухына тоғро булығыҙ. Ғүмерлеккә беҙҙең отрядтың девизы булған һүҙҙәрҙе хәтерегеҙгә һалып ҡуйығыҙ: "Ҡаршыңда кем булыуы мөһим түгел, эргәңдә кем булыуы мөһим". Әгәр хәрби хеҙмәтегеҙҙе контракт буйынса дауам итергә теләһәгеҙ, беҙ һеҙҙе отрядыбыҙға өҫтөнлөклө шарттарҙа ҡабул итә алабыҙ", - тине Ирек Ғәниев.

Йәш шайморатовсыларҙы Шайморатов ордены кавалеры, 29-сы Өфө махсус тәғәйенләнештәге отрядтың икенсе төркөмө беренсе взводының штурмлау бүлеге уҡсы-санитары Вадим Сафин тәбрикләне. Ул уҡыусыларҙа алда мөһим һәм ҡыҙыҡлы юл көтөүен, уларҙың бөгөнгө яугирҙарға лайыҡлы алмаш буласағына ышаныс белдерҙе.

Йәш шайморатовсылар легендар комдивтың исемен намыҫлы йөрөтөргә, Башҡортостанға һәм Рәсәйгә - тоғро, Тыуған ил өсөн башын һалғандарҙың иҫтәлегенә - лайыҡлы, тыуған еренең тоғро улдары һәм ҡыҙҙары булырға, лайыҡлы белем алырға, үҙҙәрен Ватанға хеҙмәткә әҙерләргә һәм шайморатовсыларҙың "Салауат тоҡомдары сигенә белмәй" тигән девизын һәр саҡ иҫтә тоторға тантаналы ант итте.

**Азат ҒИЗЗӘТУЛЛИН.**

*БАШ ҠАЛАМ*

## ВАТАЛАР!

**Ҡала хакимиәтендә видеоконференция бәйләнешендә үткән сираттағы оператив кәңәшмә, ғәҙәттәгесә, ҡаланың йәшәйешен тәьмин иткән тармаҡ етәкселәренең отчетын тыңлауҙан башланды.**

Көн тәртибенә баш ҡалалағы күп фатирлы йорттарҙағы дөйөм милекте капиталь ремонтлау барышы сығарылғайны. Башҡортостан Хөкүмәте ҡарарына ярашлы, 30 йылға раҫланған республика программаһына 17023 күп фатирлы йортто ремонтлау инә, шуларҙың 5050-һе Өфө ҡалаһында урынлашҡан. Әлеге ваҡытта пландың 61 проценты тулыһынса үтәлгән, ҡалғандарында эштәр алып барыла.

Рәсәй Эске эштәр бүлегенең Өфө ҡалаһы буйынса идаралығының полиция начальнигы урынбаҫары полиция подполковнигы Илдус Шәңгәрәев оператив кәңәшмәлә баш ҡалала йәмәғәт милкен боҙоуҙар дауам итә, тине һәм быйыл өсөн ҡаралған яуаплылыҡ - РФ Енәйәт Кодексының 214-се статьяһына ярашлы, биналарҙы йәки ҡоролмаларҙы, йәмәғәт транспортындағы йәки башҡа урындағы милекте боҙған өсөн штраф, шулай уҡ суд 360 сәғәт мәжбүри эш, 1 йылға тиклем холоҡ төҙәтеү эштәренә йәки 3 айға тиклем ҡулға алырға ҡарар сығарыуы мөмкин, тигәндә иҫкә төшөрҙө.

## ТРАМВАЙМЫ?

**"Коммерсант-Уфа" баҫмаһында үткән матбуғат конференцияһында ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары - Транспорт һәм элемтә идаралығы начальнигы Илдар Юланов, федераль ярҙам булмаһа, Өфө трамвайының киләсәге бик яҡты булмауын белдерҙе. Йәғни транспорттың күсмә составын яңыртыу өсөн уны федераль программаға индерергә кәрәк, ә әлеге ваҡытта унда ҡатнашыу өсөн тағы ла 15 ҡала дәғүә итә.**

Илдар Юланов белдереүенсә, әлеге ваҡытта был транспорт төрөнөң 90 проценты туҙған һәм системаны модернизациялау өсөн 12 миллиард һум аҡса кәрәк. Ул шулай уҡ инвестор булғанда ике канат юлын эшләү ҙә тормошҡа ашырылыҡ булыуын белдерҙе. "Мин Мәскәүҙә Воробьев тауҙарында канат юлын ҡараным. Дөрөҫөн әйткәндә, тәьҫирләндермәне. Улар ярым буш. Беҙҙә туристар ағымы көслөрәк булыр ине", - тине ул. Шулай уҡ Дим районында студенттар кампусы төҙөлһә, канат юлының Салауат Юлаев майҙанынан төҙөләүе урынлы буласағын һыҙыҡ өҫтөнә алды. Әммә, шул уҡ ваҡытта, ҡаланың генераль планында ҡаралған күпер төҙөлөшө был ихтыяжды юҡҡа сығарыуын һәм канат юлы проектына ҡарағанда осһоҙораҡ та булыуын билдәләне. Күперҙәрҙе ике урында - Ағиҙел йылғаһы аша хәҙер тимер юл күпере булған урында һәм Кузнецов затоны районында төҙөү планлаштырыла.

## ХУЖАЛАРЫ ҠАЙҘА?

**Баш ҡалала ташландыҡ һәм тулы комплектацияла булмаған транспорт саралары хужаларын асыҡлау буйынса рейдтар дауам итә. 24 сентябрҙә Октябрь районында үткән рейдта шундай 20 транспорт сараһы табыла һәм уларға ирекле күсереү тураһында белдереүҙәр ҡалдырыла.**

Барлығы ҡабул ителгән мөрәжәғәттәр буйынса комиссия 33 транспорт сараһын тикшерә, шуларҙың 8-е мөрәжәғәттә күрһәтелгән адрес буйынса булмай, 5-һе ташландыҡ тип табылмай. Сираттағы рейд 24 октябргә тиклем үткәреләсәк. Хужаларға ҡуйылған талаптар үтәлмәһә, махсус бойороҡ менән был транспорт саралары мәжбүри рәүештә махсуслаштырылған урындарға алып барыласаҡ. Был осраҡта транспорт сараһын һаҡлаған өсөн уның хужаһы ҡанунға ярашлы һәр тәүлеккә түләргә тейеш. Барлыҡ һорауҙар буйынса транспорт хужалары Ибраһимов бульвары, 84, 308-се бүлмәгә йәки (347) 273-12-62 телефоны буйынса Өфө ҡалаһы хакимиәтенең Коммуналь хужалыҡ һәм төҙөкләндереү идаралығына мөрәжәғәт итергә кәрәк.

## ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклеге онотмағыҙ.**

### Грипп

❖ Грипп эпидемияһы осоронда 1 ҡалаҡ календулаға 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, бер нисә минут ҡайнатырға һәм 1 сәғәт төнәткәндән һуң, һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда 1-2 ҡалаҡ эсергә.

❖ Һуғанды ҡырғыс аша үткәрергә һәм ике ҡат марля киҫәгенә һалырға. Танауҙың аҫҡы өлөшөн көнбағыш майы менән майлап, ошо боҫламаны һалырға. Тәүлегенә 3 тапҡыр ошо рәүешле дауаланыу грипп ауырыуынан һаҡланырға ярҙам итә.

❖ Гриптан һаҡланыу өсөн һөйәктәренән таҙартылған 2 лимон, 2 баш һарымһаҡты ҡырғыс аша үткәреп, бергә ҡушырға һәм өҫтөнә 1 литр ҡайнаған һыу ҡойорға. Ҡараңғы урынға ҡуйып, бүлмә температураһында 3 көн төнәтергә. Төнәтмәне һөҙөргә, һыуытҡысҡа ҡуйырға һәм ас ҡарынға бер аш ҡалаҡ эсергә. Был һаҡланыу сараһын иртә көҙҙән яҙ аҙағына тиклем ҡулланырға кәрәк.

❖ Тымаулай башлағас та танауҙың лайлалы тиресәһенә 1-3 тапҡыр каланхоэ һуты һөртергә кәрәк. Шулай уҡ уны ҡайнар һыуға ҡушып тамаҡты сайҡатырға була.

❖ Тымау тейгәндә һәм грипп йоҡтороу һиҙелгәс тә һәр 2-3 сәғәт һайын 1 ҡалаҡ һуған һуты эсергә (балаларға бал ҡушып бирергә була).

❖ Грипп эпидемияһы осоронда танауҙы йода төнәтмәһе ҡушылған йылы һыу (1 стакан һыуға 9-10 тамсы йода), йәки тоҙло йылы һыу менән йыуҙырырға кәрәк. Был һыуҙы танау менән бер нисә тапҡыр эскә һурып төкөрөргә. Ул гайморитты ла дауалай.

### Һалҡын тейгәндә

❖ 15 грамм алоэ һуты, 100 грамм эс майы (ҡаҙ йәки сусҡа майы), 100-әр грамм аҡ май һәм бал, 50 грамм какаоны бергә ҡушып бутарға. Эҫетелгән һөт менән бергә иртәнсәк һәм кискегә 1-әр ҡалаҡ ашарға.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА**
**әҙерләне.**

**✓ Өфөбөҙҙө Европа ҡалаларынан һис тә кәм түгел, тип әйтергә лә мөмкин. Шул уҡ ваҡытта мине һәр саҡ борсоған бер күренеш бар: башҡорт милли ризыҡтарын тәҡдим иткән кафе-ресторандар юҡ.**



## ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!



# БАШҠОРТ ҠОРАМАҺЫ

Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының ҡул эштәре араһында башҡорт этнографияһында быға тиклем һүрәтләнмәгән оҫталыҡ бар. Был төрлө туҡыма киҫәктәренән хикмәтле биҙәктәр тәҙөү. XX быуаттың икенсе яртыһында башҡорт ауылдарында ошо рәүешле тар урындыҡ ябыуҙарын, юрғандарҙы биҙәгәндәр. Был осорҙа бөтә төбәк халҡында ҡорама ҡулланыу хас күренеш булған. Бер яҡтан, был матди ҡыйынлыҡтарға бәйләп аңлатылған: магазиндарҙа ҡырҡынды туҡыма төргәкләргә ҡарағанда осһоҙораҡ торған. Әммә башҡорттарҙа, башҡа төрки халыҡтарҙа кеүек үк, бындай биҙәкләү ысулы боронғо ғәҙәттәренән килгән; уның биҙәкләү традицияларына ғына түгел, халыҡтың мәҙәни йолаларына ла бәйләнеше күҙәтелә.

Халыҡтың ҡайһы бер кейемдәрҙе һәм көнкүреш әйберҙәрен төрлө төҫлө туҡыма киҫәктәренән эшләү ғәҙәтенә 1970 йылда "Узорные изделия из кусочков материи (курома или курок)" мәҡәләһен баҫтырып сығарған тикшеренеүселәр А.К. Писарчик һәм М.А. Хамиджанова иғтибар итә. Уның нигеҙен М.А. Хамиджанованың 50-се йылдар аҙағында тажиктар араһында йыйнаған мәғлүмәттәре тәшкил итә. Йомғаҡ яһап, авторҙар ҡорама тегеү бөтә Урта Азия территорияһына таралған күренеш булыуын һыҙыҡ өҫтөнә ала һәм "тажиктарға ҡорама әйберҙәр тегеү ғәҙәтен күсереүселәр төрки телле халыҡтар булған" тип күҙаллай. Ҡорама этнографтарҙың хеҙмәттәрендә телгә алынһа ла, был тема тәрәнәйтеп өйрәнелмәгән. Башҡорттарҙың ҡорама ҡорау ғәҙәттәре тураһында мәғлүмәттәрҙе ғилми ҡулланылышҡа индереп һәм башҡа халыҡтар буйынса билдәле сағыштырма мәғлүмәттәрҙе йәлеп итеп, был үҙенсәлекле күренештә төшөнөргә тырышайыҡ.

Башҡорттарҙа ҡорама ҡорау ике төрлө ысул менән эшләнгән: мозаика һәм аппликация алымдары ҡулланылған. Мозаика алымында ҡырҡылған әҙерләмәләр (дүртмөйөш, өсмөйөш, тура дүртмөйөштәр) теге йәки был биҙәкте хасил иткән, алдан уйланылған схема буйынса тегелгән. Әҙер булғас, ҡорамаларҙың сүкланып торған ситтәрен йөшереп, кейеҙ, һырылған мамыҡ йәки йоҡа кизе-мамыҡ эслеккә ҡушып теккәндәр. Аппликация техникаһында биҙәкте төрләләндергәндәр, бер бөтөн булған мозаиканан айырмалы рәүештә, бында ерлек мөһим булған. Ҡайһы бер осраҡта әйберҙең нигеҙен ҡорама тәшкил иткән, икенсе осраҡта - һыҙат һәм ҙур тура дүртмөйөш туҡыма формаһында беркетелгән ерлек эшләнгән. Биҙәкле таҫмалар һәм башҡа әҙерләмәләр араһында урын ҡалдырып, өҫтән билдәле бер эҙмә-эҙлелек менән һалынған.

**Светлана ШИТОВА.**
**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

## ӨФӨ БАШҠОРТО

**Уның хаҡында ҡыҫҡа ғына итеп, табип, журналист, йәмәғәтсе тип кенә әйтергә лә мөмкин. 1998 йылда Башҡорт дәүләт медицина университетын тамамлағас, белем алыуын интернатурала дауам итә һәм артабан фән юлынан китә. Башҡорт дәүләт медицина университеты доценты. Бынан ике тиҫтә самаһы йыл элек йәмәғәт башланғысында БДМУ-ның "Медик" гәзитенең баш мөхәррире урынбаҫары булып эшләй. 2008 йылда инде үҙе баш мөхәррир, шеф-мөхәррир була. Ошо йылдар эсендә баҫма һәм уның етәксеһе күп тапҡырҙар Бөтә Рәсәй фестивалдәрендә һәм конкурстарында еңеү яулай, ә ул быйыл икенсе юғары белем алып, Башҡорт дәүләт университетының Башҡорт филологияһы, шәрҡиәт һәм журналистика факультетын отличие менән тамамлай. БДМУ-ның мәҙәни-киң күләм эштәре бүлегенең журналистика бүлексәһе етәксеһе, журналист-магистр. Башҡортостан Республикаһының "Башҡортостан медиктары" төбәк йәмәғәт ойошмаһы рәйесе. Ошо барлыҡ эштәрҙе башҡарыусы Азамат РӘХИМҠОЛОВ - "Өфө башҡорто" рубрикаһы ҡунағы.**

# БАШҠОРТ МИЛЛИ РИЗЫҠЛЫ...

## ашхана, кафелар кәрәк

**➔ Бөгөн шундай заманда йәшәйбеҙ: кемдер дан-шөһрәт өсөн милләтен алмаштырыуға ла күп һорамай, бәгзеләр, киреһенсә, тамырҙарын юллап, үҙенең башҡорт булыуын асыҡлай. Һеҙ үҙегеҙҙең башҡорт икәнегеҙҙе ҡасан тоя башланығыҙ?**

- Үҙемде айырым шәхес итеп тоя башлағандан, йәғни 3-5 йәштәр тирәһендә, тип әйтә алам. Ҡалала тыуһам да, өйҙә атай-әсәйем тик башҡортса ғына һөйләште. Атайым сығышы менән Миәкә районынан булһа, әсәйем Салауат районынан ине. Шуға күрә, бала саҡта мин хатта башҡа милләттәр бар икәнен башыма ла индермәнем.

**➔ Ә балалар баҡсаһы? Уларҙа балаларҙың икенсе телдә һөйләшкәне аптыратманымы?**

- Бәхеткә күрә, микән, мин бер көн дә балалар баҡсаһына йөрөмәнем. Әлбиттә, баш ҡаланың Карл Маркс урамындағы мәктәпкәсә учреждениела урын да биргәйнеләр. Әммә унда барыу өсөн ҡаланың бер осонан икенсеһенә йөрөргә кәрәк ине. Баланы ыҙлатмайыҡ, тигәндәрме, әллә атай-әсәйгә иртән балалар баҡсаһына алып барыу унайһыҙ булдымы икән, ләкин мин өйҙә өләсәй тәрбиәһендә ҡалдым. Ул ваҡытта ҡалала башҡорт балалар баҡсалары ла юҡ ине. Шуға күрә, башҡортса белеүем, үҙемде башҡорт итеп тойоуым менән, тәү сиратта, өләсәйемә рәхмәтлемен, сөнки атай-әсәй һәр саҡ эштә, күберәген өйҙә өләсәй менән икәүләп кенә донъя көтәбеҙ. Бөгөн өләсәй-олатай тәрбиәһе булмауы ла балаларҙың башҡорт телен белмәүенә йоғонто яһай, тип уйлайым. Сөнки ейән-ейәнсәрҙәренә әкиәттәр һөйләп, уларға бала саҡтан әсә теленең матурлығын, мөһимлеген һеңдереүсе олатай-өләсәйҙәр юҡ, уларҙы телевизор, смартфон-планшеттар һәм интернет селтәре алмаштыра.

**➔ Рус мәктәбендә белем алһағыҙ ҙа, өләсәй тәрбиәһе үҙенекен иткән - туған телдән ситләшмәгәнһегеҙ...**

- Уҙған быуаттың 80-се йылдарында, үкенескә күрә, Өфөлә ни бары ике генә башҡорт мәктәбе бар ине - Фатима Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт ҡала гимназияһы һәм Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты. Һәм улар баш ҡалала йәшәүсе башҡорттарҙың башҡорт мәктәптәренә ихтыяжын тулыһынса ҡәнәғәтләндерә алманы, шуға күптәр балаларын рус мәктәптәренә бирергә мәжбүр булды. Мин үҙем Совет районындағы 108-се мәктәбен тамамланым. Ул ваҡытта халыҡтың башҡорт мөхитенә ихтыяжын ҡәнәғәтләндереү даирәһе бик тар булды. Шуға ла миненән өсөн ул ваҡытта башҡорт мөхите булып радио-телевидениелағы башҡортса тапшырыуҙар һәм атай-әсәйем алып йөрөгән Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры спектаклдәре торҙо.



**➔ Илһөйәрлек, телһөйәрлек, мәҙәниәткә һәм халҡыңа һөйөү әсә һөтө менән инә. Уларҙы яһалма рәүештә һеңдереп буламы?**

- Был төшөнсәләрҙең барыһы ла ғаиләлә тәрбиәләнә, нигеҙе ғаиләлә һалына, тиер инем. Тәү сиратта, бала үҙенең атай-әсәйенән өлгө ала. Әгәр улар ғаиләлә бер төрлө һөйләп, урамда йәки кеше алдында икенсе ғәмәлдәр ҡылһа, бала ла уларҙан күреп, шулай булырға кәрәк икән, тип уйлай. Саф күңелле бала өсөн атай-әсәй иң ҙур абруй, улар һәр нәмәне һеңдереп бара. Юҡҡа ғына, баланы түгел, үҙеңде тәрбиәлә, тимәйҙәр бит.

**➔ Шау-шыулы ҡалала ла һәр кемдең иң яратҡан, күңеленә һиллек биргән мөйөшө була. Һеҙҙең дә шундай территорияғыҙ бармы?**

- Ауыл кешеһе өйҙән сыҡһа, шунда уҡ тәбиғәт ҡосағына сума - тирә-яҡта тауҙар, урман, ялан-ҡыр һәм саф һауа уратып алған. Уйлап ҡараһаң, ожмахтың үҙендә йәшәйҙәр. Башҡорт бит тәбиғәт балаһы, ул иркенлекте, азатлыҡты ярата. Шуға Өфөлә матур урындар күп булһа ла, мин бигерәк тә "Йәшел сауҡалыҡ" районын, "Ботаника баҡсаһы", "Урмансылар паркы", "ВДНХ" территорияларын яратам. Бәлки, ундағы йәшеллек, урман булыуы күңелемә тыныслыҡ бирәлер. Бәлки, ҡандағы башҡортлоҡ уяналыр.

**➔ Һеҙҙең өсөн нимә ул башҡортлоҡ?**

- Башҡортлоҡ - башҡорт халҡы тәбиғәттә, киң сәхрәлә йәшәгән дәүерендә туплаған барлыҡ ҡиммәттәр системаһы. Мин башҡорт, сөнки үҙемде башҡорт тип тоям, башҡортса һөйләшкән ғаиләлә үҫтем, бишек йырын миңә әсәйем менән өләсәйем башҡортса йырлаған, улар миңә башҡорт әкиәттәре һөйләгән, мин башҡорт әҙәбиәте һәм башҡорт сәнғәте нигеҙендә тәрбиәләнгәнмен. Тирә-яғымда башҡорт мәҙәниәтле кешеләр булды һәм улар миңә башҡорт менталитетын, ошо ҡиммәттәрҙе һеңдерҙе.

**➔ Башҡортостанда һуңғы йылдарҙа башҡорт брендтары һиҙелеп үҫә, улар сауҙа нөктәләрендә лә күпләп күренә. Һеҙҙең гардеробта "Мин - башҡорт" тип ҡысҡырып торған кейемдәр бармы?**

- Миңә был тема бик яҡшы таныш һәм мин уны ишетеп кенә түгел, ә үҙемдә татып беләм. 2016 йылда Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәте ҡарамағындағы Финанс университетында һөнәри әҙерлек үттем. Шунда Башҡортостан Республикаһы миҫалында "Территория брендингын үҫтереү" темаһына сығарылыш хеҙмәте яҙҙым. Гардеробымда башҡорт милли кейемдәрем бар. Шулай уҡ, медик булараҡ, башҡорт милли аш-һыуҙары менән ҡыҙыҡһынам, уның буйынса хеҙмәттәр ҙә яҙҙым.

**➔ Ғаиләгеҙҙә ҡыҙ үҫтерәһегеҙ, уға башҡортлоғон аңлатаһығыҙмы, әллә һайлау хоҡуғын үҙенә биреп ҡуйғанһығыҙмы?**

- Мин үҙем дуҫтарым ғына түгел, хатта коллегаларым менән дә башҡортса һөйләшергә тырышам. Өйҙә лә башҡортса аралашабыҙ. Бала шуларҙың барыһын да күреп үҫә. Әлбиттә, хәҙер балалар баҡсаларында башҡорт төркөмдәре бар, тотош ҡала башҡорттарының ихтыяжын тулыһынса ҡәнәғәтләндермәһә лә, баш ҡалала башҡорт мәктәптәре һаны артты. Үҙем башҡорт мәктәбендә уҡый алмаһам да, ҡыҙым Өфөнөң Ф. Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт ҡала гимназияһында белем ала.

**➔ Өфө хәҙер күҙгә күренеп матурлана, сағыулана, әммә Башҡортостандың баш ҡалаһы булараҡ, уға нимә етмәй, нимәне үҙгәртергә булыр ине?**

- Өфөбөҙҙө Европа ҡалаларынан һис тә кәм түгел, тип әйтергә лә мөмкин. Шул уҡ ваҡытта мине һәр саҡ борсоған бер күренеш бар: башҡорт милли ризыҡтарын тәҡдим иткән кафе-ресторандар юҡ. Хатта ситтән килгән дуҫтарҙы ҡайҙа алып барырға белмәй баш ватаһың.

**➔ Бөгөн башҡорт милләте алдында торған иң ҙур проблеманы нимәлә күрәһең?**

- Үкенескә күрә, ысын берҙәмлек тә, милләтте берләштереүсе аныҡ идеялы аныҡ ойошма ла юҡ. Ойошмалар күп, һәр береһе Крылов мәсәлендәгесә үҙ яғына тарта, һәр береһе үҙен генә һәйбәт һәм лайыҡлы эш күрһәтәм тип уйлай. Ә халыҡ улар араһында өҙгөләнә - теге яҡҡа ла барып ҡарай, был яҡҡа ла килеп ташлана, әммә береһендә лә үҙ урынын таба алмай... Хәйер, был хәл бер беҙҙең халыҡҡа ғына ҡағылмай инде.

**➔ Үҙегеҙ ҙә журналист булараҡ, үҙегеҙгә һиндәй һорау бирер һәм нисек яуаплар инегеҙ?**

- Мине һәр саҡ ошо һорау борсой: ни өсөн уҙған быуаттың 50-70-се йылдарында Өфөлә йәшәгән башҡорттар үҙҙәренең туған телендә һөйләшергә оялған? Был һорауға яуапты мин белмәйем, әммә бик белергә теләр инем...

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әңгәмәләште.**

*ЫРЫУЫҢ КЕМ?*

# ТӘРӘН ТАМЫРЛЫ БАШҠОРТБОҘ - ГӘРӘЙ БУЛА ЫРЫУЫБЫҘ



Кирәйәт ханы Маркус III һәләк булғас, хан власы уның оло улы Хурджакус (Григориус) Бойороҡ хан ҡулына күсә. Уның Эрке Кара, Керейдай, Тай Тимур, Бука Тимур, Илка Селенгун һәм Тогрул исемле улдары була. Атаһы үлгәс тә, сик буйы ерҙәрендә идара итеү һылтауы менән, Тогрулды ағалары властан ситләтә. Хан власы өсөн башланған низағта Тогрул үҙенең ике ағаһын - Тай Тимурҙы һәм Бука Тимурҙы үлтертеп, хан титулын үҙенә ала. Әммә Тогрулдың гүрхан дәрәжәһендәге ике туған ағаһы, уның ошо вәхши ҡылығын кисерә алмай, уны хан тәхетенән мәхрүм итә. Тогрул монгол юлбашсыһы Есугай баһадирҙан ярҙам һорай, унһы Тогрулға яңынан кирәйәт ханы дәрәжәһен ҡайтарта. Гүрхан иленән ҡасып китергә мәжбүр була.

Ошо уҡ йылда Тогрул хандың анды (әйтелгән туғаны) итеп иғлан ителгән Есугай баһадир далала татарҙар тарафынан ағыулап үлтерелә. Ул ҡуңрат юлбашсыһы ҡыҙын үҙенең туғыҙ йәштәге улы Темуджинға йәрәшер өсөн юлға сыҡҡан була.

Есугай баһадирҙың вафатынан һуң монгол олоҫо тамам тарҡала. Йәш монгол кенәзе атаһының анды булған Тогрул ханға һыйынырға ҡарар итә: "Минең атайыма анд булған кеше минең өсөн атайыма тиң", - тип, ул Тогрул ханға бүләктәр менән килә. Шул ваҡыттан алып киләсәктә Сыңғыҙ хан исемен аласаҡ Темуджин кирәйәт ханының вассалына әйләнә.

1184 йылда монголдарҙың төп йортона (ставкаһына) көтмәгәндә меркеттәр һөжүм итә, улар Темуджиндың ҡатыны Бортэны үҙҙәре менән әсирлеккә алып китә. Уға йәнә Тогрул хан ярҙамға килә. Кирәйәттәрҙең һәм монголдарҙың берләштерелгән ғәскәре меркеттәрҙең башлығы Toктай бек ғәскәренә һөжүм итеп, уларҙы еңеүгә өлгәшә. Ошо еңеүле алыштан һуң Темуджин кирәйәт юлбашсыһы Тогрул ханға һәм үҙенең әйтелгән туғаны, джаджират кенәзе Джамухаға былай тип мөрәжәғәт итә: "Хаган, атам минең, һәм Джамуха туғаным, һеҙҙең икегеҙ менән дуҫлашып, Күктән вә Ерҙән көс-ҡеүәт алып, беҙ ир исемен йөрөткән меркеттәрҙең күкрәктәрен бушата алдыҡ, һәм уларҙың бауырҙарын киҫеп алдыҡ. Беҙ уларҙың түшәктәрен буш ҡалдырҙыҡ, уларҙың нәҫелен вә кешеләрен юҡ иттек, иҫән ҡалғандарын әсирлеккә алдыҡ". Ошо алыштан һуң монголдар араһында Темуджиндың абруйы көсәйә, ә 1189 йылда монгол ҡәбиләләренең бер өлөшө уны үҙҙәренең ханы итеп иғлан итә, ул Сыңғыҙ хан титулы менән аталып йөрөтөлә башлай.

Артабан кирәйәт ханы Тогрулды туғандары ҡабаттан ханлығынан яҙҙыра, ул ҡара ҡатай гүрханынан ярҙам һорап ҡараһа ла, килешеүгә өлгәшә алмай. Си Ляо дәүләтендә бер йыл самаһы йәшәгәс, Тогрул гүрханға ҡаршы бола ойоштора, әммә унан да ҡасып китергә мәжбүр була. Уйғырҙар, тангуттар территорияһы аша үткәндә, ашарҙарына бер тәғәм ризыҡтары ла ҡалмай. Тап шул мәлдә Сыңғыҙ хан ебәргән хәбәрсе яугир Тогрул ханға үҙ хужаһының уға ярҙам итәсәге хаҡында белдерә. Бөйөк монгол ханы Тогрулды яңынан хан тәхетенә ултырта.

Ә был саҡта Цзинь империяһы һәм үтә көсәйә барған татарҙар араһында мөнәсәбәттәр ҡырҡа үҙгәрә, шунлыҡтан империя етәкселеге татарҙарҙан ҡотолорға була. Ошо маҡсатта император Тогрул хан һәм Сыңғыҙ хан менән татарҙарға ҡаршы бергәләп яу асыу хаҡында килешеүгә өлгәшә.

Империя ғәскәре, татарҙарҙы ҡыҫырыҡлап, кирәйәт һәм монгол засадаһына табан сигенергә мәжбүр итергә тейеш була. Ошо поход 1198 йылға планлаштырыла. Сыңғыҙ хан, ризалығын белдереп, былай ти; "Татарҙар - беҙҙең боронғо дошмандар. Улар беҙҙең ата-бабаларыбыҙҙы үлтерә ине. Шуның өсөн беҙгә лә ошо ҡан ҡойошта ҡатнашыу фарыз". Сыңғыҙ хан Тогрул ханға татарҙарға ҡаршы бергәләшеп сығыу тәҡдимен ебәрә, тогрул уға былай яуаплай: "Дөрөҫлөк һиндә, улым минең. Берләшербеҙ!" Ошо ҡыйралышта татар ғәскәре тар-мар ителә, Цзинь императоры еңеү уңайы менән Тогрул ханға "ван" (йәғни, батша) титулын бирә, уны шул саҡтан Ван хан тип атай башлайҙар. Ә Сыңғыҙ хан "джаутхури" дәрәжәһенә эйә була, ул ҡытай телендә "бөйөк әмир" тигәнде аңлата.

1200 йылда Сыңғыҙ хан һәм Тогрул Ван хан меркет һәм тайджиуттарҙың берләштерелгән ғәскәрен тар-мар итә. Монгол-кирәйәт баҫымы менән бер нисек тә килешергә теләмәгән меркет, тайджиут, джаджират, ҡуңғрат, салжиут, татар, ойрат, найман һәм башҡа ваҡ ҡәүемдәр монгол һәм кирәйәттәргә ҡаршы ойошоп, Джамуханы үҙҙәренең гүрханы итеп иғлан итә. Әммә ошо берләштерелгән ғәскәр ҙә "аталы-уллы" Ван хан һәм Сыңғыҙ хан армияһын еңә алмай. Улар, татарҙар тарафынан мәкерле рәүештә һәләк ителгән Амбағай хандың васыятына тоғро ҡалып, татарҙарҙы ахырынаса юҡ итергә ҡарар итә. 1202 йылда Даланнэмургес ыҙанындағы һуғышта татарҙар һуңғы еңелеүгә дусар була. Әсир алынған барлыҡ татар кешеләрен бер урынға ҡыуып килтерәләр. Бында уларҙың тарихи яҙмышына һуңғы нөктә ҡуйыла. Поэтик строфалы тарихи сығанаҡта ошондай мәғлүмәт теркәлеп ҡалған: "Советта һөйләштек һәм был эште шулай бөтөрҙөк: Элек-электән татар халҡы Ата-бабаларҙың булған палачы. Ҡанға ҡан көҫәп алайыҡ үс. Үткәрәйек барыһын ҡылыстан: Арба күсәренә үлсәгәс тиңләп, Бейегерәктәрен ҡылыстан үткәреп, Мәңгелек ҡол итеп ҡалғанын, Таратайыҡ бар тарафҡа бүләк итеп".

Тикшеренеүсе Е.И. Кычанов шулай яҙа: "Монголдар күтәрелгәнгә тиклем үк татар-монгол ҡәбиләләренә үҙҙәренең исемен ҡалдырып, татар ҡәбиләһе шулай һәләк булды. Һәм ошо һуйыштан һуң егерме-утыҙ йыл үтеүгә көнбайыштағы йыраҡ ауыл һәм тораҡтарҙа "Татарҙар!" тигән хәүефле тауыштар яңғыраған саҡта етеп килеүсе баҫҡынсылар араһында ысын татарҙар аҙ ине, уларҙың тик дәшһәтле иceмe генә ҡалды, ә улар үҙҙәре, монгол ҡылыстарынан тураҡланып, күптән инде тыуған олоҫтары ерҙәрендә ята ине". Эйе, тарихта шулай ҙа була: ҡасандыр ҡеүәтле, ғәйрәтле булған халыҡ һәләкәткә осрап, юҡҡа сыға, ә уның исеме, башҡалар тарафынан үҙләштерелеп, үҙенең яңы тормошо менән йәшәй башлай.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ**
**әҙерләне.**
**(Дауамы. Башы 39-сы һанда).**

*ӘЙТКӘНДӘЙ...*

# ҒӘЙНӘЛӘРҘӘ БАЙРАМ...

**Ошо көндәрҙә Пермь крайының Чернушки районындағы Әминкәй ауылында мәҙәни-мәғлүмәти акция сиктәрендә байрам сараһы уҙғарылды. Сараны Чернушки районы башҡорттары ҡоролтайы рәйесе, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Зәүиә Махатова етәкселегендәге "Ғилмияза" ансамбле һәм "Сулпан" өлгөлө балалар коллективы сағыу сығыштары менән биҙәне.**

Мәҙәни-мәғлүмәти акция барышында Пермь крайы башҡорттары ҡоролтайы рәйесе Рәсил Мөхәмәтйәнов, урындағы тарихи-мәҙәни үҙәк методисы һәм Чернушки районы башҡорттары ҡоролтайы рәйесе Зәүиә Махатова башҡорт телен, шулай уҡ уның был төбәк халҡы һөйләшкән диалекттарын белеү, өйрәнеү зарурлығы хаҡында һөйләп, башҡорт әҙәби телендә һәм Ғәйнә башҡорттары диалектында нәшер ителгән китаптар, "Ғәйнә диалекты һүҙлеге"н, "Пермь башҡорттары" гәзитен таратты. Рәсил Тимерғәзе улы әйтеүенсә, ғәйнә диалектының үҙенсәлекле лексикаһы тупланған китапҡа өс мең самаһы һүҙ индерелгән. "Беҙ башҡорт тигән бөйөк халыҡ вәкиле булыуыбыҙҙы белергә, шуның менән ғорурланырға, тарихыбыҙҙы өйрәнергә һәм киләсәктә үҙебеҙҙе юғалтмаҫҡа, йәғни берҙәм булырға тейешбеҙ", - тине ауыл халҡы алдында сығыш яһап крайҙың ҡоролтай рәйесе Рәсил Мөхәмәтйәнов.

Шулай уҡ крайҙа йәшәгән милләттәштәр тағы бер иҫтәлекле ваҡиғаға шаһит булды: Барҙа районы хакимиәте бинаһы ҡаршыһында ғәйнә башҡорттарының тарихи шәхесе, улус старшинаһы, башҡорт депутаты һәм сәнәғәтсе Туктамыш Ишбулатовҡа бюст ҡуйылды, авторы Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Өлфәт Ҡобағошов. Бюст эргәһенә шәхестең шәжәрәһе лә урынлаштырылған һәм былар ғәйнә башҡорттарына арналған тарихи комплекстың бер өлөшө генә. Һәйкәлдәр композицияһын асыу тантанаһы 14 ноябргә билдәләнгән.

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 75*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

### Бөтмәҫ дандары ҡалды

Бында барыһы ла ентекләп эшләнгән: телефонист һәм радист өсөн урындар ҙа, иҫәпләүсегә өҫтәл дә, ял итер өсөн һикеләр ҙә. Лейтенант мине урын һәм ут нөктәләре буйынса ентекләп ориентирланы, һорауҙарға тыныс һәм ышаныслы яуап бирҙе. Уның ҡара күҙҙәре үҙе ут асырға әҙер булған урындың һәр бер нескәлеген һеңдергәндәй тойолдо миңә. Лейтенанттың батареяһы, һәр ваҡыттағыса, алышҡа әҙер ине. Бындай командир менән башҡаса булыуы мөмкин түгел. Ул бит дошмандың ғәрәсәтле уты аҫтында уның Олым йылғаһы ашаһындағы батареяһын юҡ итте, һәм ул, һөжүмгә тупланып, атакаға ташланғас, пехотаға үлемесле ут яуҙырҙы. Ул саҡта уның батареяһы алдында гитлерсыларҙың тотош батальоны ятып ҡалды.

Мин дивизия менән командалыҡ иткәндә инде М.М. Гәрәев полктың штаб начальнигы вазифаһына тәҡдим ителде һәм һуғышты ошо вазифала тамамланы. Советтар Союзының күп ордендары менән бүләкләнде, майор званиеһын алды.

Оборонаның икенсе эшелонында мине 291-се полк менән ваҡытлыса командалыҡ иткән батальон комиссары Хәйрулла Нурғәли улы Әхмәтов ҡаршы алды. Ул полк командиры Г.А. Нафиковтың үлемен бик ауыр кисерә ине, шулай ҙа, әкренләп күңелһеҙ уйҙарынан арына биргәс, беҙҙең һөйләшеү эшлекле төҫ алды. Дивизия комиссары М.З. Нәзиров миңә Әхмәтовты ныҡышмалы һәм тынғыһыҙ политработник, тип ҡылыҡһырлағайны. Лобановка өсөн алыштар барғанда ул барса участкаларҙа ла алда булды, шәхси өлгөһө менән яугирҙарҙы рухландырҙы. Унан һуңғы алыштарҙа ла ул шундай булып ҡалды.

Ш. Әлибаев һәм Х. Мирсаяпов эскадрондары ла үҙ обороналарын тырышып камиллаштырҙы. Әлибаев бәйле яраһы менән йөрөй. Ул Лобановка янында барған атакала яралланғайны, бында уның эскадроны дошмандың ҡоторонған һөжүменә батырҙарса ҡаршы торҙо. Ш.Әлибаев эскадроны иҫәбендә дошмандың ике йөҙҙән ашыу юҡ ителгән һалдаты һәм офицеры бар ине. Бынан тыш, алыш барышында уларҙың бер орудиеһы һәм һигеҙ аты ҡулға төшөрөлдө.

- Ни өсөн Лобановкаға бәреп инә алманығыҙ һуң? - тип һораным лейтенанттан.

- Көс етмәне, иптәш полковник, - тип баҙабыраҡ яуапланы Әлибаев. - Дошман бар яҡлап ҡыҫа башланы, контратакаға күпме генә күтәрелһәк тә, уңышҡа өлгәшелмәне. Шунда үҙем дә яраландым...

Уның һүҙҙәрендә полк командирының үлеме өсөн ғәйеплелек тойғоһо сағылғандай булды. Әммә уның бында бер ниндәй ҙә ғәйебе юҡ ине.

- Ә беҙ, иптәш полковник, командирыбыҙ өсөн үс аласаҡбыҙ әле, - Әлибаев шым ғына шулай тип әйтте. - Һуғыш оҙаҡ барасаҡ, нәфрәтебеҙ көслө...

**Вәли ИҘРИСОВ**
**әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

✓ *Иң һоҡландырғаны һәм ғорурландырғаны - ул Өфөгә ингән саҡта уҡ тауҙа, ҡаяла Салауат батырҙың атлы һыны ҡаршы алыуы булды. Аптыратҡаны ла шул булғандыр.*



**Һәр кемдең күңелендә йылы хәтирәләр булып уйылған тыуған төйәк һәм... торған төйәк була. Баш ҡалабыҙ Өфө лә күп милләттәштәр өсөн хыялдарҙы ысын иткән, тормош маҡсаттарына өлгәштергән, ғүмер йылдары йомғағын тағатҡан, үҙ затының вариҫтарын ишәйткән торған төйәк булып әүерелгән. Өфөнө тыуған төйәктәренән яҡыныраҡ күреп төйәкләнгәндәрҙең уға фиҙаҡәр хеҙмәт итеүселәрҙән булыуы тураһында ла онотмайыҡ. Беҙ был юлы Көйөргәҙе һәм Илеш райондарында тыуып үҫкән, әммә ғүмерҙәрен Өфөбөҙҙө Башҡортостандың баш ҡалаһы статусына тап килтерергә, уның үҙ милли йөҙөн булдырырға тигән изге маҡсатҡа арнаған билдәле ижади шәхестәр - скульптор Өлфәт ҠОБАҒОШОВ һәм архитектор Рудоль АВСАХОВ менән әңгәмә ҡорҙоҡ.**

# МИНЕҢ

**Өфөгә тәүге тапҡыр аяҡ баҫҡан көнөгөҙҙө хәтерләйһегеҙме? Нимә аптыратты, һоҡландырҙы, ә нимә оҡшаманы?**

**Ө. Ҡобағошов:** Мин Өфөгә тәүге тапҡыр 1970 йылдарҙа килгәнемде ныҡ хәтерләйем. Иң һоҡландырғаны һәм ғорурландырғаны - ул Өфөгә ингән саҡта уҡ тауҙа, ҡаяла Салауат батырҙың атлы һыны ҡаршы алыуы булды. Аптыратҡаны ла шул булғандыр. Уның монументаллеге, масштабы һәм башҡорттоң бар булмышын сағылдырған бөркөт ҡарашлы һындың тап ҡаяла баҫып тороуы, әлбиттә, кемде генә һоҡландырмай, аптыратмай, ғорурлыҡ тойғоһо уятмайҙыр! Шул уҡ ваҡытта Өфөлә милли скульптураларҙың, милли архитектураның булмауы, милли мөхит юҡлығы, туған телендә, башҡортса һөйләшкән кешеләрҙең аҙ булыуы күңелгә ятып етмәне. Хәҙер Өфөлә йәшәүемә илле йылға яҡын ваҡыт уҙҙы. Был йүнәлештә барыбер ҙә күңел ҡыуаныр үҙгәрештәр бар, әлбиттә.

**Р. Авсахов.** Өфөгә тәүге тапҡыр 1964 йылдың июнь баштарында килеп эләктем. Яҡшы уҡыған һәм пионер эшендә әүҙем ҡатнашҡан балалар өсөн мәктәп баш ҡалабыҙға ана шундай сәйәхәт ойошторғайны. Мин әлеге сәфәр шатлығын ошоға тиклем онота алмайым. Яратҡан уҡытыусым, беҙҙең класс етәксеһе Бикә апай Вәлиуллина, төрлө йәштәге 15 баланан торған төркөмдөң етәксеһе итеп билдәләнгәйне. Әле булһа хәтерләйем: беҙ йәйге еңел кейемдә - ҡыҫҡа еңле аҡ күлдәк кейгәнбеҙ, ҡара күкһел салбарҙа, галстуктар таҡҡанбыҙ - ашҡынып-илһамланып республикабыҙ баш ҡалаһына юл тоттоҡ. Өфөгә килеп төшкәс, беҙ ниндәйҙер юғары вольтлы электр линияһы һуҙылған урамдағы бер мәктәпкә урынлаштыҡ. Йоҡлап булманы: урамдан туҡтауһыҙ үтеп торған машиналар гөрһөлдәүенән бина дер һелкенеп тора ине. Иртәнге ҡояштың көлтә нурҙары яҡтыһында тәҙрәнән асылған матур күренештәр иҫтә ҡалған. Мәктәп урамынан бер яҡ ситтәрәк ябай ғына ауыл өйҙәре теҙелеп киткән. Быны күреп, бик тә күңелем ҡайтты: ошо микән ни Өфө ҡалаһы тигәндәре? Беҙҙең өсөн ҡала тормошо менән танышыу мәктәптәге йыуынғыс бүлмәһенән һәм ашхананан башланды. Шунан һуң сафҡа теҙелеп, трамвай юлы һуҙылған урамға табан киттек. Октябрь проспектының был өлөшөндә биш ҡатлы йорттарҙың нигеҙҙәре генә һалынып ята ине. Арыраҡ туғыҙ ҡатлы йорт. Был иҫ киткес бейек булып тойолған йорт үҙенең серлелеге менән ябай ауыл балаһының хәтеренә бик ныҡ уйылып ҡалды, әлбиттә. Ҡала Советы бинаһы шул саҡта уҡ бар ине, буғай, тик ул ни өсөндөр уратып кәртәләп алынғайны.

Шунан һуң трамвайға ултырып, ҡала үҙәгенә килеү мине елкендереп ебәрҙе, бында беҙҙе бик күп ҡыҙыҡлы нәмәләр көткәне аңлашылды. Күңелде тулҡынландырған иң иҫтәлекле хәтирәләрҙең береһе - В.И. Ленин менән Н.К.Крупскаяның йорт-музейын барып күреү булды. Өфөлә шундай бөйөк кешеләрҙең булыуы беҙҙең күҙ алдында баш ҡалабыҙ абруйын тағы ла күтәреп ебәрҙе. Революцион урамында булған тағы бер ҡыҙыҡлы осраҡ тураһында ла һөйләп үтәйем. Әлегесә, сафҡа теҙелеп, тротуар буйлап китеп барғанда ҡаршыбыҙға олпат һәм бөтәһе лә костюм кейгән дүрт ир осраны. Беҙҙең Бикә апайыбыҙ уларҙы ҡыйыу ғына туҡтатты ла, үҙе һәм беҙҙең менән таныштырҙы. Былар танылған шағир һәм яҙыусылар Әнғәм Атнабаев, Ҡадир Даян, Баязит Бикбай, Динис Исламовтар булып сыҡты. Уларҙы "Башгражданпроект" ойошмаһы урынлашҡан бина янында осратҡайныҡ. Яҙмыш тигәнең ҡыҙыҡ шул: миңә аҙаҡ тап ошо проект институтында ябай архитекторҙан алып директорға тиклем 15 йыл буйы эшләргә тура килде.

Ул саҡтағы Өфө былай яҡшы тәьҫир ҡалдырҙы, йәшеллектең күп булыуы ла оҡшаны. Тик был йәшеллектән ҡала урамдарының ап-аҡ тирәк мамығына сорналыуы ғына оҡшап етмәгәйне. Тағы ла ул саҡтағы торлаҡ йорт биналарының күбеһе бик иҫке һәм уларҙан ниндәйҙер яман еҫтәр аңҡый ине, яңы йорттар бик аҙ һәм уларҙың архитектураһы эс бошорғос ябай, бер төрлө булыуы менән хәтерҙә ҡалған.

**Ауылда тыуып үҫкән егеттәргә ҡала төҙөлөшөнә, уны биҙәүсе төрлө сәнғәт объекттарына ҡағылышлы һөнәр үҙләштереү еңел бирелмәгәндер?**



*Милли скульптурала халҡыбыҙҙың бар булмышы: рухы, уй-хыялдары, кисерештәре, боронғоһо, бөгөнгөһө, киләсәге сағылыш табырға тейеш. Ситтән ҡарағанда уҡ, силуэты, һыны менән кешене арбап, биләп алырға, эргәһенә килеп ҡарағанда һоҡланыу, ғорурланыу һәм башҡа ыңғай тойғолар уятырға тейеш. Ҡайҙа ғына, хатта сит ҡитғаларҙа йөрөһәң дә, күҙ алдына килтереүең менән үк уның образы Башҡортостанды, башҡорт халҡын хәтерләтергә, уның бер киҫәге булып һинең менән бергә йәшәргә тейеш! Сосланбәк Тавасиевтың Салауаты ана шундай! Әлбиттә, бындай әҫәрҙәр һирәк тыуа, ләкин беҙгә эйәрергә маяҡ, өлгө бар. Ул торған урыны - архитектураһы, композицияһы, трактовкалау ысулдары, башҡа төр алымдары менән юғары сәнғәт өлгөһө.*

**Ө. Ҡобағошов:** Эйе, тап шулай. Мин ауыл мәктәбендә рәсем һәм йыр уҡытыусыһы булып эшләгәндән һуң ғына Өфө сәнғәт училищеһына документтарымды бирҙем. Үҙем менән күп кенә эштәр алып килдем. Сөнки эштәрҙе ҡарағандан һуң ғына документтарҙы ҡабул итә инеләр. Ул ваҡытта иң ҙур конкурс художество бүлегенә була торғайны, бер урынға ун-ун биш кеше дәғүә итә ине. Ҡалала үҫеп, махсус художество мәктәптәрендә тәрбиә алған абитуриенттар менән бер үк талап, бер үк конкурс аша үтергә тейеш инек. Барлыҡ имтихандарҙы ла биреп, һөҙөмтәләр билдәле булғас, ҡабул итеү тураһында бойороҡ элеп ҡуйҙылар. Килеп ҡараһам, минең фамилиям юҡ. Күңелгә ҡыйын булып китте, әлбиттә. Шул саҡ бер абитуриент ҡыҙ: "Өлфәт, уҡырға кереүең менән ҡотлайым!" - ти. "Мин бит исемлектә юҡ", - тим. Ә ул: "Әйҙә, кил әле бында", - тип икенсе бойороҡто күрһәтә. Ысынлап та, беҙҙе - ике егетте икенсе курсҡа ҡабул иткәндәр икән! Шулай итеп, декоратив сәнғәт бүлегендә дүрт йыллыҡ программаны өс йылда уҡып сығырға тура килде. Декоратив сәнғәт бүлегендә уҡыһам да, уҡытыусыбыҙ скульптор Ғүмәр ағай Мөхәмәтшин булғас, скульптура һөнәре менән уның йоғонтоһо аша таныштым. Ул саҡта Өфөлә скульптор һөнәренә әҙерләмәйҙәр ине. Союздаш республикаларҙа монументаль скульптура, милли архитектура, кино сәнғәте ныҡ үҫешкәйне. Автономиялы республикаларҙа был йүнәлеш "тыйылған" булып сыҡты. Сәнғәт училищеһын тамамлағас та бер иптәшем менән Балтик буйы республикаларына йәки Ленинградҡа монументаль скульптура буйынса уҡырға йүнәлтмә һорап, мәҙәниәт министрына керҙек. Ул: "Ана, сәнғәт институты асылды бит, живопись буйынса уҡығыҙ!" - тип сығарып ебәрҙе. Сит республика вуздарына документтарҙы йүнәлтмәһеҙ бөтөнләй ҡабул итмәйҙәр ине шул.

"Ниңә беҙҙә Салауат һәйкәленән башҡа милли скульптуралар юҡ, башҡорттар араһынан ниңә скульпторҙар юҡ", тигән уй күңелде өйкәүҙән туҡтаманы. Бына шуның өсөн генә лә хатта, һис шикһеҙ, скульптор булырға кәрәк, тигән сәм мине ошо йүнәлешкә әйҙәне. Исмаһам, бер генә милли монументаль скульптура эшләп ҡалдыра алһам, был донъяла юҡҡа йәшәмәгәнмен икән, тип әйтерлек булһын, тигән уй һәр саҡ рухи көс, ҡеүәт биреп торҙо. Мин үҙаллы, бик ҡатмарлы профессия - скульптура һөнәрен үҙләштереүемде дауам иттем, технологияларын өйрәндем. Өйрәтеүсе кеше булманы. Бәхеткә күрә, Өфө дәүләт сәнғәт институтында скульптура бүлеге астылар. Скульптура бүлегенә әҙерлекле абитуриенттар кәрәк ине. Мине художество факультетының деканы Э.Сәйетов һәм кафедра етәксеһе Р.Зәйнетдинов ағайҙар үҙҙәре саҡырып алды. Скульптура бүлеге үҙенсәлекле, йыл да түгел, ике-өс йылға бер тапҡыр, ике йәки ҡайһы саҡта өс студент ҡына ҡабул итәләр. Шулай ҙа скульптураға ҡарата булған бирелгәнлек, алға ҡуйылған маҡсат үҙенекен итте. Алты йыл буйына күренекле скульптор, педагог, профессор Н.Калинушкиндың оҫтаханаһында уҡыу мине тағы ла профессиональ бейеклеккә күтәрҙе, камиллаштырҙы. Шул йылдарҙа граниттан, мәрмәрҙән, металдан Ғ. Әлмөхәмәтовҡа, Д. Бураҡаевҡа, медиктарға һәм башҡа шәхестәргә бағышланған һәйкәлдәр ижад иттем. Ә "Зөһрә-Ҡыҙ" монументаль-декоратив скульптура композицияһы оригиналлеге менән дә, башҡа йәһәттән дә милләтенә ҡарамай бар кешегә лә оҡшаны.

**Р. Авсахов:** Мин алтынсы кластарҙа уҡ художество училищеһына инеп ҡарарға тип әҙерләнә башлағайным. Үкенескә күрә, художество училищеһына инергә тигән хыялым селпәрәмә килде: композициянан имтиханды бирә алманым. Өфө нефть институтына ингәс, миңә Мәскәү архитектура институтында белемемде һынап ҡарарға кәңәш иттеләр. Имтихандарҙы уңышлы тапшырып, мин ул ваҡытта уҡ әле элиталы иҫәпләнгән ошо институтта уҡый башланым, ләкин ни өсөндөр үҙ-үҙемә ышанысым юҡ ине. Әгәр булдыра алмаһам, Өфөгә кире ҡайтырмын, тип тынысландырҙым үҙемде. Уҡыуҙар башланыр алдынан Мәскәү өлкәһенең Руза районында бер ай буйы картуф уңышы йыйыу эшендә булыу иһә икеләнеүҙәремде юҡҡа сығарҙы: мин, ниһайәт, буласаҡ һабаҡташтарым менән яҡындан таныштым, русса телмәремде камиллаштырҙым. Аҡрынлап буласаҡ һөнәрем серҙәренә төшөнә башланым, ул миңә торған һайын ҡыҙыҡлыраҡ булып тойолдо. Һүрәт төшөрөү, живопись, проектлау нигеҙҙәрен яҡшы ғына үҙләштерҙем. Тора-бара дөйөм институт конкурстарында ҡатнаша, призлы урындар яулай башланым. Уҡытыусыларыбыҙ юғары мәҙәниле, үҙ һөнәрҙәре оҫталары, әҙәпле һәм киң белемле, ләкин бик ябай кешеләр ине. Уларҙың ярҙамы һәм абруйы арҡаһында беҙҙе өсөнсө курстан уҡ Мәскәү проект институттарына практикаға, ваҡытлыса эшкә ала башланылар, был беҙгә белемебеҙҙе ғәмәлдә һынап ҡарарға, унан кеҫә яғын да нығытырға ярҙам итте. Институтты уңышлы тамамланым: диплом эшем 1975 йылғы Бөтөн Союз диплом эштәре конкурсында алтын миҙалға лайыҡ булды. Өфөгә, "Башкиргражданпроект" институтына эшкә ҡайттым. Ауылда үҫеп нығынған характер шулай итеп уҡыуҙа ла, артабанғы тормош юлында ла бик ныҡ ярҙам итте...

**Тәүге проекттарығыҙ менән ҡала йөҙөнә ниндәй яңылыҡ, үҙенсәлек индерергә теләнегеҙ?**

**Р. Авсахов:** Миңә тапшырылған беренсе объект Свердлов, Гоголь, Аксаков урамдары һыҙатындағы 1200 урынлыҡ кинотеатр булды. Иң тәүҙә уға дөрөҫ исем биреү мөһим ине. Әмәлгә ҡалғандай, бер көн кис Рәшит ағай Шәкүрҙе осраттым. Беҙ уның менән эскәмйәлә оҙаҡ ҡына һөйләшеп ултырҙыҡ. Ул үҙенә хас етдилек һәм төплөлөк менән миңә архитектура өлгөләренең дә, уларҙың исемдәре лә йәшәгән тәйәгебеҙгә бәйле булырға, милли колоритты сағылдырырға тейешлеге тураһында һөйләне. "Урал" атамаһында туҡталып, шуны әйткем килә: Рәшит ағай менән ошо осрашыу минең артабанғы ижадыма йүнәлеш бирҙе. Проект эшләнеп бөтөп, заказсыға тапшырылды, ләкин, ҡыҙғаныс-

**✓ *Ата-бабалар гармонияның ни икәнен яҡшы белгән: төп материал итеп улар эзбизташ, мәрмәр, ҡомташты алыр ине. Колорит ярайһы күңелгә ятышлы: алтынһыу аҡ төҫтөң ҡара ҡыҙғылт, көрән төҫтәр менән туҡылышы.***



ҡа күрә, ул саҡтағы республика кинофикация комитетының туҙанлы архивында ҡағыҙҙарға күмелеп ятып ҡалды... Хыялымдағы үҙенсәлекле был объекттың эргә-тирә биләмәһе лә ял өсөн матур фонтандар ҡуйылып биҙәлергә, төҙөкләндерелергә тейеш ине. Кинотеатр менән бер рәттән, ҡалала тәүге тәжрибә булған алты 16 ҡатлы торлаҡ йорт биналары проектын эшләй башланым. Был күп ҡатлы йорттар башҡа шундай уҡ йорттарҙан бер ни менән дә айырылмаһа ла, проектымдағы йорттарҙы планы һәм фасадтары буйынса бер ни тиклем яңылыҡ өҫтәп, уларҙың формаһын "йомшартырға " булдым. Төп элементтар йортҡа төкәтелеп төҙөлгән ике-өс ҡатлы өлөштәренә ҡағыласаҡ ине. Уларҙың алғы өлөшө эс яҡтан күсмәнселәр тирмәһенме, әллә уларҙың баш кейеменме, хәрби шлем рәүешенме хәтерләтеп торорға тейеш ине. Әгәр ул заманда беҙҙең власть әһелдәре бер иш йорттар төҙөү яҡлы булмай, яңылыҡтан ҡурҡмай, әҙер проекттарҙы оҙаҡ йылдар буйы өҫтәл тартмаһында тотмай, тиҙерәк ғәмәлгә ашырырға тырышһа, бөгөнгө көндә Менделеев урамы бөтөнләй икенсе күренештә булыр ине һәм геҙ, уны ҡабул итеү шарттарына ла, йәғни урынлаштырыу ысулдары һәм йолаларына ла бәйле. Беҙҙең боронғо ата-бабаларыбыҙ торлағы, мәҫәлән, уларҙың баш хакимы торлағын уртаға ҡуйып - түңәрәк эсенә һаҡҡа алып урынлаштырылған булған, сөнки улар йәшәйешенең күп мәсьәләләре башлыҡтың именлегенән торған. Рус мәҙәниәте менән бергә торлаҡты бүрәнәнән бурап һалыу ысулы үҙләштерелгән, ниндәйҙер геометрик формалар, теҙем төрҙәре, урамдар, майҙандар барлыҡҡа килгән һәм уларҙы төрлөсә урынлаштырыу варианттары булған. Петр Беренсе батшанан һуң урамдар ҡәтғи сик тәртибен ала башлай. Ләкин беҙҙең ата-бабалар күпселек осраҡта урамдарының бер яҡ осон йылғаға, тау итәгенә йә ҡаяға табан йүнәлтеүҙе хуп күргән. Әгәр ауыл тау итәгендә ултыра икән, урамдар һәр йорттан йылға, күл йәки берәй тәбиғәт күренешен күҙәтә алырлыҡ бер яҡлы рәткә теҙелгән. Башҡорт этносына хас бындай ауыл төҙөлөшөн беҙҙән алдараҡ йәшәгән белгестәр күптән асыҡлаған булған. Башҡорттарҙың торлаҡ төҙөлөшө үҙенсәлектәрен анализлау планлаштырыуҙа һәм уның эстетик яғы һәләүҙа С. Тавасиевтың ныҡышмалығы ифрат ҙур.

Ләкин ошо башланғысты дауам иттереүселәр булманы. Мин утыҙ өс йыл Дим ҡасабаһында эшләнем. Эштән ҡайтҡан һайын көн дә Ағиҙел күпере аша үтергә тура килә. Йыш ҡына Өфөнөң панорамаһын, силуэтын күҙәтәм һәм киләсәктә баш ҡалабыҙҙың милли йөҙөн билдәләрҙәй ниндәй архитектура, монументтар кәрәклеген күҙ алдына килтереп, ҡағыҙға һыҙғылап ҡуя инем. Ҡалабыҙға кергән саҡта уң яҡтағы бейек нөктәгә Урал батырҙың һынын ҡуйғанда уның образына бик ныҡ тура килер, Өфөгә ҡабатланмаҫ бер сағыу милли һыҙат өҫтәлер ине. Бына был урында ҡурайға монумент, ә бында башҡорт халыҡ эпостары буйынса композициялар, милли колорит менән эшләнгән фонтандар ҡуйғанда баш ҡалабыҙҙың үҙ йөҙө булыр ине, тип төрлө проекттар эшләнем. Уларҙы архитекторҙарға ла, төрлө кимәлдәге етәкселәргә лә күрһәтеп ҡараным, тик яҡлаусы табылманы. Ул проекттарҙың күбеһе әле лә һаҡлана.

Шул уҡ ваҡытта тарихи Өфө биләмәһе урындарына күп фатирлы бейек йорттар бер-бер артлы төҙөлә башлаған. Ә ҡаланың архитектура идаралығы генплан эшләгәндә ҡаланың үҙенсәлекле ландшафтын иҫәпкә алмай, баш ҡаланың силуэты, панорама күренеше тураһында бөтөнләй уйламай, концепцияһын эшләмәй, Мәскәү архитекторҙарының проекттары буйынса күп фатирлы йорттарҙы теҙеү, төҙөү менән мәшғүл. Йорттар төҙөгән саҡта ла, совет осорондағы кеүек, милли биҙәктәр, орнаменттар ҡулланылмай. Архитектура факультетында уҡыған студенттарға башҡорт орнаменты, башҡорт халыҡ декоратив сәнғәте өйрәтелмәй. Хатта архитектор һөнәренә уҡып сығыусыларҙың күптәре "ҡусҡар" орнаментын да белмәй.

**Р. Авсахов:** Әгәр беҙҙең цивилизация ултыраҡ тормошто өҫтөн күреп, капиталь ҡоролмалар һәм комплекстар төҙөүгә иртәрәк тотонған булһа, һирәгерәк баш күтәреп, донъя һуғыштарында ла аҙыраҡ ҡатнашҡан булһа, төҙөлөш технологияларын үҙләштергән булыр ине. Урал төбәге бит теләһә ниндәй архитектура өлгөләре ижад итерлек бөтөн төр төҙөлөш материалдарына, конструкцияларға иҫ киткес бай. Был эшкәртеүгә еңел бирелә торған һарғылт аҡ төҫтәге эзбизташ,

# ХЫЯЛЫМДАҒЫ ӨФӨ

миңә лә бөгөн был урамдан оялышымдан ҡараштарымды аҫҡа төбәп үтергә тура килмәҫ ине...

**Ө. Ҡобағошов:** Тәүге эштәремдә үк мин халҡыбыҙҙың үҙенсәлекле милли колоритын күрһәтергә тырыштым. Ул хыял тормошҡа аша барып, ғүмерем буйы ижадымда оҙатып бара. Был композицияларҙы мин үҙемдең төп эшемдән тыш, эштән һуң ҡалып, ял көндәрендә һәм күбеһен бушлай башҡара инем. Ул саҡта уҡ монументаль скульптураға, милли архитектураға иғтибар бөтөнләй булманы. "Зөһрә-Ҡыҙ" декоратив скульптураһын баш ҡалабыҙға кергән ергә, күренгән урынға ҡуйыу кәрәклеген күренекле режиссер Әмир ағай Абдразаҡов, журналистар, йәмәғәтселек матбуғат биттәрендә күтәреп сыҡты. Бынан егерме йылдан ашыу йылдар элек, баш ҡалабыҙҙың юбилейын байрам итер алдынан, мине Өфө ҡала Советына саҡырып алдылар һәм "Зөһрә-Ҡыҙ" композицияһын ҡалабыҙҙың бер күркәм урынына урынлаштырыу тураһында һүҙ күтәрҙеләр. Архитекторҙар менән өс-дүрт ерҙе ҡарап, урын да һайлап сыҡтыҡ. Шунан һуң ҡала Советының гуманитар бүлеге мөдире миңә: "Бағыусы таба алаһыңмы? Тапһаң, ҡуябыҙ", - тип мине аптыратты. Мин: "Бағыусы таба алһам, һеҙһеҙ ҙә ҡуя алыр инек", - тип сығып киттем. Бына ошондай етәкселәр менән ниндәй милли скульптура, архитектура булдырып була! Монументаль йүнәлештәге бөтөн эш етәкселәр тарафынан ойошторолоп тормошҡа ашырыла бит. Ә был жанр күп сығымдар талап итә. Уны ойоштороусылар монументаль сәнғәтте аңлаған, алдан күрә белеү һәләтенә лә эйә булырға тейешләр шул.

**▸ Рудоль Рәйес улы, киң мәғәнәлә аңлатҡанда милли архитектураның үҙенсәлеге ниҙә ул?**

**Р. Авсахов:** Күптәр милли орнаменттарҙы белеп ҡулланыу - ул милли архитектура тип уйлай. Был иң ябай вариант, мәсьәләгә тышҡы яҡтан ҡарау. Әгәр төпкәрәк күҙ һалһаң, шуны аңларға була: архитектура, әгәр теләһәтенән байтаҡ ҡына ҡыҙыҡлы элементтарҙы асыҡларға булышлыҡ иткән. Бынан сығып, уларҙы бөгөнгө ҡала төҙөлөшөндә лә уңышлы файҙаланып булыр ине, тип әйтмәксемен, сөнки ул беҙҙең этносҡа хас традицияларҙы ғына сағылдырып ҡалмай, уның ҡасандыр рустарҙан үҙләштерелгән элементтары ла байтаҡ. Заманса торлаҡтың эске яғын ойоштороуға килгәндә, уны традицион планда хәл итеү, шул уҡ стилдәге йыһаз һәм көнкүреш әйберҙәре ҡулланыу урынлы булыр ине.



***Кешелектең фәҡәт ҡулланыусы ролендә йәшәү осоро тиҙерәк үтеп китһен һәм ҡала халҡы, ниһайәт, бындай йәшәү рәүешен кире ҡаҡһын ине, тип хыялланам. Яҡшы, уңайлы һәм тауышһыҙ йәмәғәт транспорты барлыҡҡа килһен ине, тип теләйем. Ҡиммәтле һәм ҡеүәтле сит ил лимузиндарында йөрөү, уны йәйәүлеләр юлына арҡыры ҡуйып китеү йә газондарҙы тапатып, баштары һуҡҡан ерҙе туҡталҡа итеү модаһы тиҙерәк үтеп китеүен теләйем. Ҡала урамдарында бер заман велосипедтарҙа һәм йәйәү йөрөүҙең өҫтөнлөк алыуын көтәм. Ҡала халҡының ҡасан, ҡайҙа етте, шунда сүп-сар ташлап китеүен, йәшәгән ерен уйһыҙ-моңһоҙ рәүештә аяуһыҙ ҡыйлауын, бысратыуын аңлай һәм ҡабул итә алмайым, уның бер заман сиге булырмы тип көтәм.***

**▸ Башҡортостандың баш ҡалаһына ниндәй милли төҫ, колорит етешмәй?**

**Ө. Ҡобағошов:** Баш ҡалабыҙ Өфө - Уфа - Ува -Уба һүҙенән килеп сыҡҡанлығын күренекле ғалим, топонимист Рәшит Шәкүр ғилми яҡтан нигеҙләп күптән асып бирҙе. Ысынлап та баш ҡалабыҙ бик күп убалыҡтарҙа урынлашҡан һәм уникаль ландшафтты хасил итә. Уның панорамаһы бигерәк тә көньяҡтан, аэропорт яғынан килгәндә бик отошло асыла. Тағы ла Салауат һәйкәленә әйләнеп ҡайтайыҡ. Автор, һәйкәлдең Ағиҙелдең яр буйындағы ҡалҡыу урында, ҡаяла урынлаштырырға кәрәклеген һәр яҡлап нигеҙләп, уға ҡаршы сығыусы төрлө кимәлдәге етәкселәргә иҫбатлап, үҙенең хаҡ булыуын яҡлай алған. Өфө ҡалаһының милли йөҙөн, панорамаһын булдырыны. Ул бигерәк тә күперҙән ингәс уң яҡ тарафта, панораманы, офоҡто боҙоп ҡалҡып сыҡты. Иң ҡалҡыу, ҡаланың архитектура доминантаһы булған ландшафтар ошондай шөҡәтһеҙ бер иш йорттар менән тулды. Был тирәләге төҙөлөштө алып барыусылар барыһы ла Мәскәү кешеләре. Шулай ҙа бер-ике йыл элек уң яҡтағы иң ҡалҡыу урындарҙы ҡарап йөрөгәндә төрлө ойошмаларҙың складтары, башҡа иҫке биналар урындары әлегә төҙөлөш майҙанына әйләнмәгән ине. Һорашып белешкәс, был биләмәләрҙе лә Мәскәү хужалары һатып алып бөткән булып сыҡты. Бына нисек, беҙ милли архитектура, скульптура тип хәбәр һөйләйбеҙ, ә үҙ еребеҙҙә, архитектура йәһәтенән иң отошло урындарға проекттарыбыҙҙы ла урынлаштыра алмайбыҙ. Бөтә нәмәне аҡса хәл итә, шуға ҡоролтөрлө төҫтәге һәм төрҙәге мәрмәр таш, төрлө төҫтәге, ҡатылыҡтағы һәм фактуралағы гранит, ул йәшмә үҙе генә ни тора, диориттар, доломиттар... Йәйғор төҫөндәге сағылыштар палитраһы... Ә беҙҙең ата-бабалар гармонияның ни икәнен яҡшы белгән: ҡиммәт тә булмаған төп материал итеп улар эзбизташ, мәрмәр, ҡомташты алыр ине, моғайын. Колорит ярайһы күңелгә ятышлы: алтынһыу аҡ төҫтөң ҡара ҡыҙғылт, көрән төҫтәр менән туҡылышы. Ырымбурҙағы Каруанһарай бинаһы тап ана шундай төҫтәргә бай. Ошо уҡ төҫтәр гаммаһы Бохара, Сәмәрҡәнд, Әзербайжан, Дағстан архитектура өлгөләренә лә хас. Ошо уҡ төбәктәрҙәге заман архитектураһына иғтибар итеү ҙә етә. Ҡаҙағстан тәжрибәһен генә алып ҡарайыҡ. Улар бөтөн донъянан билдәле архитекторҙар саҡыртып, бөгөнгө ҡаҙаҡ архитектураһы өлгөләрен тергеҙә. Уларҙың үҙенсәлеге нимәлә һуң? Иркен яҫылыҡтарҙа урынлаштырылыу, асыҡ һәм киң пространстволар, колоритлы биналар, үҙенсәлекле рәсем сәнғәтен ҡабатлаусы силуэттар һәм формалар...

Ләкин беҙгә уларҙың хатаһын ҡабатларға ярамай. Тигеҙлектәр өсөн күккә ашыусы бейек биналар тәбиғи ҡабул ителһә лә был тәжрибәләр Өфө ҡалаһына төҫ түгел, сөнки бында улар рельефты юҡҡа сығарасаҡ. Америка архитекторҙары тәҡдим иткәнсә, күккә олғашҡан күләмдәр Өфө ҡалҡыулығының киңлеген тарайтасаҡ, ә был урындағы үҙенсәлеклектең төп тәбиғи элементы булып тора. Көньяҡ Кореяның бөгөнгө архитектураһы нисек итеп тәбиғәт менән ярашып эшләү өлгөһө булһа, был йәһәттән финдарҙың ижад стиле шулай уҡ тәбиғәт әсәбеҙгә һөйөү тойғоһо һәм һаҡсыллығы менән беҙҙең ата-бабаларыбыҙҙың тормош аҡылына һәм философик ҡараштарына ауаздаш. Ә бына шуны хәтеребеҙгә төшөрөү өсөн Лев Толстойҙың башҡорттар хаҡында яҙмаларын ҡабаттан уҡып сығыу бер ҙә артыҡ булмаҫ.

**(Аҙағы 11-се биттә).**

**✓ Башҡорт Совет Социалистик Республикаһының дәүләт суверенитеты тураһында декларацияны ҡабул итеүгә бер депутат "ҡаршы", дүрт кеше "битараф" булған, ҡалғандар "риза". Шулай итеп, декларация ҡабул ителде.**



Әммә ҙур шатлыҡҡа иртәрәк ине әле. Шуға Рәхимов:

- Фекер алышыуҙарҙы артабан дауам итәбеҙ, - тине һәм һүҙҙе депутат Корольковҡа бирҙе. Корольков Белорет ҡалаһынан ине. Белорет борон-борондан башҡорттар мәнфәғәтенә ҡаршы сыҡҡан завод эшселәре, дөрөҫөрәге, ситтән килтерелгән элекке крепостной крәҫтиәндәр ҡалаһы булды. Бая әйткән халыҡтар үҙенсәлеге бында ныҡ күренә торғайны. Граждандар һуғышы осоронда Белоретта бик күп башҡорттоң башына еттеләр, башҡорт ғәскәре менән ҡыҙылдар араһындағы аяуһыҙ һуғыштар ошо тирәлә булды. Был турала залдағы депутаттарҙың һәммәһе лә тиерлек белә ине. Шуға Корольковҡа һүҙ биргәс, зал һағайып, шымып ҡалды.

- Мин, - тине ул. - Белорет ҡала Советының өсөнсө сессияһы ҡарарына ярашлы, суверенитет мәсьәләһен тикшереү тик бөтә халыҡ референдумынан һәм БАССР Конституцияһына кәрәкле үҙгәрештәр индергәс кенә булырға тейеш, тип һанайым. Уғаса быны башҡарыу урынһыҙ, тип иҫәпләйем.

Депутаттарҙың һағайыуы урынлы булды.

Артабанғы һүҙҙе Рәхимов депутат Иҙиәтуллинға бирҙе. Ул проекттың етешһеҙ тип тапҡан ҡайһы бер урындарын атап күрһәтте. Әйтәйек, "башҡорт милләтенең айырылғыһыҙ хоҡуғын тормошҡа ашыра барып" тигән һүҙҙәр урынына "бөтә милләттәрҙең дә үҙ билдәләнешкә хоҡуғы"н тип яҙырға, ә республиканың исемен "Совет халыҡ Башҡортостан Республикаһы" итеп үҙгәртергә тәҡдим яһаны.

Артабан депутаттар Абайҙуллин, Жукова, Ҡадиров, Ғафуров, РСФСР халыҡ депутаттары Түрйәнов, Иҙелбаева, СССР депутаты Кашников проекттың тексын үҙгәртеү тәҡдимдәрен әйтте.

Проекттың тексын үҙгәртеү буйынса тәҡдимдәр күбәйгәс, Демин:

- Әйтелгәндәрҙе иҫәпкә алыу һәм уртаҡ фекергә килеү өсөн комиссия кәрәк булыр, - тине Рәхимовҡа шыбырлап.

- Улайһа, һин шул комиссияны төҙө.

- Ярар. - Демин икенсе бүлмәгә сығып әйләнде. - Бына.

- Хөрмәтле депутаттар, беҙгә редакцион комиссия һайларға тура килер, сөнки текст буйынса тәҡдимдәр күп. Уларҙы ҡабул итеү йә итмәү күмәкләп хәл ителергә тейеш. Бына тәҡдим: комиссияға 27 кеше индерелә.

- Ярар.

- Булһын. - Тауыштар яңғыраны.

- Ошо тәҡдимде тауышҡа ҡуям. Бөтәһе лә риза. Артабанғы сығыш өсөн һүҙҙе депутат Катаевҡа бирәм.

Унан һуң Ғатауллин, Лукьянчикова, Шаһиев, Никитин, Скутин, Сәфәрғәлин, Юрин, Ғүмәровтар сығыш яһаны.

- Хөрмәтле депутаттар! - Рәхимов залға мөрәжәғәт итте. - Юғары Совет Президиумының ҡарары нигеҙендә беҙ сессияға йәмәғәт ойошмаларынан вәкилдәр саҡырҙыҡ. Һеҙ ҡаршы килмәһәгеҙ, хәҙер уларҙың бер нисәһенә һүҙ бирәйек. Беренсе итеп экология буйынса ойошма рәйесе, яҙыусы Павловты трибунаға саҡырабыҙ.

Унан һуң КПСС өлкә комитетының беренсе секретары Горбунов, Яҙыусылар берлегенең идара рәйесе Бүләков, "Урал" башҡорт халыҡ үҙәге рәйесе Шәкүров сығыш яһаны. Уның телмәрен депутаттар бик диҡҡәт менән тыңланы. Игтибарға лайыҡ фекерҙәр бар ине унда.




- Бөгөн депутаттар республикалағы тел мәсьәләһен бер яҡлы ғына ҡарауға төшөп китте. Өсөнсө дәүләт теле тураһында күп һөйләнелә. Шул уҡ ваҡытта республикала башҡорт теле үлеп бара, уны ҡотҡарырға кәрәк. Мин һеҙҙең намыҫығыҙға мөрәжәғәт итәм һәм киләсәк сессияларҙа тап ошо мәсьәлә иғтибар үҙәгендә булыр, тип ышанам, сөнки республикала башҡорттар ассимиляцияға дусар ителгән. Мин быны бик күп дәлил менән раҫлай алам. Бындай шарттарҙа башҡорт халҡының бойондороҡһоҙлоҡ һәм үҙбилдәләнешкә хоҡуҡтарына, шул иҫәптән ошо хоҡуҡтың бер өлөшө булған телгә дәүләт статусы алыу хоҡуғына бик иғтибарлы мөнәсәбәт күрһәтергә кәрәк, тип һанайым.

Шәкүровтың һүҙҙәрен депутаттар ҙа, Рәхимов та тауыш-тынһыҙ ғына ҡабул итте. Әммә улар Рәхимовтың үҙәгенә үтте, залдағыларҙың күбеһе лә шундай кисерештә булғандар, тип уйланы рәйес.

Сессия дауам итте. Демин Рәхимовҡа:

- Редакцион комиссия эшен тамамланы, - тине.

- Ярар, һүҙҙе хәҙер һеҙгә бирәм.

- Хөрмәтле депутаттар, - тип башланы Демин. - Беҙҙең комиссия һәр тәҡдимде ентекле өйрәнеп, декларация проектын яңынан эшләп сыҡты, яңы вариант һеҙгә бирелде. Комиссия исеменән уны нигеҙ итеп алырға тәҡдим итәм.

- Тәҡдимде тауышҡа ҡуям. Кемдәр риза? Кемдәр ҡаршы? Бындайҙар юҡ. Кемдәр битараф? Ике кеше. Тимәк, ҡарар ҡабул ителде.

Шулай булыуға ҡарамаҫтан, һүҙ һорап әллә нисәмә ҡул күтәрелде. Депутат Андреев проекттың һәр пунктын яңынан ҡарап сығырға тәҡдим итте. Бигерәк тә беренсеһе күп һорау тыуҙыра ине. Унда "Ер, ер аҫты, тәбиғәт байлыҡтары һәм Башҡорт Совет Социалистик Республикаһындағы мөлкәт, шул иҫәптән иҡтисад һәм фәнни-техник мөмкинлектәр, - бөтәһе лә тик күп милләтле республика халҡының мөлкәте булып тора" тиелгәйне. Ул һорауҙарға депутат Әхмәтов:

- Республикалағы бөтә байлыҡ та тик уныҡы ғына. СССР-ға, Рәсәй Федерацияһына уның ниндәйҙер бер өлөшө тик килешеү нигеҙендә генә бирелергә мөмкин, - тип аныҡ аңлатма бирҙе.

Шунан Рәхимов ошоно ҡабул итеүҙе тауышҡа ҡуйҙы. 13 кеше "ҡаршы", ҡалғандар "риза". Енел һуланы рәйес. Декларацияның төп пункты ҡабул ителде.

Сәғәт бишенсе ине инде. Рәйес:

- Беҙҙең сессияла сығыш яһарға 80 кеше теләк белдерҙе. Яртыһы тиерлек һүҙен әйтте. Декларация проектының беренсе пунктын ҡабул итә алдыҡ. Көн тәртибендәге мәсьәләне ҡарап бөтөүгә яҡынлашмағанбыҙ ҙа әле. Шуға күрә сессияның эшен иртәгә дауам итергә кәрәк тип һанайым. Кемдәр риза, ҡулдарығыҙҙы күтәрегеҙ.

Тәҡдим хупланды. Залдағылар ҙа, тыштағылар ҙа еңел һулап, иртәгә тиклем таралышты.

11 октябрҙә тышта ла, йорттоң эсендә лә күренеш шул көйө ине, тиһәң дә хата булмаҫ. Кисәге кеүек ҡар яуып тормай, Юғары Совет ултырған йорт алдында кеше ҡәмей төшкән, ләкин күп кенә әле. Кисәге лозунгтар һаҡланған тиһәң дә була, татар теле тураһындағылары күренмәй. Әйткәндәй, Совет майҙанында Айҙар Хәлим палаткаһы менән ҡуша юҡ булған. Асфальтта йыртыҡ пакет менән уның сүп-сарын ғына ел туҙҙырып йөрөтә.

Депутаттар төркөм-төркөм дә, берәмләп тә килде. Кисәге һымаҡ уларҙан һорау алыусы булманы, тик "Суверенитет!" тип ҡысҡырып ҡаршыланы һәм оҙатып ҡалды манифестанттар.

Тап сәғәт унда көсәйткес Рәхимов тауышы менән телгә килде:

- Хөрмәтле депутаттар, саҡырылған ҡунаҡтар! Башҡортостан Юғары Советының өсөнсө сессияһын дауам итәбеҙ. Эшебеҙҙе кисә туҡтаған урындан яңыртабыҙ. Декларация проектын тикшереү өсөн...

Әммә беренсе рәт тирәһенән берәү һүҙҙе бүлде.

- Мортаза Ғөбәйҙуллович, ғәфү үтенәм. Дөйөм эш башланмаҫ борон бер генә һүҙ әйтәйем әле. Мин Кулеша, РСФСР депутаты, Белореттан.

Рәхимов ризаһыҙ ғына:

- Әйтегеҙ һуң, - тине. Кулеша трибунаға сыҡты:

- Кисә депутат Корольков, Белорет ҡалаһы халҡы һәм ҡала Советы суверенитет тураһында декларация ҡабул итеүгә ҡаршы, тине. Мин, РСФСР депутаты һәм Белорет кешеһе булараҡ, шуны белдерәм: Корольков һеҙгә ялған мәғлүмәт бирҙе. Белорет халҡы ла, ҡала Советы ла күпселектә суверенитетты яҡлай. Иғтибарығыҙ өсөн рәхмәт.

- Рәхмәт, - тине Рәхимов. Тамаҡта торған төйөн иреп китте. - Декларация проектын тикшереү буйынса һүҙ депутат Горбуновҡа бирелә.

Горбунов депутат булыу менән бергә КПСС өлкә комитетының беренсе секретары ла ине. Декларация буйынса бөтә мәсьәләне лә бер юлы хәл итергә тырышмаҫҡа кәрәк, тине ул. Тәүҙә суверенитет тураһында ентекле һөйләшергә ине, шунан - телдәр хаҡында. Ни өсөн тигәндә, киләсәктә республиканың Конституцияһын, телдәр тураһында махсус закон ҡабул итеү тора.

Шунан депутат Бугера трибунаға сыҡты. Декларацияны бер бөтә рәүештә тикшермәйенсә, статьялар буйынса барырға, редакцион комиссияның һәм айырым депутаттарҙың иҫкәрмәләрен бер юлы тикшереү яҡшы булыр, тине ул. Рәхимов:

- Миненсә, Бугера һәйбәт тәҡдим индерә. Кем уны хуплай, ҡулдарығыҙҙы күтәрегеҙ. Күпселек. Артабан Демин иптәш статьяны уҡыр, комиссияға килгән төҙәтмәләр менән таныштырыр, шунан тикшереүгә күсербеҙ, - тине.

Әммә шыма барырға тейеш тип уйланған эш беренсе һөйләмдә тиерлек үк һөрләкте. "Башҡорт милләтенең, республиканың бөтә халыҡтарының да үҙбилдәләнешкә айырылғыһыҙ хоҡуғы" тигән һүҙбәйләнеш күптәрҙә ризаһыҙлыҡ тыуҙырҙы. Елдең ҡайҙан иҫкәнлеген һиҙеп тора Рәхимов, ул ғына түгел, башҡорт милләтле башҡа депутаттар ҙа тойомлай: тегеләр башҡорт милләте тигәнде үҙһенмәй. Әммә күпселек шулай уйламаған булып сыҡты.

Депутаттар Катаев, Вахитов, Андреев, Бугера, Абайҙуллин, Күзбәков, Рәжбаев, Машкин, Аверьянов һөйләмде шул көйө ҡалдырырға саҡырҙы. Депутаттар Ғәфүров, Ситдиҡова, Министрҙар Советы рәйесе урынбаҫары Әйүпов әлеге һүҙбәйләнеште "Башҡорт милләтенең үҙбилдәләнешкә айырылғыһыҙ хоҡуғын тормошҡа ашырып һәм Башҡорт АССР-ының эсендә бөтә милләттәрҙең дә тиң хоҡуҡлығын гарантиялап" менән алмаштырырға тәҡдим итте. Депутаттар Кашников, Мәмләев, Лукьяничева, Белоглазов, Бигнов уларға ҡаршы сыҡты.

Эштең ныҡ ҡуйыра барғанын күргән Рәхимов хәлде ҡатмарландырмаҫҡа тырышты.

- Депутаттар! Бәхәсте тағы ла нығыраҡ ҡыҙҙырмаҫ өсөн был мәсьәләне тауышҡа ҡуйыу менән хәл итергә тәҡдим итәм. Кем дә кем, Әйүпов тәҡдим иткәндә алайыҡ, ти, шулар ыңғай тауыш бирһен. 138 кеше ыңғай, 86 ҡаршы. Тимәк, Әйүпов варианты үтә.

Рәхимовтың янындағы Демин шыбырланы:

- Был - декларацияның төп нигеҙенең береһе, шуға уны күпселек тауыш менән генә үткәреп булмай.

Рәхимов микрофонға:

- Бында әлегесә генә тауыш биреү дөрөҫ түгел, тиҙәр. Конституцион күпселек, йәғни сессияла ҡатнашыусыларҙың кәмендә өстән ике өлөшө ыңғай тауыш бирергә тейеш икән. Шуға әлеге һөҙөмтәне яраҡһыҙ тип иҫәпләйбеҙ һәм Әйүпов вариантын тикшереүҙе дауам итәбеҙ.

Байтаҡ ваҡыт депутаттар һуңғы һүҙбәйләнеште төрләсә үҙгәртергә, йә шул көйө һаҡларға булып бәхәс ҡорҙо. Алтын ҡомдо бутағанда табылһа, дөрөҫлөк бәхәстә тыуа, тип юҡҡа ғына әйтмәйҙәр икән. Фекерле кешеләр уйлағанын әйтеп, тик ултырғансы үҙемде күрһәтәйем тиеүселәрҙең тамағы ҡарлыҡҡас, зал шыма башланы. Рәхимов шунан файҙаланып:

- Баяғы тәҡдимде тауышҡа ҡуям, - тине. - Белеп тороғоҙ, беҙгә конституцион күпселек кәрәк, шуны йыйғансы бәхәсләшәбеҙ һәм тауыш бирәбеҙ.

Әллә рәйестең ошо һүҙе тәьҫир итте, әллә инде, ысынлап та, уртаҡ уйға килделәр: кәрәкле тауыш сыҡты, хатта өстән ике өлөштән күберәк тә ине.

Башҡорттар тормошона һиҙелерлек йоғонто яһауы ихтимал тағы бер мәсьәлә күтәрелде. Халыҡтың иҫәбен алыу мәғлүмәттәренә ярашлы, Башҡортостанда 1989 йылда 863808 башҡорт йәшәгән, ә унан ситтә - 560000 кеше.

- Уларҙың ошолай бүлгәләнеүе кешеләрҙең күсенеүе сәбәпле түгел, ә тарихи факт булараҡ шулай килеп сыҡҡан, - тип аңлатма бирҙе Зөфәр Йәнекәйев. - 1919 йылда Башҡортостан республика булып барлыҡҡа килгән саҡта Ленин

менән Сталин ҡул ҡуйған килешеүҙә киләсәктә Оло Башҡортостан төҙөләсәге тураһында әйтелә. Ул төҙөлә, әммә эсенә башҡорттар йәшәгән бик күп ер индерелмәй ҡала, ә ҡайһы берҙәре аҙаҡтан ҡырҡып, өлкәләргә бирелә. Әйтәйек, Силәбе, Ырымбур, Пермгә, Татарстанға. Шуға байтаҡ башҡорт бөгөн дә үҙ республикаһынан айырылған көйөнсә ҡала. Хәҙер беҙ тарихи гәҙелһеҙлекте төҙәтә алмаҫбыҙ. Әммә туғандарыбыҙға уларҙың милли, мәҙәни, мәғарифҡа талаптарын ҡәнәғәтләндерергә ярҙам итергә тейешбеҙ. Ошоно декларацияла сағылдырырға кәрәк.

Был тәҡдим залда дауыл ҡуптарҙы. Ҡаршыларҙың төп һылтанмаһы финансҡа барып төртөлдө. Ситтә йәшәгән башҡорттарҙың үҙ хакимиәттәре бар, уларҙың мәнфәғәтен улар ҡайғыртһын. Беҙ күршеләр өсөн үҙ кесәбеҙҙән сығарып аҡса бирә алмайбыҙ. Рәхимов залға ҡарап, бына ул милләттәрҙең бәрелеше, тип уйлап ултырҙы. Аҡса тураһында ҡысҡырыша башлағас, бигерәк тә йәне көйҙө рәйестең. Ул баҫты ла:

- Мин һеҙгә үҙем шаһит булған бер хәлде һөйләйем. Тыуған ауылыма терәлеп кенә Алмалы тигән урыҫ ауылы ята. Беҙҙең бер башҡорт шунан мәрйә кәләш алды. Яҡшы йәшәнеләр, балалары тыуҙы, үҫтеләр. Ғаяз исемле береһе уҡырға төштө. Мәктәп башҡортса. Теге бала башҡортса уҡый, бик матур итеп һөйләшә. Бер көн тәнәфескә сыҡһаҡ, Алмалынан бер малай килгән. Ғаязды һорай. Сыҡты Ғаяз.

- Бына һинә китаптар килтерҙем. Букварь, арифметика, уҡыу китабы, - ти. - Ошоларҙы уҡып, урыҫ телен өйрән. Һиндә урыҫ ҡаны бар бит. Онотма. Беҙ һинә ярҙам итербеҙ.

Бына ошондай хәл булғайны. Алмалы кешеләре Ғаязға китапты Тәүәкән алып бирергә тейеш тип тә торманы, туғанлыҡтарын ябай ғына итеп аңлатты ла ҡуйҙы. Туғанлыҡ ана шулай була ул. Ә бында 560 мең кеше тураһында һүҙ бара. Уларға беҙ ҙә ярҙам итмәһәк, башҡа кемдәре бар? Шуға бында ҡысҡырыш та, бәхәс тә урынһыҙ, минеңсә. Йәнекәйевтең тәҡдимен декларацияға индерергә кәрәк.

- Тағы ла һүҙ әйтергә теләүселәр бармы?

Зал шып-шым булды.

- Һөйләргә теләүсе булмаһа, "Башҡорт Совет Социалистик Республикаһы үҙенә республиканан ситтә йәшәгән башҡорттарҙың милли-мәҙәни мәнфәғәттәрен ҡәнәғәтләндерергә ярҙамлашыу йөкләмәһен ала" тигән һөйләмде декларацияға индерергә теләүселәр ҡулдарын күтәрһен.

19 депутат "ҡаршы", 18-е "битараф", ҡалғандар "риза". Шулай итеп, был һөйләм декларацияға индерелә.

Сессияның киске ултырышы башланды. Тышта халыҡ бик күп йыйылып киткән. Оҙаҡламай депутаттарҙың эшендә иң ҡыҙыу мәл булырын һиҙеп, шым ғына көтә ине улар.

Шуны раҫлағандай, радионан Рәхимовтың тауышы ишетелде.

- Хөрмәтле депутаттар! Ике көнгә һуҙылған эшебеҙҙең аҙағына яҡынлашабыҙ. Хәҙер декларация өсөн тауыш бирәбеҙ. Тауыш биреү исемләп буласаҡ. Декларацияны тулыһынса ҡабул итеү өсөн конституцион күпселек талап ителә. Рәхим итегеҙ, хисап комиссияһы үҙ эшен башлай.

Тауыш биреү исемләп булғас, байтаҡ ваҡытты алды. Хисап комиссияһы бюллетендәрҙе һанағанса, протоколдарҙы тултырғансы күп ваҡыт уҙҙы. Бына комиссия рәйесе тейешенсә тултырылған протоколдарҙы Рәхимовҡа һуҙҙы. Ул ҡағыҙҙың аҙағына ғына күҙ һалып алды.

- Депутаттар, ҡунаҡтар! Шау-шыуҙы бөтөрөүҙе һорайым. - Рәхимовтың тауышында шатлыҡ һиҙелә ине инде. Шуны ишеткән кешеләр яҡынса һөҙөмтәне белде. Әммә депутаттар яҡынса менән генә ризалашмайынса, урындарына ултырҙы. Һәр кем һуңғы һандарҙы белергә теләй ине.

- Хөрмәтле депутаттар! Хисап комиссияһы түбәндәге һөҙөмтәне асыҡланы. Башҡорт Совет Социалистик Республикаһының дәүләт суверенитеты тураһында декларацияны ҡабул итеүгә бер депутат "ҡаршы", дүрт кеше "битараф" булған, ҡалғандар "риза". Шулай итеп, декларация ҡабул ителде. Мин һеҙҙе шуның менән ҡотлайым!

Залда ла, тышта ла көслө ҡул сабыуҙар, "ура!", "суверенитет!" тип ҡысҡырыуҙар яңғырап торҙо. Һәр кемдең дә күңеле тантаналы музыка көҫәй ине, әммә был ваҡытта Башҡортостандың үҙ гимны юҡ ине әле. Алҡыштар менән генә ҡәнәғәтләнергә тура килде.

Демин Рәхимовтың ҡулын ҡыҫты:

- Ҡотлайым!
- Мин дә ҡотлайым!
- Мортаза Ғөбәйҙуллович, әйҙә, оло эште тамамлау айҡанлы бер сынаяҡ сәй эсеп алайыҡ.
- Сәй генәме?
- Бүтәне лә табылыр.
- Икәүләпме?
- Юҡ. Президиум өсөн бәләкәс кенә табын ҡорҙорғайным.
- Хуп.

Беренсе тосты Рәхимов әйтте:

- Беҙ ҡабул иткән декларация өсөн! Хәҙер беҙ СССР-ҙа ла, Рәсәй Федерацияһында ла бер кемдән дә кәм түгел!

Унан рәйес урынбаҫары Мусин һүҙ алды:

- Мин был тосты Юғары Совет рәйесе Мортаза Ғөбәйҙуллович Рәхимов өсөн тәҡдим итәм. Беҙҙең етәксе күҙгә күренеп үҙгәрә. Рәйеслек эшен башлағанда технарь икәнлеге әллә ҡайҙан күренеп тора ине. Бөгөн һис кенә лә улай тип әйтә алмаҫһың. Ай үҫәһен көн үҫә беҙҙең рәйес. Кисә-бөгөн әллә ниндәй ҡырҡыу хәлдәрҙән дә бына тигән килеп сыҡты. Һаулыҡ һәм уңыштар насип итһен!

**(Аҙағы. Башы 39-40-сы һандарҙа).**

*ДИАЛОГ*

# МИНЕҢ ХЫЯЛЫМДАҒЫ ӨФӨ

**(Башы 8-9-сы биттәрҙә).**

**Өлфәт Миңләхмәт улы, ә милли монументаль скульптураны нисегерәк күҙаллап була?**

**Ө. Ҡобағошов:** Милли скульптурала халҡыбыҙҙың бар булмышы: рухы, уй-хыялдары, кисерештәре, боронғоһо, бөгөнгөһө, киләсәге сағылыш табырға тейеш. Ситтән ҡарағанда уҡ, силуэты, һыны менән кешене арбап, биләп алырға, эргәһенә килеп ҡарағанда һоҡланыу, ғорурланыу һәм башҡа ыңғай тойғолар уятырға тейеш. Ҡайҙа ғына, хатта сит ҡитғаларҙа йөрөһәң дә, күҙ алдына килтереүең менән үк уның образы Башҡортостанды, башҡорт халҡын хәтерләтергә, уның бер киҫәге булып һинең менән бергә йәшәргә тейеш! Сосланбәк Тавасиевтың Салауаты ана шундай! Әлбиттә, бындай әҫәрҙәр һирәк тыуа, ләкин беҙгә эйәрергә маяҡ, өлгө бар. Ул торған урыны - архитектураһы, композицияһы, трактовкалау ысулдары, башҡа төр алымдары менән юғары сәнғәт өлгөһө.

Ә урам мөйөшөндә, юл буйында саң йотоп торған, архитектура йәһәтенән бөтөнләй осраҡлы ҡуйылған скульптуралар, нисек кенә оҫта эшләнмәһен, ул кешелә әле әйтеп үткән хис-тойғоларҙы уята алмай, ҡаланың йөҙөн дә биҙәмәй. Бармы - бар, тип әйтеү өсөн генә эшләнгән кеүек ҡабул ителә. Ә профессиональ кимәлдә эшләнмәгән, һәүәҫкәр ярым-йорто скульптураларҙы әйтеп тә тормайым.

Шуныһы тағы борсой, монументаль скульптура жанрына бөтөнләй хас булмаған, графика, живопись алымдары ҡулланып, күп фигураларҙы бергә ҡуйып эшләгән композициялар күҙгә салына башланы. Улар скульптура жанрында композицияның бөтөнлөгөн тәьмин итмәй. Күп нәмә эшләп, бәлки, күп нәмә әйтергә теләү, киреһенсә, аҙ мәғәнә биреп, композицион яҡтан көнкүреш сәхнәһенә әйләнә. Хатта ҡайһы бер осраҡта "шарж" кеүек ҡабул ителә. Шуға күрә, монументаль сәнғәттең һүҙ менән әйтелмәгән талабының иң мөһимдәренең береһе - ул аҙ сығымдар аша тәрән мәғәнәгә өлгәшеү булып тора.

**Ғөмүмән, һеҙҙең хыялығыҙҙағы Өфө ниндәй ул?**

**Р. Авсахов:** Кешелектең фәҡәт ҡулланыусы роленә йәшәү осоро тиҙерәк үтеп китһен һәм ҡала халҡы, ниһайәт, бындай йәшәү рәүешен кире ҡаҡһын ине, тип хыялланам. Яҡшы, уңайлы һәм тауышһыҙ йәмәғәт транспорты барлыҡҡа килһен ине, тип теләйем. Ҡиммәтле һәм ҡеүәтле сит ил лимузиндарында йөрөү, уны йәйәүлеләр юлына арҡыры ҡуйып китеү йә газондарҙы тапатып, баштары һуҡҡан ерҙә туҡталҡа итеү модаһы тиҙерәк үтеп китеүен теләйем. Ҡала урамдарында бер заман велосипедтарҙа һәм йәйәү йөрөүҙең өҫтөнлөк алыуын көтәм. Ҡабаланған саҡта ваҡытты экономиялау өсөн такси менән файҙаланыу, был хеҙмәттең арзанлығы, хәүефһеҙлеге; торлаҡ йорт алдарының монстр-машиналарҙан ҡотолоп, бер заман иркенәйеүе; кешеләрҙең йылға, күл, быуа буйҙарында, парктарҙа йөрөгәндә әҙәпле булыуҙарын, ундағы ҡош-ҡорт, балыҡ, кейектәрҙе ҡулға төшөрөргә маташмауҙарын, шулай уҡ был йәнлектәр тәбиғәтенә яраҡлы булмаған аҙыҡ киҫәктәре һәм тәм-том менән һыйламауҙарын теләр инем. Ҡала халҡының ҡасан, ҡайҙа етте, шунда сүп-сар ташлап китеүен, йәшәгән ерен уйһыҙ-моңһоҙ рәүештә аяуһыҙ ҡыйлауын, бысратыуын аңлай һәм ҡабул итә алмайым, уның бер заман сиге булырмы тип көтәм. Кеше юҡ ерҙән үҙе булдырған сүп-сарын махсус пакеттарға айырып, тәртипле генә тейешле урынға сығарып һалһын ине, тип теләйем. Беҙҙең балаларыбыҙ, ейән-ейәнсәрҙәребеҙ таҙа, сүп-сарһыҙ урмандарҙа йөрөр, һәр үҫемлекте, һәр ағасты яратырға, ҡәҙерләргә өйрәнер, шишмәләрҙән таҙа һыу эсер, тип хыялланам.

Тағы ла ҡасан беҙҙең граждандар нәфсеһенә хужа була алыр һәм бер ниндәй кәрәге булмаған һарай кеүек йорттар, бай коттедждар төҙөүҙән туҡтар икән тип көтәм. Тиҙҙән былай ҙа ундай һарай-йорттарҙа йәшәүҙең мәғәнәһе ҡалмаясаҡ, ә бер кешенең мөлкәтендә бер нисә фатиры булыу ҡомһоҙлоҡ, әҙәпһеҙлек тип баһаланасаҡ. Бөгөнгө менән боронғоно яраштырып көйләүсе яңы әхлаҡ системаһы барлыҡҡа килһен ине тип хыялланам. Яңы йорттоң бер ҡатында 8 кв.м үлсәмле 100 фатир, ә икенсе ҡатта ниндәйҙер бер "аристократ" өсөн 800 кв. метрлы ни бары бер фатир проектлауҙы әҙәм көлкөһө һәм оятһыҙлыҡ билдәһе тип ҡабул итәм. Бына шундай аҡыл зәғифлеге күренештәренән көлә белгән һәм уны ҡабул итмәгән саф һәм киң күңелле, мәрхәмәтле кешеләр менән бер ҡалала йәшәгем килә, ләкин беҙҙең быуынға уны күрергә яҙмаған. Шундай ҡалала минең - хыялый Дон Кихот, ғәҙеллек һәм законлылыҡ өсөн көрәшсенең - вариҫтары йәшәһен әйҙә...

**Ө. Ҡобағошов:** Рудоль Рәйес улының ошо хыялдары минең өсөн дә ят түгел. Тағы бер хыялым- йәштәрҙә лә ылыҡтырырға ине ошо ижадҡа. Исмаһам, бер профессиональ скульпторға ярҙам итеп булһа ине, тим. Әммә... Өйрәнергә ризалашҡан йәштәр юҡ. Килеп, бер аҙ эргәлә уралғылап йөрөйҙәр ҙә, был минең эшем түгел, бысраҡ, ҡыйын эш, мин компьютер менән күберәк аҡса эшләй алам, тип тураһын әйтеп ҡайтып китәләр. Хәҙерге ваҡытта, минең кеүек йылдар буйы иртән сәғәт 9-ҙан төнгө сәғәт 1-гә тиклем, ҡайһы саҡта аҙналар буйы ҡуна ятып эшләргә әҙер йәштәр бармы? Юҡ! Шулай ҙа мин уларға ҡаты бәрелмәйем: "Бәлки, ижадҡа ҡарашың үҙгәрер, бәлки, күп нәмәне аңлап та еткермәйһеңдер, фекерең ыңғай яҡҡа үҙгәрә ҡалһа, теләгән ваҡытыңда кил, бер ҡасан да һуң түгел", - тип өмөтөн өҙҙөрмәй генә оҙатамын.

Беҙҙең быуын скульпторҙары араһында ла рухлы, милли колорит менән эшләгән ижадсылар юҡ кимәлендә. Мәүлит Хәлилов, тағы кемде әйтергә лә белмәйем, ошо йүнәлештә тырышлыҡ күрһәтәбеҙ. Милли рухты, милли колоритты тойоп, уны монументаль сәнғәт, үҙенең ижадын аша халыҡҡа күрһәтә, еткерә алһаң, ул саҡта беҙ әле һөйләшкән һорауҙарға яуап бирә алабыҙ. Әгәр ошо әйткәндәрҙе күрһәтә алмайбыҙ икән, тимәк, милли колорит та, милли скульптура ла булмай. Милли рухты, милли колоритты тойоу ул әсә һөтөнән, бишек йырынан уҡ башлана. Ғаилә, мәктәп, тыуған ауыл, тыуған тәбиғәт, һине уратып алған мөхит - барыһы ла, һинең киләсәктә кем булыуыңа ҡарамаҫтан, рухыңа йөгөнтө яһай. Кешенең үҙенән дә күп нәмә тора. Аңды ғүмеренде ҡайһы яҡҡа йүнәлтәһең, шуға ҡарап шәхес буларак формалашаһың. Ошо әйткәндәргә ҡолаҡ һалһын ине йәштәр.

**Р. Авсахов:** Беҙҙән һуң килер быуындарҙың үҙ заманына ярашлы архитектура уйлап сығарырына икеләнмәйем. Ә бына уның ниндәйерәк үҙенсәлектәргә эйә булырын әйтеүе ҡыйын. Үҫеш процесының спираль рәүешендә килеүен иҫәпкә алып, беҙҙең хыялдағылар улар өсөн көнкүрәк булыр, моғайын, тип өмөтләнәм. Мәҫәлән, ейәнсәрем Ариаднаның "Францияләғы сәнәғәт зонаһын үҙгәртеп ҡороуҙы уртаса ҡатлы торлаҡ йорттарға яраҡлаштырыу" тип аталған курс эше проекты һайланма турҙан үтеп, Рәсәй буйынса 15 дәғүәсе иҫәбенә инеүе ошо өмөтөмдө ныҡыта төшә...

✓ *Теләһә ниндәй раса, милләт йәки енес кешеһе лә оҙаҡ йәшәй ала. Уларҙы бары бер нәмә берләштерә: оҙон ғүмерлеләр араһында бер генә һимеҙ кеше лә юҡ.*



ИНТЕРНЕТТАН



# МУЙЫНЫҢ АУЫРТАМЫ?

## Хәүеф тойғоһонан арын

■ Немец ғалимдары дәлилләүенсә, әгәр ҙә муйын ауырта икән, был физик түгел, ә психологик проблема. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, муйындағы ауыртыуҙар хәүеф тойғоһо һәм депрессия менән туранан-тура бәйле. Шуға ла ғалимдар табиптарға сирлегә диагноз ҡуйғанда иғтибарлыраҡ булырға кәңәш итә. Тикшеренеүҙәрҙә үҙ ғүмерендә бер тапҡыр булһа ла муйын ауыртыуына зарланған 448 ауырыу ҡатнаша һәм табиптар уларҙың 20 процентының депрессия, 28 процентының хәүеф тойғоһо менән бәйле булыуын билдәләй.

■ Италия ғалимдары дәлилләүенсә, күп кешеләр әңгәмәсеһен уң ҡолағы менән тыңлай икән. Бындай эксперименттың авторҙары фекеренсә, бында баш мейеһе ярымшарҙарының функциональ асимметрияһы сәбәпсе. Тикшеренеүселәр өс төрлө эксперимент үткәреп ҡарай. Тәүгеһе - көслө музыка яңғыраған төнгө клубта үтә. Ундағы халыҡтың 72 проценты тыңлаусыһының уң ҡолағына һөйләгән. Ошо уҡ клубта үткән икенсе тикшеренеүҙә ғалимдар ундағы кешеләрҙең йә уң, йә һул яғына килеп, тәмәке һораған. Өсөнсө экспериментта тикшеренеүселәр бер төркөм кешеләргә шым ғына аңлайышһыҙ һүҙ әйткән, был осраҡта күптәр уң ҡолағы менән ишетергә тырышҡан.

■ Балалар өсөн тәғәйенләнгән ҡоро аҙыҡтарҙың составында 2 процентҡа тиклем тоҙ, 55 процент тирәһе шәкәр бар, шуға ла балаларға бындай аҙыҡты йыш ашау тыйыла. Етмәһә, уларҙа тейешле күләмдә калория юҡ. Мәҫәлән, мәктәп уҡыусыһы төшкә тиклем үҙен яҡшы тойоу өсөн иртәнге аш ваҡытында 500 калория алырға тейеш. Ҡоро аҙыҡтар иһә кәрәкле норманың 29-39 процентын ғына бирә ала. Бынан тыш, бындай аҙыҡтарҙа тәм, төҫ биреүсе матдәләр, эмульгаторҙар күп.

■ Донъялағы халыҡтың 13 проценты һимереү менән яфалана. "Был күренешкә фармакология күҙлегенән бағыу, сирҙән ниндәйҙер дарыу уйлап табыу бик күптәргә ярҙам итер һәм йәмғиәткә файҙа килтерер ине", - ти Вирджиния Технология университетының "Cliff and Agnes Lilly" үҙәге ғилми хеҙмәткәре, химия профессоры Вебстер Сантос. Ул яңыраҡ коллегалары менән сысҡандарҙың аҙыҡ ҡабул итеү күләменә һәм мускулдары ауырлығына йоғонто яһамайынса, тән температураһын күтәрмәйенсә май массаһын кәметкән митохондрияль бүлгес матдә - BAM15 тапҡан. Ғалимдарҙың яңы асышы киләсәктә һимереү менән яфаланыусыларҙы, бауырға май үреү сирҙәрен дауалауҙа ҡулланылыуы бар.

■ Оло кешенең көндөҙ артыҡ ныҡ йоҡоһо килеүе ауыр сирҙәр, бигерәк тә ҡан баҫымы күтәрелеүе, йөрәк сирҙәре, яман шеш һәм диабет барлыҡҡа килеү ҡурҡынысын тыуҙырған шарт булып тора, тип иҫәпләй Калифорнияның Стэнфорд университеты медицина фәндәре докторы, тикшеренеүсе Морис М. Оайон. 11 мең кеше ҡатнашҡан тикшеренеү һөҙөмтәһендә көндөҙ йоҡоһо ныҡ килгәндәрҙә был сирҙәр үҫешеү мөмкинлеге йоҡламаусыларға ҡарағанда ике тапҡырға юғарыраҡ булған. Тикшеренеүҙә 10930 оло кешенән 3 йыл арауығында ике тапҡыр һорау алынған, 23 проценты беренсе интервью ваҡытында көндөҙ ныҡ йоҡолары килеүе хаҡында хәбәр иткән һәм 3 йыл эсендә шуларҙың 52-һе (6,2 процент) диабет, 20-һе яман шеш менән сирләгән. Ғалимдар көндөҙ ныҡ йоҡо килеү күренешен иғтибарһыҙ ҡалдырмаҫҡа ҡуша.

ҺАБАҠТАР

# ИГЕЛЕКЛЕ БУЛЫУ...

## йөҙҙө генә яҡтыртмай

**Ун ике йәшлек күрше ҡыҙы менән изгелек, миһырбанлыҡ, ярҙамсыллыҡ тураһында һөйләшәбеҙ.**



"Кешегә бер генә тапҡыр ярҙам итергә кәрәк. Икенсегә лә ярҙам күрһәтһәң, артабан ул һиңә быны эшләргә бурыслыһың, тип уйлаясаҡ һәм һинең менән файҙалана башлай. Ярҙам итә алмаһаң, һиңә ҡарата унда күрә алмаусанлыҡ, хатта дошманлыҡ тойғоһо уянасаҡ. "Ит изгелек, көт яуызлыҡ" тигән әйтем дә шунан килеп сыҡҡандыр", - ти ул.

Яҡшылыҡ һәм насарлыҡ, миһырбанлыҡ һәм ҡанһыҙлыҡ, изгелек һәм яуызлыҡ, йомартлыҡ һәм һаранлыҡ төшөнсәләрен тулыһынса аңлаған йәштәге ҡыҙ үҙ фекерен миҫал менән дәлилләп тә ҡуйҙы: "Уҡыу йылы башланғас та бер класташыма: "Өйгә бирелгән эште үтәй алманым, күсерергә биреп тор әле", - тип үтенгәс, дәфтәремде биргәйнем, һуңынан көн аралаш, аҙаҡ көн һайын һорай башланы. Һөмһөҙ һабаҡташым тамам ялҡытҡас, бер көндө дәфтәремде бирмәнем. Оҙаҡ та үтмәй, ул минең менән булыша, башҡа ҡыҙҙарҙы миңә ҡаршы ҡуйырға маташты. Шул арҡала күңелһеҙ хәлдәргә лә тарығаным булды..."

Өйгә эште күсерергә биреүҙе генә изгелек эшләү тип әйтеп булмай бит, тип аңлатырға уйлағайным, үҫмерлек максимализмы кисергән, йәғни реаль ысынбарлыҡ менән аҡланмаҫлыҡ ғәйәт ҙур талап ҡуйған йәштәге был ҡыҙ менән килешмәһәм дә, ҡаршы ла килмәнем. Шулай ҙа һәр ваҡыт эргә-тирәңдәгеләргә генә түгел, таныш булмағандарға ла игелекле, ярҙамсыл булырға, шәфҡәтлек, мәрхәмәтлек күрһәтергә кәрәклеген аңлатырға тырыштым. Изге күңелле булыу кешенең йөҙөн генә түгел, тормош юлын да яҡтыртып тороуын төшөндөрҙөм...

Ысынлап та, ярҙамсыл, изгелекле кеше әллә ҡайҙан яҡтырып, күренеп тора бит ул. Иғтибар итһәгеҙ, таныш түгел ҡалала йәки урамда ҡалһағыҙ, тейешле йортто, урамды һорарға уйлаһағыҙ, иң беренсе мөрәжәғәт иткән кешегеҙҙең йөҙөнә ҡарайһығыҙ: ярҙам итерҙәй кешеме, әллә юҡмы? Йылы ҡарашлы, яҡты йөҙлө булһа, уйламай ҙа үҙ йомошоғоҙҙо әйтәһегеҙ. Ҡараңғы сырайлы, уҫал йөҙлө булһа, унан ярҙам ала алмаҫығыҙҙы шунда уҡ аңлайһығыҙ.

Бер саҡ Үҙәк телевидениеның 1-се каналындағы тапшырыуҙарҙың береһендә Рәсәйҙең халыҡ артисы Лев Лещенко изгелек һүҙенә бик матур аңлатма биргәйне: "Һуңғы осорҙа изге эш ҡылыуҙы ниңәлер батырлыҡҡа, ҡыйыулыҡҡа тиңләй башланылар. Минеңсә, ул - бары тик кешенең күңел торошо, рухи талабы булырға тейеш", - тигәйне.

Тапшырыуҙа артистың үҙәк гәзиттәрҙең береһенән янғын ваҡытында үҙ ғүмерен ҡурҡыныс аҫтына ҡуйып, ауылдаштарына баһалап бөткөһөҙ ярҙам күрһәтеп, берҙән-бер килем сығанағы булған тракторынан яҙған егет тураһында уҡып белеп, рәхмәт йөҙөнән уға трактор бүләк итеүе хаҡында һөйләнеләр. Иң ҡыҙығы шунда: билдәле йырсының был ҡылығы хаҡында хатта иң яҡын дуҫтары ла белмәгән булып сыҡты...

"Изге эште йәшерен, дөрөҫөрәге, бер кем дә белмәгәндә ҡылығыҙ һәм уны башҡаларға белдереүҙән, күрһәтеүҙән, һөйләүҙән оялығыҙ", тигән бер аҡыл эйәһе. Юғиһә, беҙ йыш ҡына "Күпме игелек ҡылдым, бер рәхмәт һүҙе ишетмәнем", тип, эшләгән, ҡылған ҡылыҡтарыбыҙҙы һанарға ла тартынмайбыҙ. Ғөмүмән, ҡылған миһырбанлығың өсөн рәхмәт йәки бүләк көткән кешене игелекле, киң күңелле тип әйтеп буламы икән. Изге ғәмәл ҡылыу күңел талабы, эске халәтең булырға тейеш. Эскерһеҙ ярҙам иткәндә генә кеше ысын мәғәнәһендә ҡәнәғәтлек кисерә.

Бөгөнгө тиҙ үҙгәреүсән, ығы-зығылы, ҡатмарлы, мәшәҡәтле заманда йыш ҡына үҙең дә һиҙмәҫтән башҡа кешеләр проблемаһына битараф ҡалаһың, ярҙам һораған ҡулдарҙы күрмәй үтәһең. Ауыр ваҡытта изге күңелле булып ҡалыу ҡыйын, әлбиттә, әммә ана шул һинең өсөн иң ҡатмарлы мәл булып тойолған хәлдә лә игелек ҡылырға һәләтлеһең икән, тимәк, һин оло йәрәкле, мәрхәмәтле кешеһең.

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

БЫЛ - ҠЫҘЫҠ

# ОҘАҠ ЙӘШӘҮ СЕРЕ



**Шигеаки Хинохара - Япониялағы әүҙем ҡартлыҡ өлгөһө: 75 йәшенән һуң 150 китап яҙып баҫтыра (иң полпуляры - "Жить долго, жить хорошо" 1,2 миллион тираж менән тарала), 100 йәшенән һуң кешеләрҙе дауалауын һәм лекциялар уҡыуын дауам итә.**

**Шигеаки Хинохара оҙаҡ йәшәүҙең үҙ ҡағиҙәләрен булдыра. Уларҙың ҡайһы берҙәре көтөлмәгәнсә.**

Доктор Хинохараның оҙаҡ йәшәү ҡағиҙәләре:

● Кеше энергияны ашауҙан һәм йоҡлауҙан түгел, ә күңел асыуҙан ала. Бала сағығыҙҙы иҫләгеҙ әле, беҙгә күңелле булһа, ашауҙы ла онота торғайныҡ түгелме? Ололар ҙа шулай. Тәнде ашауҙың һәм йоҡлауҙың ҡәтғи тәртибе менән ыҙалатырға ярамай.

● Теләһә ниндәй раса, милләт йәки енес кешеһе лә оҙаҡ йәшәй ала. Уларҙы бары бер нәмә берләштерә: оҙон ғүмерлеләр араһында бер генә һимеҙ кеше лә юҡ. Мин, мәҫәлән, иртәнге аш урынына кофе йәки бер ҡалаҡ зәйтүн майы менән апельсин һуты эсәм ( ул артериялар һәм тире өсөн файҙалы). Төшкө ашта - печенье менән һөт йәки, әгәр ныҡ бушамаһам, бер нәмә лә ашамайым. Эшләгән ваҡытта бөтөнләй асығыуҙы тоймайым. Киске ашым - йәшелсә, бер аҙ балыҡ һәм дөгө. Аҙнаһына ике тапҡыр 100-әр грамм майһыҙ ит ашайым.

● Эштәрегеҙҙе һәр ваҡыт күпкә алға планлаштырығыҙ. Минең көндәлегем, ғәҙәттә, киләһе йылдың һуңына тиклем тултырылған - пациенттар ҡабул итеү, лекциялар һәм дауаханалағы эштәр.

● Хаҡлы ялға бөтөнләй сығырға кәрәкмәй. Әммә унһыҙ булмай икән, пенсияға мөмкин тиклем һуңыраҡ сығырға тырышығыҙ. Бөгөн Японияла пенсия йәше - 65, әммә уны ярты быуат элек, илдә уртаса ғүмер оҙайлығы 68 йәш, ә тотош Японияға ни бары125 йөҙйәшәр булғанда индергәйнеләр. Бөгөн япон ҡатын-ҡыҙҙары уртаса алғанда - 86, ир-ат 80 йәш йәшәй, ә йөҙ йәште үтеүселәр - 36 мең!

● Белемегеҙ менән бүлешегеҙ. Мин теләһә ниндәй аудитория алдында - мәктәп уҡыусыларынан алып бизнесмендарға тиклем - йылына 150 лекция уҡыйым. Лекцияларым бер сәғәттән сәғәт ярымға тиклем һуҙыла һәм мин ошо ваҡыт эсендә аяғөҫтө баҫып торам.

● Табип һеҙгә ниндәйҙер анализдар тапшырырға йәки операция эшләтергә тәҡдим итһә, унан: "Ә һеҙ үҙегеҙҙең балаларығыҙға, ҡатынығыҙға йәки башҡа туғандарығыҙға ла шуны уҡ тәҡдим итер инегеҙме?"- тип һорағыҙ. Табиптар, нимә генә тимәһендәр, бөтә сирҙе лә дауалай алмай. Ни өсөн артыҡ ыҙалар кисерергә? Ҡайһы берҙә музыка һәм хайуандар хирургияға ҡарағанда ныҡыраҡ ярҙам итә.

● Сәләмәт булып ҡалыр өсөн баҫҡыс буйлап күтәрелегеҙ һәм үҙ әйберҙәрегеҙҙе үҙегеҙ күтәрегеҙ. Мин мускулдарым эшләһен өсөн ике баҫҡысты аша баҫам.

● Мине Роберт Браунингтың "Аббат Фоглер" поэмаһы илһамландыра. Уны бала саҡта атайым уҡығайны. Унда үҙенә тормошта ла, сәнғәттә лә ҙур маҡсаттар ҡуйыу тураһында әйтелә. Әгәр түңәрәк һыҙырға теләйһегеҙ икән,

***✓ Быйылғы һөҙөмтә ҡыуандырырлыҡ. Былтыр ҡурсаулыҡта 23 ата марал иҫәпләнгәйне, бына быйыл "атайҙар" һаны берәүгә күберәк булып сыҡты. Тимәк һуңғы ике йылда был урман хайуандары кәмемәгән.***

ТӘБИҒӘТ МӨҒЖИЗӘҺЕ

**Сентябрь айында Башҡортостан ҡурсаулығында маралдарҙың иҫәбен алыу эше башҡарылды. Шуны билдәләргә кәрәк: был ғилми эш ҡурсаулыҡ өсөн иң мөһимдәренең береһе булып иҫәпләнә. Ул бына нисәмә тиҫтә йылдар буйына өҙлөкһөҙ башҡарылып килә.**

# НИСӘ МАРАЛ ЙӘШӘЙ?



Ғәҙәттә, урман йәнлектәренең һаны улар ҡалдырған эҙҙәргә таянып билдәләнә. Әммә беҙҙең осраҡта был эштең мөһим бер үҙенсәлеге бар - көҙ көнө маралдар һаны уларҙың тауыштарын тыңлап, дөрөҫөрәге, ата маралдарҙың һөрәнләгәне буйынса асыҡлана. Эш шунда, алтын көҙ тыуыуы менән маралдар парлаша башлай. Был мәлдә ата марал көн һайын һөрәнләп тауыш бирә, ә инәләре уның эргәһенә яйлап йыйыла бара. Тормош бит, ваҡыты менән бер урынды ике "атай" төйәк итә, улар араһында ҡаты алыш та булып ала. Тәбиғәт ҡанундары ҡаты, көслөрәге еңелгәнен ҡыуып ебәрә. Шул уҡ ваҡытта тәбиғәт миһырбанлы ла: һәр "атай" үҙ тиңдәрен табыуға өлгәшә. Тора-бара һәр бер ата марал өс-дүрт инәнән торған өйөр туплап ала - ҡурсаулыҡ майҙансығында көн күргән маралдарҙың дөйөм һаны бына ошо һандарға таянып асыҡлана ла инде.

Ата марал ҡара таң һәм эңер төшкән мәлдә әүҙем һөрәнләй. Шуға күрә иҫәпселәр (ғилми хеҙмәткәрҙәр, дәүләт инспекторҙары һәм башҡалар) таңғы 5-тән иртәнге 10-ға тиклем һәм киске 6-нан төнгө 11-гә хәтлем урманда, тау башында була. Эш шунда: бейек тауҙан маралдарҙың һөрәнләүе алыҫҡа яңғырай һәм асыҡ ишетелә. Ҡурсаулыҡта бөтәһе 42 ошондай иҫәпләү урыны бар. Әлбиттә, быңдай шарттарҙа эшләү өсөн иҫәпселәргә таҫыллыҡ та, көс тә, урманды яҡшы белеү ҙә кәрәк. Иң мөһиме, маралдарҙы дөрөҫ иҫәпләй белеү фарыз. Бының өсөн тәү сиратта һөрәнләү тауыштарын айыра белеү мөһим. Һәр кешенең үҙ тауышы булған кеүек, маралдарҙың да тауыштары бербереһенән айырыла. Шуныһы һәйбәт, быйылғы һөҙөмтә ҡыуандырырлыҡ. Былтыр ҡурсаулыҡта 23 ата марал иҫәпләнгәйне, бына быйыл "атайҙар" һаны берәүгә күберәк булып сыҡты. Тимәк, тип һығымта яһайбыҙ беҙ, һуңғы ике йылда был урман хайуандары кәмемәгән, бөгөн ҡурсаулыҡта сама менән 80-гә яҡын марал көн күрә.

Хәҙер һығымта яһайыҡ. Маралдар күбәйгәнме, әллә әҙәйгәнме - быны белер өсөн тарихҡа күҙ һалайыҡ. Ҡасандыр улар беҙҙә күпләп йәшәгән. Әммә бер мәл уларҙың һаны ҡырҡа кәмегән. Хатта бөтөнләйе менән юҡҡа сығыу хәүефе янай башлаған. Быңдай ауыр хәлде төҙәтер өсөн Башҡортостан ҡурсаулығы хеҙмәткәрҙәре Алтайҙан 39 марал һатып алған һәм уларҙы үҙ майҙанына ебәргән. Был эш 1941 йылда башҡарылған. Шуныһы ҡыуаныслы, бик килешкән маралдарға Башҡортостан ҡурсаулығының тәбиғәте. Сама менән 40 йыл эсендә уларҙың һаны 400-ҙән ашып киткән. Әммә, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, яңы быуаттың башында уларҙың һаны тағы ҡырҡа кәмегән. Иҫәпләүҙәр буйынса яңы быуат башына маралдар һаны ни бары 20-30 башҡа ғына тороп ҡалған. Быңдай аяныслы хәлде иҫәпкә алып, Башҡортостан дәүләт ҡурсаулығы 2012 йылда Алтайҙан тағы 9 марал һатып ала. Шуныһы ҡыуандыра һәм өмөтләндерә: бөгөн ҡурсаулыҡта уларҙың һаны яйлап арта бара.

Ә нишләп аҫыл болан (маралдың икенсе исеме шулай) ҡырҡа кәмеп киткән һуң? Сәбәптәре күп, әлбиттә. Ә шулай ҙа төп сәбәп - тәү сиратта ҡайһы бер һунарсыларҙың артыҡ шашып китеүендә. Бер өлкән ағайҙың әсенеп һөйләгәне иҫтән сыҡмай: "Ваҡытында урманда марал күп булды. Көҙ мәлендә ата маралдарҙың һөрәнләүенә урман геүләп торор ине. Әммә ҡайһы бер һунарсылар артыҡ шашып китте. Һөйләһәң, аптырамалы инде. Бер мәл дүрт һунарсы бергә һунарға сығып, бер урында ғына 7-8 инә маралды ҡырып ташлағанын үҙ күҙҙәрем менән күрҙем, үҙем өҫтәренә барып сыҡтым. Кеше һөйләһә, һис ышанмаҫ инем был хәлгә. Тегеләр: "Ағай, өндәшмә инде, һәләк итмә инде беҙҙе", - тип инәләләр. "Их, - тинем уларға, - һеҙ миңә түгел, ә Аллаһы Тәғәләгә инәлегеҙ. Маралды бушҡа ғына аҫыл болан тип атамайҙар бит. Уның ҡарғышы яман икәнен үҙегеҙ ҙә беләһегеҙ. Үтә ҡанһыҙ ҡыланғанһығыҙ. Берәүһен генә алһағыҙ ҙа етә ине һеҙгә. Бушҡа йәнен ҡыйғандарҙың рәнйеш-ҡарғышын күтәрә алһағыҙ, ярар ҙа..." - тип яуапланым уларға. Әммә был гонаһты күтәрә алманылар улар. Береһе лә 50 йәшкә етә алманы. Бөтәһе лә үлеп бөттөләр. Кемеһе ауырыны, кемеһенең өҫтөнә ағас ауҙы, кемеһе машина аҫтында ҡалды, кемеһе айыға алмай, йәпйәш көйө донъя ҡуйҙы. Аяныслы хәл, әммә үҙҙәренә үҙҙәре бәлә алып килделәр шул..."

Мәҡәләнең башы икенсе йүнәлештә башланһа ла уны, бөгөнгө быуын һунарсылары ошондай аяныслы хәлдән һабаҡ алһалар ине, тигән һүҙҙәр менән тамамлағы килә.

**Әғләм ШӘРИПОВ,**
**биология фәндәре докторы, Башҡортостан дәүләт ҡурсаулығының өлкән ғилми хеҙмәткәре.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ҒҮМЕРҘӘР ЗАЯ ҮТМӘҺЕН

## 42-се идея
## Һин яңғыҙ түгел

Ҡайһы саҡ беҙ үҙебеҙҙе донъябыҙҙы үҙгәртергә бөтөнләй хәлебеҙҙән килмәҫ кеүек тоябыҙ. Һин үҙеңде тормошоңдо, йортоңдо, ҡалаңды, ғаиләңде һәм донъяңды саҡ ҡына булһа ла яҡшыртырға һәләтһеҙ тип тояһыңмы? Әгәр шулай икән, быға ҡарата минең ҡарашымды үҙгәрткән бер осраҡ хаҡында һөйләргә рөхсәт ит.

Шулай бер ваҡыт мин умарталыҡҡа барҙым. Йәй уртаһы ине. Бер умартанан икенсеһенә күсеп ҡарап йөрөгәндә мин ҡомло ярҙы йыуған диңгеҙ тулҡындарының шыбырлауына оҡшаған сәйер тауыш ишеттем. Ҡарт умартасынан: "Был нимә ул?", - тип һорағым. Ул: "Елпеүес-ҡорттар", - тип яуап бирҙе. Эйе, тап елпеүес-ҡорттар. Умартала меңәрләгән ҡорт; бөтәһе лә үҙәккә ҡарап ултырған да, бөтә көскә ҡанаттары менән елпеп эшләй. Улар оянан тонсоған һауаны ҡыуып, саф һауа индереү менән шөғөлләнә. Меңәрләгән елпеүес-ҡорттар тырышлығы менән бөтә умарта елләтелә. Улар, бал үҙенең хуш еҫен һаҡлаһын һәм яңы булып ҡалһын өсөн, умарта аша һауа ҡыуҙыртыу менән генә шөғөлләнә.

Ҡапыл башыма, ә айырым бер ҡорт үҙе генә нимә эшләй алыр ине икән, тигән уй килде. Ул бер үҙе ҡанаттары менән күпме генә тырышып елпемәһен, бер ниндәй ҙә һөҙөмтә булмаҫ ине. Ләкин уның тырышлығы башҡа меңәрләгән елпеүес-ҡорттарҙың тырышлығы менән бергә ҡушылһа, тотош умарта өсөн бына тигән һауа ҡыуҙырыу системаһы барлыҡҡа килә. "Кеше тормошонда ла шулай түгелме ни? Мин бер үҙем генә бер нәмә лә эшләй алмайым, ләкин беҙ икәү, өсәү булһаҡ, бөтөнләй башҡа эш", тип уйлауымды дауам иттем.

Ихтимал, һин хәҙер: "Әгәр бер төркөм кеше бергә йыйылып, күрә алмаусылыҡты, фәҡирлекте, ҡурҡыуҙы һәм шикләнеүҙәрҙе ҡыуып, торғонланған донъябыҙҙы еләтһә, ниндәй яҡшы булыр ине. Тик мин яңғыҙмын шул, яңғыҙым ни ҡыра алам һуң?" - тип уйлайһыңдыр. Һин яңғыҙ түгел. Күптәр үҙҙәрен һинең кеүек үк тоя. Үҙ тырышлығын бергә ҡушҡан бал ҡорттары кеүек, беҙ ҙә, үҙ уй-ниәттәребеҙҙе берләштереп, ҙур көскә әүереләбеҙ.

Шуға күрә, үҙ көсһөҙлөгөң тураһында уйлама. Күҙ алдыңа килтер әле: һинең кеүек уйлаған күп кешеләр бергә тупланырға тәүәккәлләне, ти. Беҙ үҙ донъябыҙҙы ҡурҡыуҙан, шикләнеүҙән, хаслыҡтан, нәфрәттән, баҙнатһыҙлыҡтан, бөтә кире уйҙарҙан еллә-тергә, арындырырға тейешбеҙ. Бының урынына донъябыҙға һөйөү, яҡтылыҡ, бәхет һәм танып белеү шатлығы индерербеҙ.

Һәр беребеҙ үҙ ҡанаттары ҡағышын донъяны данлаусы фәрештәләрҙең ҡанат ҡағышына ҡуша ала, шул саҡта барыбыҙ ҙа бергәләп, донъяны сафландырыу һәм изгелек сәсеү өсөн бөйөк көскә әйләнәсәкбеҙ.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**

ул шул тиклем ҙур булырға тейеш, уны ғүмер буйы һыҙып та осона сығырлыҡ булмаһын. Беҙгә уның бары тик бер өлөшө - дуғаһы ғына күренә, ҡалғаны - беҙ күргәндән һәм беҙҙең тормошобоҙ сигенән сыға.

- Ауыртыу - серле нәмә; уны еңеү өсөн ниндәйҙер ҡыҙыҡ шөғөл табырға кәрәк. Баланың теше һыҙлаһа, уны уйынға ылыҡтырһаҡ, ул шунда уҡ ауыртыныуын онота. Дауаханалар был турала хәстәрлек күрергә тейеш. Беҙҙең Изге Лука дауаханаһында күңел асыу бик күп: музыка, хайуандар һәм арт-терапия бар. Улар барыһы ла ярҙам итә.
- Матди әйбер йыйырға тырышмағыҙ. Иҫегеҙҙә тотоғоҙ: бер кем дә үҙенең сәғәте ҡасан һуғырын белмәй. Барыһын да алып китеп булмай.
- Фән үҙе генә кешеләргә ярҙам итергә һәләтле түгел. Ул беҙҙең барыбыҙҙы ла бер төрлө дауалай, ә сирҙәр күңел менән ныҡ тығыҙ бәйле. Кешенең сирен аңлау һәм уға ярҙам итеү өсөн фән генә түгел, сәнғәт тә кәрәк.
- Үҙегеҙгә өлгө өсөн бер образ уйлап табығыҙ һәм унан уҙҙырырға тырышығыҙ. Минең атайым 1900 йылда АҠШ-ҡа, Төньяҡ Каролиналағы Дюка университетына уҡырға китте. Ул минең беренсе геройым булды. Һуңынан башҡалар барлыҡҡа килде; ауыр хәлдә ҡалғанда мин үҙемде улар урынына ҡуйып ҡарайым да, улар нимә эшләр ине икән, тип уйлайым.
- Оҙаҡ йәшәү - һоҡланғыс. 60 йәшкә тиклем беҙ ғаилә именлеге өсөн эшләйбеҙ һәм беҙгә ҡуйған маҡсаттарыбыҙға өлгәшеү еңел. Һуңынан беҙ йәмғиәт именлеге өсөн тырышырға тейешбеҙ. 65 йәшем тулғас мин аҙнаһына ете көн, тәүлегенә 18 сәғәт бушҡа эшләйем һәм һәр минутымдан ҡәнәғәтлек алам.

**Доктор Шигеаки Хинохара, Токиолағы Изге Лука дауаханаһы президенты, 2017 йылдың 18 июлендә 105 йәшендә вафат була. Һуңғы һулышына тиклем тиерлек ул пациенттарҙы ҡабул итә, уның яҙмалар кенәгәһе биш айға алдан тултырылған була.**



**12 ОКТЯБРЯ**
**ПОНЕДЕЛЬНИК**
**ПЕРВЫЙ КАНАЛ**
5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.40 Жить здорово! [16+]
10.50 Модный приговор. [6+]
12.10, 17.00, 1.05, 3.05 Время покажет. [16+]
14.10 Премьера. "Гражданская оборона". [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.35 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Мосгаз". Новое дело майора Черкасова". [16+]
22.25 Премьера сезона. "Док-ток" [16+]
23.25 Вечерний Ургант. [16+]
0.00 Познер. [16+]

**РОССИЯ 1**
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Тайны следствия-18". [12+]
17.15 Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Возвращение". [12+]
23.30 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.20 Т/с "Каменская-5". [16+]
4.05 Т/с "Отец Матвей". [12+]

**БСТ**
**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 19.00, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 Үткән гүмер. [12+]**
**8.45 Тормош. [12+]**
**9.15 "Ете егет". [12+]**
**10.00 "Бейе". [0+]**
**10.15 "Кош юлы. Балалар". [0+]**
**10.30 "Сулпылар". [0+]**
**11.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**11.45 "Гора новостей". [6+]**
**12.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**12.45 "Все песни о прекрасном". Концерт. [12+]**
**13.45, 2.15 Спектакль "Таганок". [12+]**
**15.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**16.00 "Пофутболим?" [12+]**
**16.15 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Барыс" /Нур-Султан/. КХЛ.**
**19.30 "Ода кураю". Концерт.**
**21.30 Новости недели (на рус. яз.).**
**22.15 История одного села. [12+]**
**23.00 Спортивная история. [12+]**
**23.30 Х/ф "Любовь и дружба". [12+]**
**1.30 Бәхетнамә. [12+]**
**4.00 "Млечный путь". [12+]**
**5.00 "Наука 102". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

**13 ОКТЯБРЯ**
**ВТОРНИК**
**ПЕРВЫЙ КАНАЛ**
5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.40 Жить здорово! [16+]
10.50 Модный приговор. [6+]
12.10, 17.00, 1.10, 3.05 Время покажет. [16+]
14.10 Премьера. "Гражданская оборона". [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.40 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Мосгаз". Новое дело майора Черкасова".[16+]
22.30 Премьера сезона. "Док-ток" [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 Т/с "Есенин". [16+]

**РОССИЯ 1**
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Тайны следствия-18". [12+]
17.15 Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Возвращение". [12+]
23.30 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.20 Т/с "Каменская-5". [16+]
4.05 Т/с "Отец Матвей". [12+]

**БСТ**
**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Любовь всегда в моем сердце". [12+]**
**11.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30, 2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Дорога к храму". [0+]**
**15.00 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.30 "Времечко".**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.15 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**21.00 Детей много не бывает. [6+]**
**22.00 Тормош. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Сверхъестественное". [16+]**
**2.45 Спектакль "Древо жизни". [12+]**
**4.15 Бирешмә. Профи. [12+]**
**5.00 "Наука 102". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

**14 ОКТЯБРЯ**
**СРЕДА**
**ПЕРВЫЙ КАНАЛ**
5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.40 Жить здорово! [16+]
10.50 Модный приговор. [6+]
12.10, 17.00, 1.10, 3.05 Время покажет. [16+]
14.10 Премьера. "Гражданская оборона". [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.40 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Мосгаз". Новое дело майора Черкасова".[16+]
22.30 Премьера сезона. "Док-ток" [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 Т/с "Есенин". [16+]

**РОССИЯ 1**
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Тайны следствия-18". [12+]
17.15 Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Возвращение". [12+]
23.30 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.20 Т/с "Каменская-5". [16+]
4.05 Т/с "Отец Матвей". [12+]

**БСТ**
**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Любовь всегда в моем сердце". [12+]**
**11.15 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30, 2.45 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Аль-Фатиха". [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Апчхи". [0+]**
**15.30 "Сулпылар". [0+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.30 Спортивная история. [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.15 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.45 "Честно говоря". [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байык-2020". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**0.00 Х/ф "Последнее испытание". [16+]**
**3.30 Спектакль "Вечерняя трапеза". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

**15 ОКТЯБРЯ**
**ЧЕТВЕРГ**
**ПЕРВЫЙ КАНАЛ**
5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.40 Жить здорово! [16+]
10.50 Модный приговор. [6+]
12.10, 17.00, 2.00, 3.05 Время покажет. [16+]
14.10 Премьера. "Гражданская оборона". [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Мосгаз". Новое дело майора Черкасова".[16+]
22.30 Премьера сезона. "Док-ток" [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 Т/с "Есенин". [16+]

**РОССИЯ 1**
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Тайны следствия-18". [12+]
17.15 Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Возвращение". [12+]
23.30 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.20 Т/с "Каменская-5". [16+]
4.05 Т/с "Отец Матвей". [12+]

**БСТ**
**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 20.00, 20.15, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Любовь всегда в моем сердце". [12+]**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 23.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30, 2.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**15.00, 18.15 Интервью. [12+]**
**15.15 Бирешмә. Профи. [12+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.30 "Времечко".**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.50 Хоккей. "Куньлунь РС" (Пекин) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**0.00 Х/ф "Паранормальное". [16+]**
**3.15 Спектакль "Салават". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

**16 ОКТЯБРЯ**
**ПЯТНИЦА**
**ПЕРВЫЙ КАНАЛ**
5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00 Новости.
9.40 Жить здорово! [16+]
10.50, 2.40 Модный приговор. [6+]
12.10, 17.00 Время покажет. [16+]
14.10 Премьера. "Гражданская оборона". [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15, 3.30 Давай поженимся! [16+]
16.00, 4.10 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 Поле чудес. [16+]
21.00 Время.
21.30 "Голос". Новый сезон. [12+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.25 Премьера. "Концерт группы Metallica с симфоническим оркестром Сан-Франциско". [18+]
2.00 Наедине со всеми. [16+]

**РОССИЯ 1**
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Местное время. Вести-Приволжского федерального округа.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55 Т/с "Тайны следствия-18". [12+]
17.15 Прямой эфир. [16+]
21.20 Юморина-2020. [16+]
0.40 Х/ф "Знахарка". [12+]
4.05 Т/с "Отец Матвей". [12+]

**БСТ**
**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Любовь всегда в моем сердце". [12+]**
**11.15 "Йома". [0+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**12.30, 21.00, 6.00 Башкорттар. [6+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30, 5.00 Үткән гүмер. [12+]**
**14.00 "Курай даны". [12+]**
**14.15 "Красная кнопка". [16+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.30 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**19.00 "Башкорт йыры-2020". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**19.45 История одного села. [12+]**
**20.15 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**22.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**23.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**23.30 Автограф. [12+]**
**0.00 Х/ф "Колетт". [18+]**
**2.30 Спектакль "И судьба - не судьба". [12+]**
**5.30 "Бай". [12+]**

**17 ОКТЯБРЯ**
**СУББОТА**
**ПЕРВЫЙ КАНАЛ**
6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 Умницы и умники. [12+]
9.45 Слово пастыря. [0+]
10.00 Новости.
10.15 Премьера. "101 вопрос взрослому". [12+]
11.10, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
13.55 Премьера. "На дачу!" с Наташей Барбье. [6+]
15.00 Д/ф Премьера. "Из дела майора Черкасова. "Палач". Без срока давности". [16+]
16.00 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. [12+]
17.20 "Ледниковый период". Новый сезон. [0+]
21.00 Время.
21.20 Сегодня вечером. [16+]
23.00 Большая игра. [16+]
0.10 Д/с "Страна Советов. Забытые вожди". [16+]
1.10 Наедине со всеми. [16+]
1.55 Модный приговор. [6+]
2.45 Давай поженимся! [16+]
3.25 Мужское / Женское. [16+]

**РОССИЯ 1**
5.00 "Утро России. Суббота".
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Тест. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.30 Юмор! Юмор!! Юмор!!! [16+]
12.30 Доктор Мясников. [12+]
13.40 Х/ф "Мое сердце с тобой". [12+]
18.00 "Привет, Андрей!" [12+]
20.00 Вести в субботу.
21.00 Х/ф "Послушная жена". [12+]
1.05 Х/ф "Семья маньяка Беляева". [12+]
4.15 Перерыв в вещании.

**БСТ**
**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [12+]**
**8.45 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**9.15 "Ете егет". [12+]**
**10.00 "Физра". [6+]**
**10.15 Преград. Net. [6+]**
**10.30 "Книга сказок". [0+]**
**10.45 "Сыйырсыҡ". [0+]**
**11.00 "Апчхи". [0+]**
**11.15 "Байтус". [6+]**
**11.30 Детей много не бывает. [6+]**
**12.00 Күстәнәс. [12+]**
**12.30 Үткән гүмер. [12+]**
**13.00, 5.30 Автограф. [12+]**
**13.30 Хазина о Хазине. [12+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**16.55 Волейбол. "Урал" (Уфа) - "Факел" (Новый Уренгой). Чемпионат России. Суперлига.**
**18.50 Хоккей. "Авангард" (Омск) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**22.30 Новости недели (на баш. яз.).**
**23.15 "Башкорт йыры-2020". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**0.00 Х/ф "Другая Бовари". [16+]**
**2.15 Итоги недели (на баш. яз.).**
**3.00 Спектакль "Земляки". [12+]**
**4.45 Әлләсе... [6+]**

**18 ОКТЯБРЯ**
**ВОСКРЕСЕНЬЕ**
**ПЕРВЫЙ КАНАЛ**
5.10, 6.10 Х/ф "Весна на Заречной улице". [12+]
6.00, 10.00 Новости.
6.55 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.40 Часовой. [12+]
8.10 Здоровье. [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.10 Жизнь других. [12+]
11.10, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
13.55 Премьера. "На дачу!" с Ларисой Гузеевой. [6+]
15.10 Ээхх, Разгуляй! [16+]
17.15 Х/ф "Операция "Ы" и другие приключения Шурика". [6+]
19.10 "Три аккорда". Новый сезон. [16+]
21.00 Время.
22.00 "Что? Где? Когда?" Осенняя серия игр. [16+]
23.10 Х/ф "Большая игра". [18+]
1.30 Наедине со всеми. [16+]
2.15 Модный приговор. [6+]
3.05 Давай поженимся! [16+]
3.45 Мужское / Женское. [16+]

**РОССИЯ 1**
4.20, 1.30 Х/ф "Танго мотылька". [12+]
6.00 Х/ф "Любовь на сене". [12+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Устами младенца.
9.20 Когда все дома.
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.30 Х/ф "Злая шутка". [12+]
13.35 Х/ф "Забывая обо всем". [12+]
17.50 Удивительные люди. Новый сезон. [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
3.10 Т/с "Отец Матвей". [12+]
4.54 Перерыв в вещании.

**БСТ**
**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15 "Курай даны". [12+]**
**9.30 Тормош. [12+]**
**10.00 "Бейе". [0+]**
**10.15 "АйТеко!" [6+]**
**10.30 "Сулпылар". [0+]**
**11.00 "Гора новостей". [6+]**
**11.15 "Ал да гөл". [6+]**
**11.30 "Кош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Бирешмә. Профи. [6+]**
**12.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.30 Башкорттар. [6+]**
**16.00 "Дорога к храму". [0+]**
**16.30, 5.30 Историческая среда. [12+]**
**17.00 Концерт камерной музыки композитора Валерия Скобелкина. [12+]**
**18.45 Лидеры региона. [12+]**
**19.15 "Байык-2020". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**20.15 Әлләсе... [6+]**
**21.00, 22.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.30, 6.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**23.00 "Красная кнопка". [16+]**
**23.45 "ВасСәләм!" [12+]**
**0.15 Х/ф "Скрытая любовь". [16+]**
**1.45 Спектакль "Страна Айгуль". [12+]**
**4.00 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**4.45 "Млечный путь". [12+]**

*✓ Аҡылына һәм йөрәгенә күләгә төшөрөүе мөмкин булған етешһеҙлек, тип ҡурҡып, шиғыр яҙырға һәм ғашиҡ булырға ҡурҡҡандар ҙа бар.*
*(Жан Лабрюйер).*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# СӘСКӘ АТ, БАШҠОРТОСТАН!




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**40-сы һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Сәғәт. Талхина. Маҡар. Таҡыя. Ҡудаш. Турһыҡ. Ҡулашҡа. Күнәк. Ҡайраҡ. Тараҡ. Аша. Өндәү. Наил. Ниәт. Күркә. Анна. Ыҡ. Ҡоншаҡ. Рәйсә. Кәримов. Лапаҫ.

**Вертикаль буйынса:** Ҡалтағай. Тәлмәрйен. Шалҡан. Тары. Олокүл. Ятаҡ. Сәләм. Артыш. Африка. Ҡаһарманлыҡ. Оло. Театр. Вуз. Өлкәр. Үләң. Әрйә. Шик. Үрәсә.

ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



# АНДЫҘ ВАҠЫТЫ - ҺАРЫСАЙ

**Тышта әсе һыҙғырып ел иҫкәндә, һыуыҡ ямғыр тәҙрә сирткәндә андыҙ тураһында яҙырға булдым. Был үҫемлекте белмәгән кеше һирәктер, бәләкәйҙән беҙҙе саҡ ҡына йүткерһәк тә андыҙ эсереп дауаланылар.**

Көҙ етһә, шул тамырҙы ҡаҙып алмаһам, ҡыш көндәре ҡараһыуыраҡ күренгән һымаҡ. Әле лә ғәҙәтемә тоғро ҡалып андыҙ ҡаҙып алып ҡайттыҡ. Ваҡыты ошо инде - сентябрь аҙағы. Ҡара һоро төҫкә ингән һабаҡтары әллә ҡайҙан тырпайып күренеп тора. Алып ҡайтып баҡсаға тамырын ултыртһаң, ғүмер буйы ошонда үҫкәндәй үҫеп тә китә.

Файҙаһына килгәндә, күп яҡлы ул. Рим Әхмәдовтың "Одолень трава", "Растения твои друзья и недруги" тигән китаптарында шул тиклем күп яҙылған, бер аҙ ҡыҫҡартып бирәм.

Был бөтә төр ауырыуҙарҙы дауалағанда ла ҡулланылған, тиерлек, популяр үҫемлектәрҙең береһе. Андыҙ төрлө яҡлап өйрәнелһә лә, яңы серҙәрен асыуҙы дауам итә. Тамырының стафилококка һәм диабетҡа ҡаршы дауаһы, бауырҙан токсиндарҙы сығарыуға булышлыҡ итеүе асыҡланған. Төрлө яман шеш ауырыуҙары, туберкулез, аллергия, гипертония, ревматизм, хәтер юҡлыҡ, бөйөрҙәге һыулы шеш, ауыҙ шешеү, бронхитты дауалау һәм аяҡтың баш бармағындағы оролларҙы бөтөрөү өсөн ҡулланыла. Төрлө ауырыуҙан ҡулланыу ысулдары ла төрлө, унда әйтелгәнде тулыһынса үтәһәң, файҙаһы тейергә генә тора.

Бына бронхит сиренән түбәндәгесә рецепт тәҡдим итә Рим Әхмәдов. Ысынлап ярҙам итә ул, 3-5 көн тигәндә йүтәл йомшап, хәл еңелләшә. Дауаны әҙерләү өсөн 1 ҡалаҡ андыҙ тамырына кистән ҡайнатып һыуытылған бер стакан һыу ҡойоп ултыртырға. Тамырҙар ауыҙы ябыҡ һауытта 8 сәғәттән дә кәм төнәргә тейеш түгел. Иртәнсәк яҡшылап болғатып, тондорорға һәм 1 сәғәт һайын берәр йотом эсеп дауаланырға.

Тик бөтә кешегә лә бармай. Әхмәдовтың китабында "Ауыр йөрәк-ҡан тамырҙары, бөйөр сирҙәренән яфаланғандарға ярамай. Төнәтмәләр аш һеңдереү ферменттарын сығарыуҙы яйлата, түбән кислоталылыҡҡа бәйле ашҡаҙан ауырыуҙары булғанда зыян килтереүе ихтимал. Күрем күп килгәндә, йөклө ҡатындарға ҡулланырға ярамай, гипотониктарға һаҡ булырға" тип яҙылған. Кемдең форсаты бар, ҡаҙып алырға тырышығыҙ.

**Фирүзә ХӨСӘЙЕНОВА.**

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1442 һижри йыл.*

| Октябрь (Сәфәр - Рабиғел әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 12 (25) дүшәмбе | 6:11 | 7:41 | 13:30 | 16:52 | 18:22 | 19:52 |
| 13 (26) шишәмбе | 6:13 | 7:43 | 13:30 | 16:50 | 18:20 | 19:50 |
| 14 (27) шаршамбы | 6:15 | 7:45 | 13:30 | 16:47 | 18:17 | 19:47 |
| 15 (28) кесе йома | 6:17 | 7:47 | 13:30 | 16:45 | 18:15 | 19:45 |
| 16 (29) йома | 6:19 | 7:49 | 13:30 | 16:42 | 18:12 | 19:42 |
| 17 (30) шәмбе | 6:21 | 7:51 | 13:30 | 16:40 | 18:10 | 19:40 |
| 18 (1) йәкшәмбе | 6:23 | 7:53 | 13:30 | 16:38 | 18:08 | 19:38 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**12 октябрь "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама. 18.00. 16+

**13 октябрь "Гөлбостан"** (Ҡ. Даян, Д. Йосопов). 12+

**14 октябрь "Бомба"** (С. Әбүзәр), комедия-фарс. 16+

**15 октябрь "Әлифбанан бер себеш"** (А. Кивиряхк), монодрама. 12+

**16 октябрь "Зөләйха күҙҙәрен аса"** (Г. Яхина, Я. Пулинович). 16+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**14 октябрь Премьера! "Аҡ мөғжизә"** (М. Кәрим), бала саҡ төштәре. 12+

**15 октябрь "Аҡ мөғжизә"** (М. Кәрим), бала саҡ төштәре. 12+

**17 октябрь "Уйҙарымдан ғына юғалма..."** (И.Ғиләжев, З.Бураҡаева), Р. Гюнтекин әҫәре буйынса музыкаль драма. 18.00 12+

**18 октябрь "Аладдин"** (И. Казакова). 12.00 6+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**12 октябрь "Малыш и Карлсон"** (А. Линдгрен). 12.00, 14.00 0+

**"Гадкий утенок"** (Г.-Х. Андерсен). 16.00 0+

**16, 17, 18 октябрь "Гуси-лебеди"** (А. Чалухиди). 12.00, 14.00, 16.00 0+

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

## ЙӘШТӘР ТЕАТРЫНА...

**Ошо көндәрҙә Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры 30 йыллыҡ юбилей датаһын билдәләне. Тантаналы саралар театрҙың 31-се ижад миҙгелен асыу мәленә тап килде һәм актерҙар тамашасыларҙы концерт, театр тарихы тураһында төшөрөлгән фильм, яңы "Үлмәҫбай" спектакле менән һөйөндөрҙө.**



Театр коллективын Башҡортостан Хөкүмәте премьер-министры урынбаҫары Фәнүр Йәғәфәров ҡотланы: "Бөгөн беҙ республикабыҙҙың иң йәш ижади коллективтарының береһенә 30 йыл тулыуҙы билдәләйбеҙ. Йәш булыуына ҡарамаҫтан, театр Ғабдулла Ғиләжев етәкселегендәге студиянан репертуары ике телдә булған Милли театрға әүерелеү юлын үтте, - тине вице-премьер. - Театр 2006 йылдан алып ғорур йөрөткән Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәрим исемен хөрмәт итеүен оло кинәнес менән билдәләйем. Театрға тамашасының һөйөүе, иғтибары, тоғролоғо сикһеҙ. Йәштәр театрының ишеге йәш тамашасыларға асыҡ һәм уның коллективы оҫталығынан кескәйҙәрҙең театрға ылығыуы, киләсәктә үҙенең дә балаларын килтереүе тора. Театр был мөһим бурысты лайыҡлы үтәй". Шулай уҡ Фәнүр Йәғәфәров театр хеҙмәткәрҙәренә дәүләт наградалары тапшырҙы. Башҡортостандың халыҡ артисы тигән маҡтаулы исем Зифа Дәүләтбаева, Азат Йыһаншин, Альбина Кашанова-ға, ә Башҡортостандың атҡаҙанған артисы исеме Рәмзил Сәлмәнов, Дмитрий Гусев, Аида Кульбаева, Людмила Никитина, Светлана Бронниковаға бирелде. М. Кәрим исемендәге Фонд һәм яҙыусының ҡыҙы Әлфиә Кәримова байрам унайынан йыйы ҡотлау һүҙҙәрен еткереп, бергә хыялланырға, бергә ынтылырға һәм маҡсаттарҙы бергә тормошҡа ашырырға, тип теләне. Тантаналы сара артабан театрҙың башҡорт труппаһы ҡуйған "Үлмәҫбай" спектакле менән дауам итте. Уны Бөйөк Ватан һуғышына 75 йыл тулыуға арнап, М. Кәрим әҫәрҙәре һәм "Үлмәҫбай" поэмаһы буйынса Зөһрә Бураҡаева сәхнәләштергән, режиссеры - Рөстәм Хәкимов. Спектаклдә төп рольдәрҙе Илгиз Таһиров (Мостай) һәм Шәһит Хамматов (Үлмәҫбай) башҡара.

## ҺЫЛЫУҠАЙҘАР ҺАЙЛАНДЫ

**Көньяҡ-көнсығыш зонала "Һылыуҡай-2020" Бөтә Рәсәй башҡорт һылыуҡайҙары конкурсына кастинг үтте. Уҙғарыу урыны итеп Сибай ҡалаһы һайланды.**

Һайлап алыу турында Баймаҡ, Йылайыр, Ейәнсура, Күгәрсен, Хәйбулла райондары һәм Сибай ҡыҙҙары ҡатнашты. Уның һөҙөмтәләре буйынса Гран-призы Сибайҙан Шәүрә Яхина яуланы. Беренсе урынды Зөһрә Хайсарова (Күгәрсен районы) алды. Икенсе урынды Гөлдәр Һабаншина (Йылайыр районы) менән Юлиә Мөхәмәтйәнова (Сибай) бүлеште. Өсөнсө урында - Наҙгөл Байғотлина (Баймаҡ районы) һәм Айзилә Солтанова (Йылайыр районы). Аҙаҡҡы һайлап алыу туры 2020 йылдың 7 ноябрендә Өфөлә була. Конкурстың икенсе этабында ҡатнашыу өсөн ғаризалар 2020 йылдың 1 ноябренә тиклем ҡабул ителә. Беренсе һәм икенсе турҙа ҡатнашыусылар конкурс номерҙарын әҙерләргә тейеш: визитка (башҡорт телендә ҡыҫҡаса үҙең менән таныштырыу), ижади конкурс (башҡорт бейеүе, йыр/таҡмаҡ), дефиле. Жюри ағзалары ҡатнашыусыларға өҫтәмә һорауҙар бирергә хоҡуҡлы.

Уҙған аҙнала кастинг Ҡаҙанда ойошторолдо. 9 октябрҙә - Санкт-Петербургта, 11 октябрҙә Мәскәүҙә һайлап алыу турҙары була. Эпидемиологик хәлгә бәйле онлайн үткәрергә мөмкин, тип белдерҙе ойоштороусылар.

## ЙӘШТӘР ФЕСТИВАЛЕНӘ...

**2 октябрҙә Башҡортостан Республикаһының төньяҡ-көнсығыш зонаһы араһында (Салауат, Ҡыйғы, Дыуан, Мәсетле райондары) "Йәшлек-шоу - 2020" Бөтә Рәсәй йәштәр фестиваленә һайлап алыу этабы уҙҙы.**

Конкурста ҡатнашыу өсөн төп шарт, ҡатнашыусының йәшенән тыш, башҡорт телендә йырлау ине. Республика халыҡ ижады үҙәгенең матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, конкурс йомғаҡтары буйынса еңеүселәр билдәләнде: беренсе урын - Наҙгөл Отузова (Салауат районы), икенсе урын - Александр Васин (Мәсетле районы), өсөнсө урын - Ғилман Худайдатов (Дыуан районы).

Ҡатнашыусылар иҫтәлекле бүләктәр, ә еңеүселәр 5-10 мең һумлыҡ аҡсалата сертификаттар менән бүләкләнде, өҫтәүенә улар 3 октябрҙә Мәсәғүт ауылының төп майҙанында "Йәшлек-шоу - 2020" Бөтә Рәсәй йәштәр фестивале барышында башҡорт эстрадаһының популяр артистары ҡатнашҡан open-air концертында сығыш яһау мөмкинлеген алды.

## МЕКСИКА КҮРӘСӘК...

**"Мираҫ" йыр һәм бейеү ансамбле "Идальго" XXII Халыҡ-ара фольклор фестивалендә Рәсәй исеменән сығыш яһаясаҡ. Йыл һайын ойошторолған фестиваль 23 октябрҙән 30-на тиклем Мексиканың Пачука ҡалаһында үтә.**

Быйыл пандемияға бәйле сара онлайн форматында уҙғарыла һәм бөтә донъя халҡы Индонезия, Ҡытай, Филиппин, Грузия, Бенин, Боливия, Ботсвана, Украина, Панама, Куба һәм Рәсәй илдәренән 15 ижади коллектив сығышын, шулай уҡ Мексика Республикаһының 3 штаты ансамбле сығыштарын ҡарай ала. "Быйыл август айы аҙаҡтарында уҡ CIOFF мәҙәниәт эштәре буйынса вице-президенты Алехандро Камачо Гонсалестан фестивалдә ҡатнашырға саҡырыу килгәйне. Республиканы күрһәтергә шундуҡ ризалаштыҡ, был беҙҙең өсөн оло хөрмәт", - ти "Мираҫ" ансамбле директоры Байрас Ишбирҙин. Фестиваль социаль селтәрҙәр аша һәм Идальго штаты радио-телевидениеһында күрһәтеләсәк.

*БАШҠОРТСА ҺҮҘЛЕК*

## БИҘӘГЕ НИНДӘЙ?

**Беше** - прочный, плотный; крепкий
**Бешегеү** - уплотняться
**Бешекләү** - запаривать ткань
**Бешектереү** - уплотнять ткань
**Бешкән** *(урта)* - проваренный и отбеленный в щёлочи (холст, пряжа)
**Биҙәкәй** *(эйек-һаҡмар)* - 1) узор, рисунок; отделка, набойка (на ткани) 2) украшение
**Алма биҙәк** - крупные округлые узоры "яблоко"
**Бетеү биҙәк** *(мейәс)* - узор-аппликация из треугольников
**Бысҡы биҙәк** - узор-зигзаг "пила"
**Ҡыя биҙәк** *(һаҡмар)* - косой, наклонный узор на вязаном платке, в ткачестве
**Селтәр биҙәк** - сетчатый узор
**Сәскә биҙәк** - узор в виде цветов
**Туғыҙлы биҙәк** *(һаҡмар)* - узор на вязаном платке в виде девятки
**Тукмас биҙәк** *(һаҡмар)*, шаҡмаҡ биҙәк - квадратный узор на шали
**Тығыҙ биҙәк** - плотный узор
**Һалма биҙәк** *(ҡыҙыл, һаҡмар)*, **һалмабөтөй** *(һаҡмар)*, **һалмаһыр** *(дим)* - четырехугольные узоры на пуховой шали
**Һыҙма биҙәк** - узор в виде чёрточек
**Биҙәк өлгөһө** - трафарет

**Рәмилә КӘРИМОВА.**

**"Башҡортса-урыҫса туҡыусылыҡ һәм ҡул эштәре терминдары һүҙлеге" китабынан.**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## ИСЕМЕНДЕ ТАШҠА ЯҘМА...

### ил йөрәгенә яҙ

Ир ирек өсөн үлер.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле.)**

Бында табылған башҡа ерҙә лә булыр, әммә бында булмаған бер ҡайҙа ла табылмаҫ.

**(Вишвасара Тантра).**

Донъя минең теләккә буйһонмай.

**(Людвиг Витгенштейн).**

Иғтибарлы уҡыусы мотлаҡ уҡытыусы булыр.

**(Фарсы халыҡ мәҡәле).**

Юғалтҡанды күккә күтәреп маҡтау ҡиммәтле хәтирәләр барлыҡҡа килтерә.

**(Уильям Шекспир).**

Кешеләр бер төрлө фекерләгән ерҙә күп уйлап тормайҙар.

**(Уолтер Липпман).**

Ябай кешеләр менән теориялар тураһында аҙыраҡ һөйләшеп, йышыраҡ шуларға яраҡлы эшлә.

**(Эпиктет).**

Фекергә өлгөрөргә ваҡыт бир, әммә үтә ныҡ бешмәһен: үтә бешкән фекерҙәр, емештәр кеүек, файҙа килтермәй.

**(Виктор Гюго).**

Аҡылына һәм йөрәгенә күләгә төшөрөүе мөмкин булған етешһеҙлек, тип ҡурҡып, шиғыр яҙырға һәм ғашиҡ булырға ҡурҡҡандар ҙа бар.

**(Жан Лабрюйер).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт "Ыласын әтәсте былай тип шелтәләй ти: "Кәҙер белмәгән йән эйәһе! Һинең турала хәстәрлек күреп торған кешеләрҙе бөтөнләй яратмайһың. Улар һине йәштәү өсөн барыһын да үҙ ҡулдары менән башҡара, ашаталар, ин яҡшы тауыҡ һайлап бирәләр. Ә һин, кеше бер аҙға ғына яңғыҙ ҡалдырып торһа, осоп китергә ашығаһың, текмәгә менеп ҡасаһың, һәр саҡ сырайың һытыҡ, кикрикҡыйһең һәм үсҡән йортоңа кире ҡайтырға теләмәйһең... Мин үҙемдә бөтөнләй башҡаса тотам. Кешеләр мине тыуған ҡаямдан алып киткәс, оҙаҡ ҡына ас тотто. Бер аҙ ваҡыт үткәс, үҙҙәренә өйрәнә биргәйнем, ирекҡә ебәрә башланылар. Мин яңғыҙым осоп йөрөйөм, һунарҙа ҡатнашам һәм улар өсөн башҡа ҡоштарҙы аулайым. Теләгем булһа, кешеләргә кире әйләнеп ҡайтмаҫ инем". "Эш айышына төшөнмәгәнһең, - тип яуаплай әтәс. - Әгәр һин бер аҙ булһа ла ҡурылған ыласындарҙы күрһәң (мин уларҙы күргәнем юҡ, әммә ҡурылған әтәстәрҙе күп күрҙем), осоп китергә бер тапҡыр мөмкинлек алғас та, кире әйләнеп килмәҫ инең, моғайын..."**

1582218911006

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Сәрүәр СУРИНА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
9 октябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3007
Заказ - 812/10